ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

6-12 май (һабанай) 2017

№ 18 (748)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Беҙ һатлыҡ йән түгел... 3



Яугир улы 8



Һөнәренде дөрөҫ һайлау кәрәк 9



"Паровоз" килен 12



ТВ-программа 14

***Ниңә дәүләттәрҙе һуғыш иғлан иткән өсөн хөкөм итмәйҙәр? Әгәр халыҡ ошондай хөкөмдө талап итһә, әгәр ҙә улар бер ниндәй сәбәпһеҙ үҙҙәрен үлтереүгә юл ҡуймаһа, әгәр ҙә улар ҡоралды уларҙың ҡулына тотторған кешеләрҙең үҙҙәренә төбәһә - шул саҡта һуғыштар ҙа бөтәр ине...***

***МОПАССАН.***

БАЙРАМ УҢАЙЫНАН

**Етмеш икенсе тапҡыр Еңеү яҙын ҡаршылайбыҙ. Ер йәшәреп, тәбиғәттең уяныу мәленә тап килеүе лә хатта Бөйөк Еңеүебеҙҙең тормошто раҫлаусы көсө, бөтөн тереклекте ҡурсыусы тыныслыҡ символы булыуына бер ишара. Ваҡыт арауығы беҙҙе тарихыбыҙҙа ҡалған 1945 йылдың 9 майынан алыҫайтҡан һайын, күңелебеҙгә, аңыбыҙға тағы ла тәрәнерәк һеңеп, рухыбыҙға яҡыная ғына бара ул көн.**

# БЕҘ БЕЛГӘН ЯУГИРҘАР



Еңеү яулап, түштәре тулы орден-миҙалдар менән ҡайтҡан ветерандарыбыҙ сафы һирәгәйә барған һайын, икенсе Бөтә донъя һуғышында еңеүсе, донъяны фашизм ҡоллоғонан азат итеүсе совет һалдатына тере һәйкәл - "Үлемһеҙ полк" тантанаһына ҡушылыусылар арта бара. Был ысын мәғәнәһендә халыҡ ихтыярының, Ер йөҙөндә именлек хаҡына уның берҙәмлегенең тетрәндергес миҫалы. Рәсми мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, былтыр беҙҙең илдә генә ошо тыныслыҡ һәм еңеү тантанаһы һуғышта ҡатнашҡан атай-олатайҙары, яҡындарының фотопортреттары менән маршҡа сығыусы миллионлаған кешеләрҙе бер сафҡа, бер маҡсатҡа берләштерҙе. Рәсәйҙе генә түгел, сит илдәрҙе лә яҙғы ташҡын кеүек солғап алды ул: "Үлемһеҙ полк" акцияһы донъяның 40-тан ашыу илендә булып үтте. Әйткәндәй, халыҡ юғарынан бойороҡ буйынса түгел, ә үҙ башланғысында ойоштора һәм үҙ теләге менән сыға тыныслыҡ маршына. Был хаҡта үҙенең фронтовик атаһы портретын тотоп, "Үлемһеҙ полк" маршының алғы сафында халыҡ менән бергә атлаусы Владимир Путин да ошолай тип белдергәйне: "Был башланғыстың ҡиммәте шунда: ул кабинеттарҙа, административ структураларҙа түгел, ә халыҡ йөрәгендә тыуҙы". Ә йөрәктәген йолҡоп алып ташларлыҡ бер көс тә юҡ. Хәтер - мәңгелек, бер кем дә, бер нәмә лә онотолмай, тигәнде көүҙәләндерә бөгөн Еңеү көнө тантаналары. Шуның өсөн дә Икенсе Донъя һуғышында тар-мар ителгән фашистик ойошмаларҙың идеологияһын тергеҙергә маташыусы ҡара көс - неофашизм нисек кенә баш күтәрергә тырышмаһын, уларға планета буйлап атлаусы тыныслыҡ яҡлыларҙың ҡеүәтен күрһәтте, халыҡ хәтеренең һис ҡасан еңелмәҫ, ҡаҡшамаҫ көс икәнен иҫбатланы "Үлемһеҙ полк". "Мәрхүмдәр ҡәберҙәренән ҡубарылып, терелар менән бер сафҡа баҫҡас, Рәсәй бөйөк державаға әүерелер," - әйтерһең дә, аҡыл эйәһе, күрәҙәсе Ванганың ошо әйткәне бойомға аша бөгөн, бирһен Хоҙай! ...Үкенескәме, бәхеткә күрәме - яҡындарым араһында Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан кешеләр юҡ, тип әйтерлек. Яҡындан белмәһәм дә, ундайҙар ни бары икәү шулай ҙа: береһе - атайымдың фронттан Еңеү яулашып иҫән ҡайтҡан ике туған ағаһы Ғәлимйән Зариф улы Иҙелбаев (ул да мәрхүм инде); икенсеһе - әсәйемдең йәшләй генә Курск дуғаһы ғәрәсәтендә ятып ҡалған бер туған ағаһы Хәйретдин Низам улы Биктимеров. Олатайҙарҙың тәүгеһен һирәкләп кенә күргәнем булһа ла (эше буйынса ул ғаиләһе менән төрлө ергә күсенеп йөрөнө), яҡындан аралашырға тура килмәне, ә икенсеһе яуға киткәндә,мин донъяла булмағанмын әле. Уның ҡарауы, аҙаҡ өйөбөҙҙөң түрендә гимнастерка кейгән пилоткалы йәш кенә был олатайҙы көн дә күрә инем: әсәйем ағаһының ҙурайтылған фотоһүрәтен рамлап, уға сигеүле һөлгө ябып, йыш ҡына туҙанын һөртөп, ҡәҙерләп һаҡлар булды. Хәйретдин олатайҙың ут эсенән яҙған хаттары һаҡланмаған, ҡайҙа ерләнеүе хаҡында ла бер ниндәй мәғлүмәт юҡ. Шунлыҡтан, оятҡа күрә булһа ла, был олатайҙар хаҡында башҡа бер ни ҙә әйтә алмайым...

Әбына "Башҡортостан" гәзите редакцияһында оҙаҡ йылдар бергә эшләү бәхете тейгән һуғыш ветерандары хаҡында күп нәмәләр һөйләргә булыр ине. Байтаҡ ине улар беҙҙең коллективта: Абдрахман Баязитов, Дәүләтгәрәй Мәһәҙиев, Аҡмал Саптаров, Файыҡ Мөхәмәтйәнов, Фәтих Абдуллин, Фәтхулла Комиссаров, Мөхтәр Тимербулатов, Анатолий Виноградов һәм башҡалар. Еңеү яулап ҡайтҡан абруйлы ветерандар ғына түгел, талантлы журналистар ҙа, талапсан, ләкин шул уҡ ваҡытта ғәҙел һәм кеселекле остаздар ҙа ине улар беҙҙең өсөн. Ветерандар, тип әйтеү менән ошо ағайҙар араһынан үҙенең өлгөрлөгө (ә был сифат журналистикала иң кәрәге), эшсәнлеге, айырым бер итәғәтлелеге менән абруй ҡаҙанған фотохәбәрсебеҙ Анатолий Михайлович Виноградов күҙ алдына баҫа.

(Дауамы 2-се биттә).

## ӨСМӨЙӨШЛӨ ХАТТАР

***Һандыҡ төптәрендә***
***Яулыҡ эстәрендә,***
***Йәшерелгән сит-ят күҙҙәрҙән,***
***Өсмөйөшлө хаттар -***
***Тотонмаһын яттар,***
***Һағыш тама һеҙҙең һүҙҙәрҙән.***

***Һарғайышҡан биттәр,***
***Күпме ҡайнар хистәр***
***Һеҙгә теҙеп яҙған батыр ир:***
***Ярты донъя гиҙеп,***
***Дошмандарҙы иҙеп,***
***Еңеп ҡайтыр, көтһөн тыуған ер!***

***Һөйөп-һаҡлап ҡулдар,***
***Тиҫтәләгән йылдар***
***Һандыҡ төптәренән алалар...***
***Өсмөйөшлө хаттар -***
***Тотонмаһын яттар,***
***Һуғыш күрмәһендәр балалар!***

**Фирүзә АБДУЛЛИНА.**

12+

ИҒТИБАР!

## МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу дауам итә. Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 559 һум 56 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) - 589 һум 56 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары өсөн - 447 һум 64 тингә яҙыла алаһығыҙ.**

Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп торабыҙ икәнде беләһегеҙ. Гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер, гәҙәттәгесә, матур китаптарға лайыҡ буласаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы **kiskeufa.ru** сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн онлайн яҙылыу " һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 420 һумға яҙылырға була.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урыныңызға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - 258 һум.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 258 һум.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **kiskeufa@mail.ru**.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**11-21 майҙа үтәсәк "Бөтә Рәсәй декадаһы"нда үҙәк баҫмаларға - 5, республика, район, ҡала баҫмаларына 10 процентҡа арзаныраҡ хаҡҡа яҙылырға мөмкин буласаҡ.**

**Тыуған телдәге баҫмалар тиражы - ул милләткә лә мәртәбә, абруй өҫтәй икәнен иҫтән сығармайыҡ.**

БАЙРАМ УҢАЙЫНАН

# БЕҘ БЕЛГӘН ЯУГИРҘАР



**(Башы 1-се биттә).**

Яугир ағайыбыҙ тыныс хеҙмәттә лә хәрбиҙәрсә теүәллек һәм тәртип өлгөһө күрһәтә ине беҙгә. Мөхәррир, фәлән-фәлән хужалыҡтан яҙғы сәсеү барышынан фоторепортаж иртәнге туғыҙға өҫтәлемдә ятһын, ти икән, бындай заданиеның үтәлмәй йә һуңлап ҡалған сағы булманы. Командировканан һуң өйөнә лә ҡайтмай, төндә эшләнә эшләгәндәр- уныһын бер кем белмәне - әммә теләһә ҡайһы райондан да материалды өлгөртөр ине Виноградов ағайыбыҙ. Шәхес булараҡ та иҫ киткес итәғәтлелеге, кеселеклелеге, эшкә яңы ғына килгән йәш хеҙмәттәштәренә лә ихтирам менән "һеҙ" тип өндәшеүе иҫтә ҡалған. Башҡа тонды белмәне, гәрсә үҙенә ҡарата бәғзе бер дорфараҡ мөхәррирҙәрҙең тупаҫлығын башынан кисерергә тура килгәндә лә. Ҡайһы берәүҙәр кеүек, кешелеклелеген, кеселеклелеген кәйеф самаһына ҡарап өләшмәне. Аяуһыҙ һуғыш юлдарын үткән, күпте күреп, күпте кисергән капитан 1960 - 1980-се йылдарҙағы шаулы хеҙмәт фронтының ябай бер һалдаты булып ҡала алды. Яйлап, иркенләп, йәйелеп ултырыуҙы белмәне. Еңел көүҙәһен хәрбиҙәрсә төҙ тотоп, шәп-шәп атлап йөрөр ине һәр саҡ. Күп эшләнө. Үҙе иҫән саҡта бер нисә тапҡыр шәхси фотокүргәҙмәһен ойошторҙо. Уның бай архивы Башҡортостаныбыҙҙың Бөйөк Ватан һуғышынан һуңғы бөтөн тарихын сағылдыра ине. Тыныс тормоштоң ҡөҙерен белеп, уны ижадында данлап, оҙон ғүмер юлы үтте ветеран Анатолий Михайлович. Ә иң мөһиме - үҙ өлгөһөндә, аҡыл һатмай ғына баш баҫып эшләп, йәштәрҙе хеҙмәткә, күңел биреп эшләргә өйрәтте. Асылда, уның бындай тормош өлгөһө барлыҡ башҡа ветерандарыбыҙға ла хас ине. Улар, үҙ эҙмыштарына төшкән оло һынауҙы ана шулай фиҙаҡәрлек менән еңеп сығып, дәрәжәләрен белеп, выждандары ҡушҡанса намыҫлы йәшәп һәм эшләп, үҙҙәре хаҡында яҡты хәтирәләр генә ҡалдырып китте... Беҙ белгән яугирҙар ана шундай ябай, ләкин ҡаһарман шәхестәр ине.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

КӨНАУАЗ

# ҮҘЕҢДЕКЕН МАҠТА...

## үҙеңдекен файҙалан!

**Европаның Рәсәйгә эмбарго иғлан итеүен, ниһайәт, үҙебеҙҙә етештерелгән тауарҙарға йөҙ борорбоҙ, төбәктәр үҙҙәренең продукцияһын эске һәм тышҡы баҙарға сығарып, файҙа күрер тигән һәм башҡа бик күп хыялдар менән ҡабул итеп, илһамланып, ал күҙлектәребеҙҙе кейеп ҡаршы алғайныҡ. Әммә ысынбарлыҡ уйлағандан күпкә ҡатмарлыраҡ булып сыҡтымы, әллә уны үҙебеҙ ҡатмарлаштырабыҙмы - аңламаҫһың.**



Бөгөн ошо ватан етештереүсеһенең продукцияһын ни өсөндөр бары тик туҡланыу баҙарына ғына ҡайтарып ҡалдырабыҙ, шикелле. Кемдер берәү әйтмешләй, һаман да ҡорһаҡ менән уйлауҙан арына алмайбыҙ. Бындай фекергә килергә ярты йыл һайын уҙғарылған матбуғат сараларына яҙылыу кампанияһын күҙәтеп йөрөү һәм күптән түгел үткән "Милли матбуғат: проблемалар һәм уларҙы хәл итеү юлдары" темаһына арналған матбуғат конференцияһы мәжбүр итте. Йәшерен-батырыны юҡ, бөгөн был тармаҡ ауыр көндәр кисерә, тиергә лә мөмкин. Бер яҡтан, баҫмаларҙы интернет-версияға күсереү тураһында һүҙҙәр ҡуйыра. Әйе, заман менән бергә атлайым тиһәң, был варианттан баш тартырға ярамайҙыр, моғайын. Сөнки бөгөнгө һәм киләсәк кешеһе гәзиттәрҙе юл ыңғайы ғына - интернеттан уҡый. Әммә, баҫма матбуғатты һәм әҙәбиәтте уҡыусылар ҙа бар, ауыл ерҙәрендә йәшәүселәр, өлкән йәштәге йәки үҙҙәре ошо өлкәлә эшләүсе кешеләр һаман да был вариантҡа өҫтөнлөк бирә. Әгәр милли гәзит-журналдарыбыҙҙы һаҡлап ҡалабыҙ тиһәк, уларҙы бөгөндән интернет-версияға нисек тә еңелерәк күсереү хаҡында ла уйлай башларға кәрәк.

Икенсе проблема: милли матбуғатка яҙылыу. Башҡорт телендә генә түгел, ғөмүмән, Башҡортостанда донъя күргән баҫма продукция - ул шул уҡ ватан продукцияһы. Тимәк, уны халыҡҡа тәҡдим иткәндә лә беҙ ошо күҙлектән сығып эшләргә, йәғни дәртләндереү саралары ла тиражды арттырыуға йәки продукцияны һатыуға ярҙам итергә тейеш. Был йәһәттән "Киске Өфө" гәзитен өлгә итеп күрһәтергә мөмкин. Бында система шундай: гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә донъя күргән китаптар бүләк итеп бирелә. Йәғни гәзиткә яҙылыу башҡорт китаптарын уҡыусыһына еткереүгә лә булышлыҡ итә. Республика кимәлендә эшләүсе БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары буйынса агентлыҡ ҡарамағында ойошторолған "Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто ошо уҡ схеманы тормошҡа ашыра, әммә унда яҙылыусыларға бүләккә сервиздар, стакандар йыйылмаһы, плед, шампурҙар һ.б. тапшырыла. Йәғни, ватан продукцияһын (үҙ тармағында сығарылған әйберҙәрҙе) алған өсөн яҙылыусыларҙы икенсе тармаҡта етештерелгән продукция менән бүләкләй. Ә шул уҡ тармаҡта эшләүсе "Китап" нәшриәтенең продукцияны йәки башҡа матбуғат баҫмаларына яҙылыу менән бүләкләү файҙаға ғына булмаҫ инеме икән? Беренсенән, шул уҡ тармаҡтың продукцияһы реализациялана, икенсенән, тармаҡҡа килем килә, өсөнсөнән, гәзиткә яҙылыусы тағы бер матбуғат баҫмаһын алдырып ҡыуана. Донъя кимәлендә билдәле селтәрле маркетинг компаниялары эшен ҡараһаҡ, улар бер ваҡытта ла үҙ продукцияһын маҡтап, рекламалап, башҡа етештереүсенекен һатмай бит. Ҡулланыусыһын дәртләндереү өсөн дә аҡсаны икенсе компания әйберҙәрен алыуға тотонмай. Йәғни тармаҡ аҡсаһы ошо тармаҡ эсендә әйләнештә йөрөй, уны үҫтереүгә һәм камиллаштырыуға тотонола, сөнки үҙеңдекен маҡтап, икенсе тармаҡ продукцияһы менән ҡулланған бер генә компания ла, бер генә тармаҡ та, бер генә ойошма ла ышаныс тыуҙырмай...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфө тауыш биреү йомғаҡтары буйынса 500 меңдән ашыу кеше йәшәгән биш ҡала иҫәбенә инеп, "Дан аллеяһы" акцияһында еңеү яулаған ҡалаларҙың береһе булды. Ағастар Өфөлә, Ҡазанда, Тулала, Санкт-Петербургта һәм Мәскәүҙә ултыртыласаҡ. Дан аллеяһы Өфөнөң Совет районында "Еңеүҙең 50 йыллығы" скверында ултыртыла. Ағас ултыртыу 6 майҙа сәғәт 11-ҙә башлана. Бөтәһе 350 саған, 150 артыш һәм 100 сауыр ултыртыу күҙаллана. Ҡала халҡын сарала әүҙем ҡатнашырға саҡыралар.

✓4 майҙан Башҡортостанда янғынға ҡаршы махсус режим индерелде. Был урман янғындарын иҫкәртеү өсөн билдәле сикләү сараларын ҡулланырға мөмкинлек бирәсәк. Башҡортостан Хөкүмәтендә үткән кәңәшмәлә билдәләүҙәренсә, һуңғы ваҡытта республикала, бөтә илдәге кеүек үк, урман янғындарына бәйле хәл ҡатмарлашты.

✓"Ватандаш" республика журналы Рәсәй ғилми өҙөмтә килтереү индексына индерелгән. Хәҙер авторҙарҙың журналда баҫылған ғилми хеҙмәттәре Library.ru порталында урынлаштырыла. Интернет менән эш итеүселәр уларҙы мәғлүмәт алыу, ғилми эш һәм уҡыу өсөн файҙалана ала.

✓2017 йылдың 1 ғинуарына ҡарата республикала уртаса пенсия 11 806 һум тәшкил иткән. Был хаҡта, Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе мәғлүмәттәренә һылтанып, Башҡортостанстат хәбәр итә. Сағыштырыу өсөн: 2016 йылдың 1 ғинуарында ул 11 420 һумға тиң булған.

✓Өфөлә "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле коллективын яңы директор менән таныштырҙылар. Ул - быға тиклем Республика халыҡ ижады үҙәге етәксеһе булып эшләүсе Байрас Вәли улы Ишбирҙин. Быйыл "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле ойошторолоуға 25 йыл тула, уның әлеге күп йүнәлешле статус алыуына - 10 йыл.

✓Һуңғы йылдарҙа республика урамдарында һәм юлдарында мотоциклдар һәм скутерҙар һанының артыуы күҙәтелә. Руль артында үҫмерҙәрҙе лә йыш күрергә мөмкин. Республика юлдарында мотоциклсылар ҡатнашлығында 99 авария теркәлгән. Ошо юл-транспорт ваҡиғалары һөҙөмтәһендә һигеҙ кеше һәләк булған һәм 120-һе йәрәхәтләнгән. Республиканың Дәүләт автоинспекцияһы ошо транспорт менән бәйле аварияларҙы кәметеүгә йүнәлтелгән иҫкәртеү сараларын башланы.

ҺУҒЫШ ШАНДАУЫ

**Күңелемдә күптән бер һуғыш тарихы йөрөй. Уныһы ла телдән-телгә күсеп килеп еткән. Мине әҙәби әҫәр итеп яҙыр типтер инде, бер апай һөйләгәйне. Уға ҡасандыр журналистика өлкәһендә эшләгән икенсе апай һөйләгән. Ул апайға алтмышынсы йылдарҙа бер һуғыш ветераны булған олатай һөйләп киткән. Көн дә редакцияға эшкә барған ҡатынды шул тирәлә йәшәгән һәм йыш ҡына урамда осрашып һаулашып йөрөгән бер бабай туҡтатҡан да, ҡыҙым, һин бит гәзит кешеһе, һиңә һөйләр һүҙем бар, тигән. Апай тыңлаған, әммә ул заманда был тарихты гәзиткә сығарырға батырсылығы етмәгән. Яҙған хәлдә лә, әҙәм ышанмаҫ йәки үткәрмәҫтәр ине. Киләһе апай ҙа, һөйләп тә, яҙып та уҡыусыны ышандыра алмам, тип уйланым, тип, был хәбәрҙе миңә еткерҙе. Хәл ошолай булған.**



# БЕҘ ҺАТЛЫҠ ЙӘН ТҮГЕЛ...

Төпкөл башҡорт ауылынан һуғышҡа алынған йәш башҡорт егете үҙ ғәскәрендә районы менән бергә тура килә. Ике башҡорт һәр ваҡыт бергә йөрөргә тырыша, бер-береһенә тыныс тормоштағы хәл-әхүәлдәре, туған-тыумасалары тураһында һөйләп, уртаҡ таныштарын асыҡлап, бөтөнләй яҡынлашып китә. Һуғыштың иң ҡыҙыу мәлдәрендә, беҙҙекеләрҙең әле сигенеү осоронда, бер бик ҡаты алышта еңелергә тура килә һәм совет һалдаттарының бер төркөмө ҡамауҙа ҡалып, пленға эләгә. Шулар араһында теге ике башҡорт та булып сыға.

Ҡулға алынған һалдаттарҙы фашистар территорияһындағы ауылға алып килеп, һарайға ябалар. Унан башлана һорау алыуҙар, яҙалауҙар. Рухтары йомшағыраҡ булғандар бер-ике көн туҡмалыуҙан һына, бөтөн белгәндәрен һөйләй, иптәштәрен һата башлай. Үкенескә ҡаршы, беҙгә билдәле геройҙың да районы шулай итә. Иптәшенең һатылғанын ишеткән икенсе башҡорт егете, асыуына түҙмәй, башҡортсалап һүгенеп, уны әрләй. Хатта түҙмәйенсә йүгереп килеп, йоҙроҡлап дөмбәҫләй башлай. Ике башҡорт, башҡортсалап һүгенешеп-ҡысҡырышып, һорау алыусы немецтәрҙе аптыратып, көрмәкләшеп китәләр. Быны ҡыҙыҡ күргән фашистар хәҙер инде быларҙы һөсләтеп һуғыштыра. Арығансы айҡаша был икәү. Саҡ айырып алалар. Бынан ары был ике башҡортто бер һарайҙа тотоу мөмкин булмай башлай. Беҙҙең герой милләттәшенең һатлыҡ йән булыуы менән һис килешә алмай, "Ошонда үлтереп китәм мин һине", ти ҙә, әйләнгән һайын тегегә барып йәбешә икән. Яҙалау отряды башлығы уларҙың был ҡыйнашыуын, туҡтауһыҙ һүҙ көрәштереүен күҙәтә торғас, һорай ҡуйған: "Һеҙ кемдәр, ниндәй милләттән?" "Башҡорттар!" - тип яуаплай егет. "Һин ни өсөн башҡа һатлыҡ йәндәрҙе тыймайһың, бында бит бер һинең дуҫың ғына түгел, башҡалар ҙа бер-береһен һата", - ти икән немец офицеры. "Башҡорт һатлыҡ йән түгел, беҙ батыр халыҡ!" - ти уға тотҡон.

Был ике башҡорт тотҡонон айырып бикләһәләр ҙә, ҡыҙыҡ күреп, ваҡыты-ваҡыты менән сығарып һуғыштырып алалалар икән. Әтәс уйынылай күреп, тамаша ҡылып, күңел аса фашистар. Бер милләттән булған егеттәрҙең, тотҡонлоҡта, тере ҡалыуға бер өмөт булмаған ерҙә, үҙҙәре яҙаланған, туҡмалған хәлдә лә, ниндәйҙер намыҫ төшөнсәләре сиктәрендә аймылыш булып, шулай алҡымдарынан алышҡаны был ят халыҡҡа аңлашылмай, әлбиттә. Улар быны уйын итеп кенә күрә.

Бер көндө төндә беҙҙең геройҙы әлеге немец офицеры саҡыртып ала. Саҡырта ла, бөтөнләй әҙәм ышанмаҫ тарих һөйләй: "Минең ысын исемем Моратулла. Мин тәүге империалистик һуғыш ваҡытында Германияла әсирҙә ҡалған башҡорт һалдатының улымын (атаһының исемен дә әйтә, тик герой уны онота). Әсәйем немка. Атайымдың тыуған төбәген асыҡ ҡына белмәйем, артыҡ ҡыҙыҡһынғаным булманы бала саҡта. Ҡустым бар, уның исеме Абдулла. Тик документтар буйынса беребеҙ Марат, икенсебеҙ Альберт булып киттек. Атайым иртә үлде, оҙаҡ ауырып ятты. Шул ятҡанында, үлерен белгәстер, мине саҡырып алып, былай тине: "Улым, мин тыуған илемде һағыныуҙан үләм. Ғүмер буйы төшөмә шундай күренеш инде: далала таң ата, ҡыҙарып ҡына ҡояш күтәрелә, ҡолағыма ат тояғы тауышы ишетелә, бына һыбайлы ла күренә, ул дыулап сабып килә, ҡараһам, ул сапҡын мин үҙем, йөрәгем шундай елкенә, ҡаным уйнай, күңелем өҫкә-күккә күтәрелә, мин сабам, сабам, сабам... Уянһам, быларҙың береһе лә юҡ. Һығылып илайым..."

Ошо ваҡиғанан һуң күп йылдар үтте, мин хәрби уҡыуға индем, хеҙмәт иттем, һуғыш башланғас, фронтҡа алындым. Атайымдың кем булыуын берәүгә лә һөйләмәнем, үҙем дә уны юғалған индеец ҡәбиләһе вәкиле кеүек кенә ҡабул итә инем. Әммә уның ҡаны үҙенең барлығын һиҙҙерҙе. Һуңғы йылдарҙа мине ҡайҙалыр нимәләр тарта. Хатта был һуғышҡа ла, бәлки, ана шул саҡырған нәмәне табырмын кеүек булып сыҡҡайным. Йыш ҡына атайымдың төшөн күрәм: далала атта сабам, сабам, сабам... Йөрәгем тулай, ҡаным ярһый... Ә асылда атҡа яҡын барғаным да юҡ.

Һин минең атайымды хәтерләтәһең. Уның шулай тыуған илем, ватаным тип йән атыуы, ғүмер буйы шул һөйөүенә тоғро булыуы, хатта илем тип һарғайып үлеүе лә әлеге һинең йәнең ҡыл өҫтөндә көйө өҙөшөүеңә оҡшаған ине. Иртәнсәк әсирҙәрҙе, һинең баяғы иптәшеңде лә атасаҡтар. Атайым рухына хөрмәт йөҙөнән мин һине ебәрәм. Һин, әгәр тере ҡайтһаң, үҙ илеңдә ошо хаҡта һөйлә, йәме. Илеңә әйт, һинең шундай-шундай улың, һиңә тоғро үлде, тиген..."

Немец офицерының хәбәрен нисек ҡабул итергә лә белмәй һалдат. Алдайҙыр, атыр алдынан албырғаталыр, тип уйлай. Офицер уны алып сығып, ауыл ситенәсә оҙатып, йүнәлеш биреп ебәргәс тә, ана атыр, бына атыр, тип килә. Шулайтып алыҫлашып барып, күҙҙән юғала. Үҙебеҙҙекеләргә юлыҡҡансы бәрелеш эсенә эләгеп, ҡаты яралана. Контузия хәлендә госпиталгә килеп эләгә. Шунда ауыр хәлдә ошо тарихты үҙенә операция яһаған хирургка һөйләй. Врач иһә, был хаҡта берәүгә лә, бер ваҡытта ла һөйләмәҫкә кәңәш итә. "Бының өсөн һине тотоп атасаҡтар", - тип киҫәтә.

Һуғыш тамамланғас, баяғы һатлыҡ йән районының ғаиләһен барып таба, уның менән бергә булыуын, ҡаты алыштарҙың береһендә батырҙарса һәләк булып ҡалыуын һөйләй. Аҙаҡ оҙаҡ йылдар ғаиләһенә ярҙам итеп, балалары менән аралашып йәшәй.

Бөгөн инде ул ҡарт һалдаттың булмағанына ла тиҫтәләгән йылдар. Ул был хәлде тәүге апайға һөйләгәндә, бик өҙгөләнеп, ошо хаҡта барыһына ла белдертергә теләп һөйләгән, тиҙәр. "Һеңлем, яҙ әле, бәлки, шул ситтә йәшәп үлгән һалдаттың зат-ырыуы уҡыр һәм сәләмен ҡабул итер. Һис юғы кешеләр шул хаҡта белһен ине", - тип әйткән булған имеш ул.

Бөйөк Еңеүҙең сираттағы байрамы алдынан, был телдән-телгә күсеп килеп еткән тарих, тыуған ерҙәренән ситтә ҡалған башҡорт яугирҙарының һынмаҫ рухы, һөйөү тулы сәләме булып ҡабул ителһен ине...

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 15 ЙЫЛ

# МИЛЛИ БАҪМА - РУХИ СЫҒАНАҠ

**Милли матбуғат бер ҡасан да юҡҡа сыҡмаясаҡ. Йыш ҡына интернетта, гәзит-журналдар тиҙҙән булмаясаҡ, тигәнерәк һүҙҙәр күҙгә салынып ҡала ул. Тик мин бының менән бөтөнләй килешмәйем. Әлбиттә, гәзит мәғлүмәт еткереүсе булараҡ, тиҙлек йәһәтенән бөгөн интернетҡа ҡарағанда ҡайтышыраҡ. Әммә милли баҫма, тәү сиратта, рухи сығанаҡ. Унан беҙ яңылыҡ түгел, унда беҙ үҙебеҙҙең асылыбыҙҙы эҙләйбеҙ. Милли баҫма яҙғанды интернеттан табып та булмай.**

Дөрөҫөн әйткәндә, интернетта теләгән кеше теге йәки был мәсьәләгә үҙенең фекерен белдерә, үҙен күрһәтә ала, күберәк ошо ылыҡтыра халыҡты. Ошо йәһәттән "Киске Өфө"нө өлгө итеп билдәләргә була, ул үҙ уҡыусыларына таянып ижад итә. Баҫма ниндәй йүнәлештә генә эшләмәһен, ул һәр ваҡыт асыҡ булырға тейеш. Гәзиттең ошоно 15 йыл элек, тормошобоҙға интернет үтеп өлгөрмәгән мәлдә үк аңлауы уны ижад итеүселәрҙең үҙе йәшәгән дәүерҙе дөрөҫ тойоуы һәм аңлылығы тураһында һөйләй. Бөгөн беҙ хат яҙыуҙан туҡтаныҡ, тибеҙ, ә бына "Киске Өфө"гә, авторҙары ишле булыуына ҡарағанда, әле лә хаттар күпләп киләлер, моғайын.

Әйе, элекке "тотошлай уҡыған" быуынға алмашҡа "һайлап уҡыусы" быуыны килде. Был шарттарҙа ла "Киске Өфө" уңышлы эшмәкәрлек алып бара, уның үҙ уҡыусыһы бар. Ул, тәү сиратта, рухлы, үҙ халҡы яҙмышына битараф булмаған уҡыусы. Миңә, мәҫәлән, тарихыбыҙ тураһында мәҡәләләр ҙә, данлы йәштәребеҙ ҙә, милләтебеҙҙең киләсәген үҫтергән матур башҡорт ғаиләләре тураһында уҡыу бик ҡыҙыҡ. Уларҙың төрлө мәсьәләләргә ҡарата фекерҙәрен уҡып, оҙаҡ ҡына уйланып йөрөйөм. Башҡорт яҙыусыларын да гәзиткә ылыҡтырып, улар менән бәйләнеш булдырыу ҙа яҡшы. Ҡасандыр улар халыҡҡа яҡыныраҡ ине, бөгөн дә ябай халыҡ яҙыусыларға оло ихтирам менән ҡарай, уларҙың фекеренә ҡолаҡ һала. Яңы хикәйәләр, повестарҙы көтөп алам. Яҙыусылар менән берлектә викториналар ойоштороу ҙа ҡалай отошло алым булды йәштәрҙе китап уҡыуға ылыҡтырыуға! Халыҡ медицинаһына, йолаларыбыҙға, хатта башҡорт юморына ла һаҡсыл ҡарашы күңелгә ята "Киске Өфө"нөң. Шуға ла киләсәктә гәзиттәр булмаҫ ул, тигән уй минең башыма инеп тә сыҡмай. Сөнки гәзит-журналдар, ысынлап та, рухи сығанаҡ, улар халыҡҡа гел кәрәк буласаҡ.

**Миңлегөл ҠАНСУРИНА,**
**БДУ доценты.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Ошо миҙгелдә ҡала территорияһын сысҡандарҙан, талпандарҙан, серәкәйҙәрҙән һәм ҡарышлауыҡтарҙан эшкәртеү - иң мөһим сараларҙың береһе. Йәмғеһе 555 гектар ер - талпанға, 320 гектар - серәкәйҙәргә, 480 гектар - һыу сығанаҡтарындағы серәкәй ҡарышлауыҡтарына, 10400 гектар кимереүселәргә ҡаршы эшкәртеләсәк. Нигеҙҙә, улар халыҡтың күпләп ял итеү урындары. Эшкәртелгәндән һуң территорияларҙа ҡулланылған сараларҙың һөҙөмтәлелеге тикшереләсәк.

✓ Сираттағы оператив кәңәшмәлә Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, йылылыҡ биреүҙе туҡтатыуға ғаризалар булғанда, миҙгелде тамамлау буйынса эш башларға ҡушты. Шулай уҡ мәктәпкәсә балалар учреждениеларында һәм мәктәптәрҙә был мәсьәлә буйынса эш алып барыу бурысын йөкмәтте. Күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәр ҡала буйынса йылылыҡты туҡтатыуҙы көтмәйенсә, анығ үҙ йорттарына ғына кәметеүҙе һорай ала.

✓ 9 майға тиклем Өфөлә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм уларға тиңләштерелгән категория граждандары өсөн тауарҙарға төрлө ташламалар, шулай уҡ бөҙрәхана, мунса-кер йыуыу, химчистка, аяҡ кейеме ремонтлау хеҙмәттәренә льготалы хаҡтар ҡаралған. Улар менән файҙаланыу өсөн таныҡлыҡ булыуы мотлаҡ.

✓ Башҡортостанда бер нисә көн эсендә Әүжән, Бөрйән, Дыуан, Күгәрсен, Макаров урмансылыҡтарында ундан ашыу урман янғыны теркәлгән. Урман янғынын күргән осраҡта (347) 218-14-14 һандары буйынса диспетчер хеҙмәтенә йәки 8-800-100-94-00 телефоны буйынса берҙәм бушлай урман һағына шылтыратырға кәрәк, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Урман хужалығында.

✓ Өфөлә алты адрес буйынса талпан энцефалитына ҡаршы ашығыс иммунопрофилактика алырға мөмкин. Ул - 21-се ҡала клиник дауаханаһы (Урман тыҡрығы урамы, 3, 3-сө корпус), тел. (347) 232-54-91; 5-се ҡала дауаханаһы (Цюрупа урамы, 84), 250-68-00; 10-сы ҡала клиник дауаханаһы (Горький урамы, 47), 243-25-38; 4-се балалар поликлиникаһы (Орджоникидзе урамы, 15), 263-15-97; 5-се балалар поликлиникаһы (Маршал Жуков урамы, 18), 241-27-97 һәм 6-сы балалар поликлиникаһы (Аксаков урамы, 62), 250-59-46.

**"Башинформ"дан.**

*МИН БЕЛГӘН ЯУГИР*



# ИКМӘКТЕҢ ҮҘЕН КҮРМӘНЕК,

## әммә атамаһын онотманыҡ

**Һуғыш йылдарында тыуған баламын. Бала саҡтың бер ваҡиғаһы әле лә күҙ алдымда: өс туған Имаметдин ағайым ауылыбыҙға ҙур вертолет менән ҡайтып төшә. Ташаҫты ауылының бөтөн балалары йән-фарман уға ҡарай йүгерәбеҙ, вертолетты уратып алабыҙ. Ул беҙҙе вертолетҡа ултыртып, һауаға күтәргәне лә бар ине. Оҙаҡ йылдар "Өфө" аэропортында техник булып эшләгән Имаметдин Сәлимгәрәй улы Әбүзәров һуғыш ветераны ла.**

Беҙ бер ауылда - Ғафури районы Ташаҫты ауылында тыуып-үҫкәнбеҙ. Башҡалар вертолетты яҡындан күргәне лә булмағанда, беҙ шулай ауылыбыҙ тирәһендәге матур тәбиғәтте һауанан күреү бәхетенә эйә инек. Имаметдин ағай 1925 йылғы, Бөйөк Ватан һуғышы башланған мәлдә 16 йәшлек үҫмер була. Хатта 10 класс белемде лә һуғыштан ҡайтҡас, Өфөлә ала ул. Ә һуғыштан граждандар авиацияһы технигы булып ҡайта.

Һуғышҡа алынғас та, уларҙы башта Тоцкий хәрби полигонында уҡыталар. "Һуғыш, унда бергә булған дуҫтар бөгөн дә төштәремә инә", тиһә лә, һуғыш тураһында әллә ни һөйләргә яратмай ул. "Пехотаға эләктем, буйға оҙон булғас, миңә ҡул пулеметы бирҙеләр. Эргәмдә миңә патрондар ташып йөрөүсе ярҙамсым да булды. Һуғышҡа ингән тәүге айҙа уҡ еңелсә яраландым. Курск өлкәһендә санбатта дауаландым да кире фронтҡа киттем. Икенсе тапҡыр Украинаның Житомир өлкәһенең Малин тигән ҡалаһы эргәһендә яраландым. Унан мине санитар поезд менән Орскиға госпиталгә ебәрҙеләр. 44 йылдың май айында унан сыҡҡас та, ошо Ырымбур өлкәһендә авиацияға эләктем һәм һуғыш тамамланғансы авиацияла булдым. Беҙ, техник состав, ИЛ-2 совет штурмовигын һәм вертолеттарҙы хеҙмәтләндерҙек". Имаметдин Сәлимгәрәй улы 1952 йылдарҙан һуң ғына хәрби хеҙмәттән бушатыла. Ошо мәлдән унының яҙмышы "Өфө" аэропорты менән бәйле. Орден һәм башҡа наградаларға лайыҡ булған. Әле ул Өфөлә йәшәй. 91 йәштә булыуына ҡарамаҫтан, һаман да йәштәрсә дәртле, шаян. Бер бөртөк улы иҫән түгел инде, ейәне олатаһының ныклы терәге, ярҙамсыһы. "Бөгөнгө йәштәр уҡып белем алһын һәм ниндәй генә һөнәр эйәһе булһалар ҙа, үҙ эштәрен яратһын. Шул саҡта ғына илебеҙ көслө, ҡеүәтле буласаҡ", - ти һуғыш ветераны.

Был һуғышҡа 28 генә йорттан торған Ташаҫты ауылы 37 ир-азаматын оҙата. Уларҙың 20-һе һуғыш яланында һәләк була йә хәбәрһеҙ юғала. Сәлимгәрәй Әбүзәровтың Имаметдиндан тыш, тағы ике улы һуғышҡа китә. Олоһо Сәлимйән 1944 йылда иҫән әйләнеп ҡайта, икенсе улы Шакирйән 1943 йылда ҡаты яраланып, ауылға ҡайта, тәрлө яуаплы эштәрҙә эшләй. Мин үҙем дә оҙаҡ йылдар 40 йәшендә генә Ленинград блокадаһында һәләк булған атайымдың ҡәберен эҙләйем. Ҡайҙа ғына яҙманым, ниндәй генә архивтарҙа булманым, әлегә һөҙөмтә юҡ. Һуғыш мәлендә асяланғас булдыҡ, "икмәк" тигән һүҙҙе генә онотманыҡ, үҙен күргәнебеҙ ҙә булманы. Картуф, һарына, алабута, бесәйғойроҡ ашап, һөт-ҡатыҡ, үлән сәйе эсеп кенә тере ҡалдыҡ. Әсәйем дә ғүмере буйына атайымды көттө, ике ағайым һәм мине уҡытып, юғары белем алырға ярҙам итте, беҙҙе аяҡҡа баҫтырҙы. Илебеҙ тыныс булһын, беҙ күргәнде балаларға күрергә яҙмаһын, тигән теләктә ҡалам.

**Флүрә ИҪӘНҒОЛОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# "ҮЛЕМҺЕҘ ПОЛК" САФЫНДА

**9 майҙа Башҡортостандың баш ҡалаһында Бөйөк Еңеүҙең 72 йыллығына бағышланған "Үлемһеҙ полк" Бөтә Рәсәй граждандыҡ-патриотик акцияһы үтәсәк.**

Унын маҡсаты - Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар, тыл хеҙмәткәрҙәре тураһындағы иҫтәлекте һаҡлау һәм киләсәк быуындарға тапшырыу. Шуға ла һәр кем үҙенең Еңеү һалдатының фотоһын тотоп колоннаға баҫа. Өфө был акцияға дүртенсе йыл рәттән ҡушыла. Быйыл ҡатнашыусылар һаны 53 мең кешегә етте. Традиция буйынса, колонна Октябрь проспекты буйлап хәрәкәт итәсәк. Сарала ҡатнашырға теләүселәр һаны күп булыу сәбәпле, быйыл маршрутты Спорт тукталышынан Дан Бульварына тиклем оҙайтырға ҡарар ителә. Сара көндөҙгө 12-лә башлана. Колонна сәғәт 11-ҙә туплана. Теләүселәр ойоштороусыларға Шәфиев урамынан СССР-ҙың 50 йыллығы урамына тиклем арала мөрәжәғәт итә ала.

# ДИВИЗИЯ ЮЛЫ БУЙЛАП



**112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы байрағы унын барлыҡҡа килеүенә - 75 һәм Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 72 йыллығына арналған автоуҙыштың символына әүерелде.**

Байраҡтың күсермәһен тапшырыу тантанаһы Өфөләге Еңеү паркында үтте. Иҫтәлекле акцияны Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башкарма комитеты һәм Ростов өлкәһендәге "Яҡташтар" мәҙәни үҙәге ойоштороҙо. 30 апрелдә Өфөлә данлы 112-се Башҡорт (16-сы Черниговский гвардия) кавалерия дивизияһы һуғышҡан урындар буйлап автоуҙыш башланды. Сәйәхәттең маршруты Өфө - Һамар - Волгоград - Обливская станицаһы - Морозовск - Белая Калитва - Ростов өлкәһенең Красновка утары аша үтә. Автоуҙышта ҡурһәтеләгән һәр пункт - яҡташтарыбыҙҙың ҡаны тамған ер. Обливская станицаһы өсөн алышта меңдәрсә яугирҙың ғүмере өҙөлгән. Ҡайһы бер полктарҙа 100-гә тиклем кавалерист ҡалған. Морозовск ҡалаһын азат иткән өсөн дивизия Юғары баш командующий И.В. Сталиндың рәхмәтенә лайыҡ булған. Әле Белая Калитва эргәһендә Советтар Союзы Геройы, башҡорт эскадроны командиры Аннаклыч Атаев иҫтәлегенә бирелгән Атаевка ҡасабаһы бар. Белая Калитва урамдарының береһе дивизия командиры Миңлеғәле Шайморатовтың исемен йөрөтә. Автоуҙыш 4 майҙа Ростов өлкәһенең Тарасов районында 13 Советтар Союзы Геройы мемориалында тамамланды. Советтар Союзы Геройҙары Зөбәй Үтәғолов һәм Тимерәй Ҡубаҡаев ошонда ерләнгән.

# ЮЛДАР, ЮЛДАР...



**2 майҙан 2 июнгә тиклем Башҡортостанда дөйөм файҙаланыуҙағы автомобиль юлдарын һәм уларҙағы яһалма ҡоролмаларҙы, юл яны һыҙаттарын төҙөкләндереү, тәртипкә килтереү буйынса айлыҡ уҙғарыла.**

Тейешле бойороҡҡа Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов ҡул ҡуйҙы. Урындағы үҙидара органдарына Юл хужалығы идаралығы, "Урал буйы" федераль автомобиль юлдары идаралығы һәм "Башкиравтодор" акционерҙар йәмғиәте менән берлектә айлыҡҡа әҙерлек буйынса штаб, дөйөм файҙаланыуҙағы автомобиль юлдарын тәртипкә килтереү, төҙөкләндереү, архитектура йәһәтенән биҙәү бригадаларын ойоштороорға тәҡдим ителде. Айлыҡ барышында асфальт-бетон япмаларҙы ремонтлау, соҡорҙарҙы ямау, ташҡын һөҙөмтәһендә емерелгән участкаларҙа ремонтлау-тергеҙеү эштәрен башҡарыу, юл ситен күп йыллыҡ үләндәр менән йәшелләндереү, сүп-сарҙан таҙартыу күҙаллана.

# СӘСКӘГӘ КҮМЕЛЕР ҠАЛА



**"Башҡортостан сәскәләре" баҡса үҙәгендә миллиондан ашыу сәскә ултыртылған. Улар ошо көндәрҙә ҡала урамдарындағы клумбаларға күсереләсәк.**

Йәй дауамында сәскәләр бер нисә тапҡырға күберәк ултыртыласаҡ. Тәү сиратта Еңеү паркы һәм башҡа ял урындары гөл-сәскәгә күмеләсәк. Быйыл ҡала урамдарында төрлө төҫтәге сәскәләр, ғәҙәти булмаған биҙәктәр, креатив ландшафт дизайны күҙ яуын аласаҡ. Әле уларҙың эскиздары әҙер, сәскәләр ултыртыласаҡ ерҙәр таҙартылып, тупраҡ йомшартылған һәм ашланған. Ҡала өсөн иң популяр сәскә - петуния. Улар әрһеҙ генә түгел, матур ҙа. Петуниялар донъяның төрлө урындағы баш ҡалаларҙы биҙәй һәм бөтөн ерҙә бер үк һөҙөмтә бирә. Был сәскәләрҙән композицияларҙы ергә лә, газондарға ла, аҫылмалы һәм вертикаль конструкцияларға ла ултырталар. Әммә халыҡ ошо матурлыҡҡа һоҡланып ҡына ҡалмай, ултыртылған сәскәләрҙе урлай. Былтыр 60 мең сәскә йолҡоп алына. Быйыл да ошондай йәмһеҙ ҡылыҡтар ҡабатланмаһын өсөн, ҡала хеҙмәттәре үҙебеҙ өсөн булдырылған матурлыҡты үҙ ҡулдарыбыҙ менән боҙмаҫҡа саҡырып мөрәжәғәт итә.

# ПРЕМИЯҒА ДӘҒҮӘ ИТ!



**Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Фән һәм техника өлкәһендәге дәүләт премиялары буйынса комиссия 31 майҙа фән һәм техника өлкәһендә республиканың дәүләт премияларына дәғүә итеүгә эштәрҙе ҡабул итеүен тамамлай.**

Һөҙөмтәләр буйынса һәр береһе 500 мең һумлыҡ өс премия тапшырыласаҡ. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, республикала дәүләт премияһы тәбиғәт, техник һәм гуманитар фәндәрҙә үҫтереүгә тос өлөш индергән ғилми тикшеренеүҙәрҙән һөҙөмтәләре, иҡтисадтың һәм социаль өлкәнең инновациялы үҫешен тәьмин иткән өрәңы техника өлгөләрен һәм прогрессив технологиялар эшләгән өсөн ике йылға бер тапҡыр бирелә. Башҡортостан Башлығы сайтында 2017 йылда премияға дәғүә итеүгә эштәрҙе тәҡдим итеү һәм рәсмиләштереү тәртибе баҫылған. Документтар түбәндәге адрес буйынса ҡабул ителә: Өфө ҡалаһы, Тукай урамы, 46, Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте, 315-се бүлмә. Тел: 280-80-93.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары бөтә почта бүлексәләренән бушлай телеграммалар ебәрә ала, тип хәбәр итә Рәсәй Почтаһы. Акция Рәсәй һәм элекке союз республикалары буйлап 10 майғаса бара. Һәр ветерандың хәбәрҙәр ебәреү иҫәбе сикләнмәгән. Хеҙмәт Бөйөк Ватан һуғышы ветераны йәки инвалиды статусын раҫлаусы документ буйынса ҡүрһәтелә.

✔Өфө "Толпар"ының яңы миҙгелгә тренерҙар штабы билдәле булды. "Юлаев йәштәре" яңы миҙгелгә өлкән тренер Алик Гәрәев етәкселегендә әҙерләнәсәк. Уға элекке баш тренер Константин Полозов һәм уйынсы карьераһын тамамлаған Денис Хлыстов ярҙам итәсәк. Өлкән Александр Васильевский ҡапҡасылар менән эшләүен дауам итәсәк.

✔Әлеге ваҡытта 40 район сәсеүгә төшкән. Әбйәлил, Әлшәй, Баймаҡ һәм Дүртөйлө райондары баҫыуҙарында сәсеү кампанияһы дәррәү бара, улар 3-5 мең гектарҙа эш башлап ебәрҙе. Процент нисбәтендә иң яҡшы күрһәткестәр бөрйәндәрҙә (12 процент), дүртөйләләрҙә (9 процент) һәм ҡыйғыларҙа (8 процент).Билдәләп үтергә кәрәк, Бересне май байрамдарында сәсеү эштәре 35 район баҫыуҙарында башланды.

✔2 майҙа төндә киң фюзеляжлы самолет Өфөнән Даламанға тәүге рейс башҡарҙы. Ошо йүнәлеш буйынса Төркиәгә 282 пассажирға иҫәпләнгән Boeing 777-200 һауа судноһында аҙнаһына ике тапҡыр, дүшәмбе һәм йома көндәрендә, осорға мөмкин. Туристар дүрт сәғәтен юлда уҙғарасаҡ. Ағымдағы йылдың 3 июненән һауа судноһы Анталья - Өфө - Анталья йүнәлешендә аҙнаһына өс рейс башҡарасаҡ.

✔Уҙған аҙнала И. Якутов исемендәге парктың "Һалдат" күлендә балыҡтарҙың бөрөмләп үлеү осрағы асыҡлана. Былтыр ҡала һыу сығанағына Ҡарман балыҡ хужалығынан килтерелгән 630 килограмм балыҡ ебәрелә. Әлеге ваҡытта белгестәр вакиға сәбәптәрен тикшерә. Балыҡтар кислород етмәүҙән үлеүе ихтимал, тигән фараз да бар.

✔Тольяттиҙа Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры Сергей Михалёв иҫтәлегенә халыҡ-ара хоккей турниры уҙҙы. Унда 2007 йылғы уйынсыларҙан торған һигеҙ команда ҡатнашты. "Салауат Юлаев-2007" бер мәрәйен дә юғалтмайынса чемпион булды. Икенсе урында - "Трактор", өсөнсөлә - "Динамо" командаһы.

✓ *Уларҙа ағымдағы статистика йәки административ сығанаҡтарҙан табып булмаған, аныҡлап әйткәндә, республикала йәшәгән халыҡтың милли һәм тел составы буйынса ҡиммәтле мәғлүмәттәр тупланған.*

*ЯҢЫ КИТАП*

# БЫЛ БАҪМАЛА...

## һиңә кәрәкле мәғлүмәттәр!

**2020 йылда Рәсәйҙә сираттағы халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы үтәсәк. Ул ваҡыты килеп еткәс кенә ойошторола һәм уҙғарыла торған сара түгел икәне һәр кемгә мәғлүм. Бәлки, ябай халыҡ унда ҡатнаша ла, икенсе иҫәп алыуға тиклем был хаҡта оноталыр, әммә ошо тема менән ҡыҙыҡһыныусы, демография, миграция, милләт мәсьәләләре менән шөғөлләнеүсе һәм уларҙың киләсәген фаразлаусы белгестәр өсөн - был көндәлек эш. Уның шулай икәнен З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә Башҡортостанстат көсө менән донъя күргән "Башҡортостан халыҡтары иҫәп алыуҙарҙа" баҫмаһы донъя күреү уңайынан БР Стратегик тикшеренеүҙәр институтында үткән исем туйында ҡатнашыусыларҙың сығыштары ла раҫланы.**




Йыйылыусыларҙы тәбрикләп һәм сараға фатиха биреп, БР Фәндәр академияһының вице-президенты Айтуған Аҡманов китаптың атамаһы уҡ уның халыҡ структураһы буйынса тикшеренеүҙәр үткәреүгә йүнәлеш булып тороуын билдәләне һәм уның киң темаға арналыуын, артабан бер генә түгел, бик күп дисциплина белгестәренең эшмәкәрлеген берләштерергә тейешлеген һыҙыҡ өҫтөнә алып, баҫманың киң йәмәғәтселек өсөн ҡулланма булыуын әйтеп үтте.

Алтын баһаһын ювелир белә, тигәндәй, белгестәр өсөн Рәсәй империяһында уҙған 1897 йылдан алып һуңғы - 2010 йылға тиклемге 9 йән иҫәбен алыу мәғлүмәттәренең бер баҫмаға тупланыуы, шул иҫәптән ҡайһы бер бөгөнгә тиклем бер тапҡыр ҙа донъя күрмәгән мәғлүмәттәрҙең асылыуы - китаптың баһаһын тағы ла арттыра.

Башҡортостанстат рәйесенең урынбаҫары Рөстәм Ғатауллин белдереүенсә, был китап - ойошманың беренсе ҡарлуғасы түгел. Тәүге баҫма 2008 йылда нәшер ителә. Ваҡыт үҙе уға ихтыяж булыуын күрһәтә һәм ике өлөштән торған икенсе баҫма ла донъя күрә. Әйтергә кәрәк, был эшмәкәрлек федераль программала ҡаралмаған, ә хеҙмәткәрҙәрҙең үҙҙәренең инициативаһы емеше. Уны баҫтырыуҙа БР Хөкүмәте һәм ҡыҙыҡһыныусы белгестәр ҙур ярҙам күрһәтә.

Бер быуаттан күберәк ваҡыт эсендә Башҡортостанда халыҡ иҫәбен алыуҙың ҙур тәжрибәһе тупланған. Уларҙа ағымдағы статистика йәки административ сығанаҡтарҙан табып булмаған, аныҡлап әйткәндә, республикала йәшәгән халыҡтың милли һәм тел составы буйынса ҡиммәтле мәғлүмәттәр тупланған. Бынан тыш, йәниҫәп һөҙөмтәләре сикле күләмдә генә нәшер ителгәнлектән, әлегә тиклем киң ҡатламға халыҡтарҙың, шул иҫәптән аныҡ йылдарҙа айырым милләттәрҙең һаны һәм составы тураһындағы мәғлүмәттәр барып та етмәй.

- Әммә һөҙөмтәләрҙең ҡиммәте унда ғына ла түгел, - ти Рөстәм Ғатауллин. - Был материалдарҙа тотош халыҡтың һәм айырым этностарҙың, мәҫәлән, башҡорттарҙың, социаль-демографик, социаль-иҡтисади хәленең нисек итеп үҙгәргәнен динамикала күҙәтергә мөмкин.

Баҫманы әҙерләүҙә нигеҙ итеп халыҡ иҫәбен алыу материалдары ҡулланылһа ла, унда башҡа сығанаҡтар ҙа файҙаланыла. Йыйынтыҡ биш төп бүлектән тора һәм ундағы таблицаларҙы, диаграммаларҙы аңлау өсөн методологик аңлатмалар бирелә. Беренсе бүлектә халыҡтың милли составы тураһында мәғлүмәт тупланһа, икенсеһендә телдәр мәсьәләһе ҡарала. Өсөнсө бүлек Рәсәй төбәктәрендә йәшәүсе башҡорттарға арнала. Дүртенсе бүлек Башҡортостандың күп һанлы милләттәренең социаль-демографик характеристикаһын сағылдырһа, бишенсе бүлек республикалағы башҡорттарҙың тормошона социаль-иҡтисади ҡылыҡһырлама бирә. Дөйөмләштереп әйткәндә, был баҫма Башҡортостандың демография фәнен үҫтереү тарихында тағы бер мөһим ваҡиғаға әүерелде. Әммә уның әһәмиәтен әле күптәребеҙ аңлап етмәй, шуға күрә халыҡ араһында ла аңлатыу эштәре алып барыу зарур. Әйткәндәй, 2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыу алдынан Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты районлар буйынса халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренән төҙөлгән брошюралар нәшер итеп таратҡайны. Ошонан һуң рухы ҡамғаҡтай аҙашып йөрөгән башҡорттар, теле үҙ диалектында булған милләттәштәребеҙ тамырҙарын етди барлай башланы, күп нәмәгә күҙе асылды. "Башҡортостан халыҡтары иҫәп алыуҙарҙа" баҫмаһын да, аҡса юҡлыҡты сәбәп итмәй, милли ойошмалар һатып алып, районлдарға таратһа ла, мөһим кампания алдынан һис зыяны булмаҫ ине, моғайын.

Икенсенән, исем туйында ошо тема менән шөғөлләнеүсе белгестәр, әлбиттә, ҡатнашты, ләкин матбуғат саралары вәкилдәренең булмауы тағы ла һорау тыуҙыра: яңылыҡты халыҡҡа еткерергә бурыслы һәм уның әһәмиәтен аңлатырға тейешле ҡәләм оҫталары үҙҙәре үк бындай сараларға күҙ йомоп ҡарай икән, кемгә үпкәләргә? Бөгөн - тиҙлек заманы, һәм был мәғлүмәт өлкәһенә лә ҡағыла. Ваҡытында кәрәкле һәм файҙалы мәғлүмәтте таратыуға күҙ йомоп, һаман да үткәндәребеҙ менән күкрәк ҡағып маҡтанған матбуғат сараларынан һәм төрлө исем-дәрәжә күтәреп йөрөгән журналистарҙан ошо мәлдә лә ярҙам булмағас, уларҙан ни фәтеүә? Ә бит бөгөн донъя менән һандар һәм мәғлүмәт идара итә...

**Земфира ХӘБИРОВА.**

*МИН БЕЛГӘН ЯУГИР*



# ИҪТӘЛЕКТӘР ОНОТОЛМАҺЫН



1945 йылдың яҙы. Етенсе синыфты ғына тамамлаған өлгөлө уҡыусы, Ғәбдин ауылы ҡыҙы Фирҙәүес Шәрәфетдинованы Иҫке Балапан ауылы башланғыс мәктәбенә уҡытыусы итеп тәғәйенләйҙәр. Әсәйем ауыл халҡы менән мәктәп бинаһына ремонт эшләп, тышын ағартып йөрөгәндә юл буйлап бер һалдат ҡайтып барғанын күрә. "Дәһшәтле яу ҡырынан кем бәхетенә ҡайтып килә был йәш офицер?" - тип эшләп йөрөгән ҡатын-ҡыҙҙар егеткә ҡаршы йүгереп сыға. Офицер күрше Байым ауылы егете Ғабдуллин Талха Хажимөхәмәт улы булып сыға. Әсәйем уға ҡоҙаса тейешле була, кискеһен иптәш ҡыҙҙары менән хәл белешергә тип өйөнә баралар. Дошман пуляһынан ҡурҡмай, рота командиры булып хеҙмәт итеп ҡайтҡан егет һылыу ҡыҙ алдында ҡаушап ҡала. Күстәнәсләп сәй эсергә ултырғас, самауырҙан сынаяҡҡа сәй яһар урынға, сәйнүккә һыу өҫтәп, һөт һалып, әсәйем алдына килтереп ҡуя. Ошо хәтирәне улар һәр ваҡыт иҫкә төшөрөп, көлөшөп ала торғайны.

Ғүмерҙәре лә ҡайнар сәй кеүек булды уларҙың, һау, рухлы өс ҡыҙ һәм өс ул үҫтерҙеләр, барыбыҙға ла юғары белем алырға, оло тормош юлына баҫырға ярҙам иттеләр. Атайым ауылда беренселәрҙән булып кәбеҫтә, виноград һәм башҡа йәшелсә-емеш үҫтергән өлгөлө баҡсасы булды. Бал ҡорттары үрсетте, электр насостары ҡулланып, баҡсаға автоматик һыу һибеү системаһы эшләне. Уның менән тәжрибә уртаҡлашырға, кәңәш һорап ауылдан ғына түгел, райондан килеүселәр күп ине. Мәктәптә хәрби әҙерлек дәрестәре лә уҡытты, йәштәргә патриотик тәрбиә биреү буйынса ла эшләне. 1950 йылда Әбйәлил районының Хәлил ауылында колхоз рәйесе булып эшләй. Унан һуң Аҫҡар ауылында Әбйәлил районы Рәсәй ҡулланыусылар йәмғиәте союзы рәйесенең беренсе урынбаҫары вазифаһын биләй. 1954 йылда Байым ауыл Ҡулланыусылар йәмғиәте рәйесе итеп тәғәйенләнә һәм ошо урында утыҙ йылдан ашыу эшләп, хаҡлы ялға сыҡты.

Өлгөлө хеҙмәткәр, яҡшы тормош иптәше булған атайым ауыр һуғыш йылдары тураһындағы иҫтәлектәрен беҙгә йыш һөйләй торғайны. Иңгә-иң терәшеп һуғышҡан иптәштәрен иҫкә төшөргәндә, бик күп егеттәр күрһәткән батырлыҡтары өсөн наградаларын алып өлгөрмәне, Мәскәүҙән ордендары килгәнсе, һәләк булдылар, тип әсенде.

Бөйөк Ватан һуғышына атайым Силәбе ҡалаһында офицерҙар курсын тамамлағас китә. Ул ваҡытта атайыма егерме йәш тулған була. Хәрби частары Украинала туплана, һәм ул Черкассы ҡалаһын дошмандарҙан азат итеүҙә ҡатнаша. Гвардия лейтенанты, Ҡыҙыл Байраҡлы Богдан Хмельницкий орденлы Черкассы 7-се гвардия һауа-десант дивизияһы 29-сы гвардия полкы 3-сө уҡсылар батальонының рота командиры булып, һуғыш юлын үтә, дүрт тапҡыр ҡаты яралана. Ул күрһәткән батырлыҡтары өсөн II дәрәжә Бөйөк Ватан һуғышы ордены, "Ҡыҙыл йондоҙ" ордены менән наградлана, бик күп миҙалдары бар. СССР Ҡораллы Көстәренең баш командующийы Сталиндың шәхси рәхмәт хаты әле лә ғаилә архивында ҡәҙерләп һаҡлана. Ил азатлығы, донъя именлеге, тыныслыҡ өсөн бергә көрәшкән иптәштәре менән үҙе тере саҡта бәйләнешен өҙмәне атайым. Уға Ленинград, Томск һәм илдең башҡа ҡалаларынан сәләм-хаттар килеп торҙо. Хәҙер инде биттәре һарғайып бөткән был хаттарҙа атайыма бөтәһе лә "Дорогой джигит Талха" тип мөрәжәғәт итә. Беҙ бала саҡта ул үҙе лә: "Мине Уралдан, Салауат тоҡомонан, тип, һәр ваҡыт хөрмәт иттеләр, тап төшөрмәнем исемгә", - ти торғайны. Беҙҙе лә шулай тәрбиәләне ул. Һүҙемдең аҙағында Бөйөк Ватан һуғышының дәһшәте индәренә төшкән, шул ауырлыҡтарҙы, ҡайғы-хәсрәтте бирешмәй еңеп сыҡҡан ҡәҙерле ветерандарҙы Бөйөк Еңеү көнө менән ҡотлайым. Ошо иҫтәлектәр быуындар алмашына килә онотолмаһын ине.

**Рамил ҒАБДУЛЛИН.**
**Әбйәлил районы Байым ауылы**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Иммунитетты нығытыу

❖ Был дауа иммун системаһын нығыта, матдәләр алышыныуҙы көйләй, ҡан тамырҙарын таҙарта. Шулай уҡ вируслы һәм инфекциялы сирҙәр киҫкенләшкән осорҙа файҙалы. 2 стакан ҡарағай ылыҫына ярты литр һыу ҡойорға, бер ус гөлйемеш өҫтәп, ҡайнатып сығарырға. Төнәтмә һыуынғас, уға 1 лимондың һутын өҫтәргә, 1 тәүлек төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 2 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 100-әр мл эсергә.

### Йүтәл

❖ Күкрәк һөтө имгән йәш балалар өсөн дауа: 1 балғалаҡ балға 2 ҡалаҡ әнис орлоғо һәм бер семтем тоҙ өҫтәгеҙ. Ошо ҡатнашмаға 1 стакан һыу ҡойоп, ҡайнау хәленә еткерергә, һыуытырға. Һәр ике сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ эсерергә.

❖ 1 ҡалаҡ киптерелгән үгәй инә үләне (мать-и-мачеха) япраҡтарына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Һыуытырға, һөҙөргә һәм 1 ҡалаҡ бал өҫтәргә. Көнөнә 2-3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Оҙайлы йүтәлдән ҡотҡара, йүтәлде йомшарта.

### Юғары ҡан баҫымы

❖ Юғары ҡан баҫымын төшөрөү өсөн 4 көн буйына сөгөлдөр һуты эсергә була. Кистән сөгөлдөр һутын һығып, төнгөлөккә һыуытҡысҡа ҡуяһың һәм йылы һыу өҫтәп, эсәһең. Көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан ҡабул итергә.

❖ 2 әфлисун, 1 лимонды әрсемәйенсә ит турағыстан үткәреп, 0,5 л иҙелгән мүк еләге (клюква), тәменә ҡарап, шәкәр йәки бал өҫтәргә (ярты - ике стакан тирәһе). Көн һайын иртәле-кисле 1-әр ҡалаҡ ашарға.

❖ Йәйгеһен гипертония өйәнәген керән япрағы ярҙамында еңеләйтергә була. Уртаса ҙурлыҡтағы 3 япраҡты йыуып, сепрәк менән ҡоротоп, 2 япраҡты - маңлайға, 1-әүһен һул ҡултыҡ аҫтына бәйләргә. Төнгөлөккә ҡалдырырға ла ярай. Ҡышын керән тамырын ҡулланалар. Уны 3 өлөшкә бүлгәс, ҡайнар һыуҙа тотоп алаһың. 2 өлөш тамырҙы - маңлайға, 1-әүһен һул ҡултыҡ аҫтына бәйләйһең. Әгәр ҙә әсетеүгә түҙмәһәгеҙ, тамырҙың аҫтына марля һалығыҙ.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Ата-бабалары тураһында белешмә

Хашим Сүриә иленә барышлай вафат була. Унын Шәйбә исемле бәләкәй улы тороп ҡала. Шәйбә бала сағын Йәҫриб ҡалаһында үткәрә, унын әсәһе шул ҡаланан була. Ул егет ҡорона ингәс, Хашимдын ҡустыһы Мотталиб уны Мәккәгә алып килә. Мәккә кешеләре Шәйбәне ҡол тип уйлай һәм Әбд-әл-Мотталиб йәғни "Мотталибтың ҡоло" тип исем тағып та өлгөрә. Дөрөҫлөк аҙаҡтаныраҡ асыҡлана, тик һуң була - яңы исем Шәйбәгә ғүмерлеккә йәбешә, аҙаҡ ул үҙе лә был исемгә өйрәнеп китә.

520 йылда, Мотталиб үлгәндән һуң, Әбд-әл-Мотталиб ырыу башлығы булып ҡала. Ул замандарҙа Мәккәлә төп һаналған ун вазифаны: Ҡибланы һаҡлауҙы, ҡоҙоҡтарҙы ҡарауҙы, хөкөм эштәрен, сит илдәр менән бәйләнеш тотоу эштәрен, ҡөрәйштәр һуғышҡа йөрөтә торған изге байраҡты һаҡлауҙы, ярлыларға ярҙам итеү һалымы йыйыуҙы, ырыу башлыҡтары йыйылышында рәйес вазифаһын, халыҡ йыйылыштары йыйыу хоҡуғын, ҡаланың аҡсаһы менән идара итеүҙе һәм күрәҙәселек уҡтарҙы һаҡлауҙы Күсәй тоҡомдары үҙ ҡулдарында тотоп килә. Әбд-әл-Мотталиб джурһум ырыуы кешеләре тарафынан күмелгән Зәмзәм ҡоҙоғон табып, таҙартып, рәтләп ҡуя. Унын ейәне Али шаһитлығы буйынса, эш былай булған.

... Ҡибла асҡыстарын һаҡлаусы Әбд-әл-Мотталиб төшөндә фәрештә күрә. Фәрештә уға Тибаны ҡаҙырға ҡуша. Әбд-әл-Мотталиб унын ни теләгәнен аңламай. Икенсе төн шул уҡ фәрештә Әбд-әл-Мотталибҡа Барраны ҡаҙырға ҡуша. Әбд-әл-Мотталиб фәрештәне был юлы ла аңлай алмай. Өсөнсө төн шул уҡ фәрештә килә лә, Зәмзәмде ҡаҙырға ҡуша. Фәрештә, Әбд-әл-Мотталибтың был юлы ла аңламағанын тойғас, - ҡөрәйш ҡәбиләһе кешеләре был һыу сығанағы тураһында, ысынлап та, белмәгән булған, - һүҙҙең шишмә тураһында барыуы һәм ул шишмәнең Ҡибла янындағы урында, ҡан аҡҡан, ҡырмыҫҡа иләүҙәре күп булған һәм ҡарғалар эйәләшкән ерҙә булыуын әйтә.

Был юлы Әбд-әл-Мотталиб фәрештәне аңлай һәм иртәнсәк улы менән бергә Ҡибла янындағы ҡорбан салыу урынына баралар. Унда, ысынлап та, ҡорбан малының ҡаны ла йыш аға, ҡырмыҫҡа иләүе лә байтаҡ була, ҡарғалар ҙа осоп йөрөй. Әбд-әл-Мотталиб улы менән бергә шул ерҙе ҡаҙа башлай һәм шунда уҡ тиерлек боронғо ҡоҙоҡтоң тирә-яғына һалынған таштарға юлығалар.

Ҡөрәйш кешеләре йыйылып китә. Уларҙың күптәре Ҡибла янында ҡаҙыу эштәренең алып барылыуына ҡаршы була, тик Әбд-әл-Мотталиб береһен дә тыңламай, үҙ эшен дауам итеп, улы менән бергәләп бер нисә көндән һыу сығанағын таҙартып та ҡуя. Ҡоҙоҡтоң төбөндә алтындан яһалған ике ҡыр кәзәһе - газель һыны һәм боронғо оҫталар яһаған бер нисә ҡылыс һәм хәрби кейемдәр табыла. Был хазинаны күреп ҡалғас, ҡарап торған Мәккә кешеләре унын ҡала милке булыуы һәм уртаҡҡа бүлешергә кәрәклеге тураһында бәхәс ҡуптара. Әбд-әл-Мотталиб ҡырҡа ҡаршы сыға. Бәхәсте туҡтатыу өсөн күрәҙәселек уҡтары аша илаһтарҙың береһенә мөрәжәғәт итергә булалар. Бының өсөн алты уҡ алалар - икеһе һары (алтын һындар билдәһе), икеһе - ҡара (ҡорал һәм тимер кейемдәр билдәһе), икеһе - аҡ (бер нәмә лә эләкмәү билдәһе). Был уҡтарҙы илаһтар араһынан иң ныҡ хөрмәт ителгән һәм Ҡибланың иң уртаһында урынлашҡан Һубал илаһтың ҡулдарына тотторғандар ҙа, күрәҙәселек ҡыла башлағандар: күҙҙәре бәйләнгән күрәҙәсе берәмләп уҡтарҙы сығарған. Һөҙөмтәлә, Ҡиблаға - алтын һындар, Әбд-әл-Мотталибҡа ҡорал менән хәрби кейем сыҡҡан, ә Мәккә кешеләренә, аҡ уҡтар сығып, бер нәмә лә эләкмәгән.

Әбд-әл-Мотталиб алтын һындар менән бергә ҡылыстарҙы ла Ҡибла ишегенә ҡағып ҡуйған. Риүәйәттәр бәйән итеүенсә, был газелдәр - Ҡибланың алтындан яһалған тәүге биҙәү әйберҙәре.

**(Дауамы бар).**

*МИН БЕЛГӘН ЯУГИР*



# ИШЕТЕЛГӘНДӘЙ АТАЙ ТАУЫШЫ...

**1945 йылдың майы. Иртән уянып китһәм, өйҙә бер кем дә юҡ. Инәйем яланда утауҙалыр, ә апайым, ағайым, энем йә урманда, йә Әй буйындаларҙыр. Ашарға эҙләп тороуҙың мәғәнәһе юҡ. Шуға, тиҙ генә буржуйкаға ут яҡтым да, көрәк, биҙрә алып, серек бәрәңге ҡаҙырға баҡсаға сыҡтым. Ярай әле өйҙә май бар ине. Тәмле итеп йәймә бешерҙем. Ихатаға сығып, ләззәтләнеп ашап ултырғанда, урамдан хәрби кейемдәге бер кеше килә ятҡанын күрҙем. Погонында дүрт йондоҙ, ордены бар, үҙе ныҡ аҡһай.**



Был күренешкә бик иҫем дә китмәне, сөнки өйҙән-өйгә йөрөп, "Һуғыш тамамланды, беҙ еңдек", тип һөйөнсө алғайнылар. Әкренләп фронтовиктар ҙа ҡайта башлағайны. Мине шуныһы ғына аптыратты: был командир беҙгә боролоп инде лә, минең алдымда туҡтап ҡалды. Бер һүҙ ҙә өндәшмәне, бары тик ҡулымдағы йәймәне һындырып ҡараны һәм ләм-мим өндәшмәйенсә, өйгә табан атланы. Мин дә унын артынан эйәрҙем. Ул һаман да бер һүҙ өндәшмәгән килеш һикегә барып ултырҙы. Әлбиттә, мин унын кем икәнен аңлай башлағайным. Атайым һуғышҡа киткәндә миңә ни бары йәш ярым ғына булған, шуға уны төҫмөрләмәйем дә. Тик шуныһы хәтерҙә ҡалған: атайым өйгә ингәнсе ауыл тып-тын ине. Күп тә үтмәй, ул уянғандай булды, төрлө яҡтан: "Хатип ҡайтҡан! Хатип ҡайтҡан!" - тигән ҡысҡырыуҙар ишетелә башланы. Яландан инәйем йүгереп ҡайтты, күҙ йәштәрен тыя алмайынса олатайым менән ҡарт инәйем килеп етте. Иларлыҡ та шул - һуғышҡа биш улын оҙатҡан бит улар. Шуларҙың дүртеһе иҫән-имен әйләнеп ҡайтты, тик иң кеселәре - Хикмәт кенә хәбәрһеҙ юғалған. Тиҙ арала туған-тыумаса, фронтовиктар йыйылып китте. Барыһы ла ниндәйҙер рисыҡ тотоп килә. Өй эсендә ысын мәғәнәһендә кесе һабантуй башланды...

Атайым Хатип Өмөтбай улы Йәндүрин 1908 йылда Лағыр ауылында тыуа. 1932 йылда Йәлил Кейекбаев менән бергә Башҡортостан педагогия техникумын тамамлай. Ул ваҡытта Малаяҙ районы (хәҙерге Салауат районы) Ҡыйғы районынан айырылып сыҡҡас, райондың тәүге мәғариф бүлеге мөдире була, Салауат райкомының пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире вазифаһында эшләй, 1941 йылдың 22 июнендә һабантуй ваҡытында, Молотовтың радио аша һуғыш башланыуы хаҡында хәбәр иткән сығышын ишетеп, доброволец булып яуға китә. Һуғышты башынан аҙағына тиклем өлкән политрук, гвардия капитаны, рота командиры булып үтеп, Еңеү майында ауылға ҡайта. Түшендәге "Ҡыҙыл Йондоҙ" орденына ул - өлкән политрук - 1942 йылда лайыҡ була. Наградаға тәҡдим итеү документында был хаҡта түбәндәгеләр яҙылған: "Зуя эргәһендәге алышта ауылды алырға тигән бурыс ҡуйыла. Дошман подразделениеға көслө артиллерия-миномет һәм пулемет уты аса. Йәндүрин иптәш командирҙарҙы һәм яугирҙарҙы үҙ өлгөһөндә дәртләндереп, алға алып китә. Дошман 50 кешенән торған иҫерек һалдаттар һәм офицерҙар төркөмөн тылға үтеү өсөн урауҙан ебәрә һәм беҙҙең подразделениены ҡамауҙа ҡалдырып, юҡ итергә самалай. Йәндүрин уларҙың ниәтен аңлап ала һәм тиҙ генә ҡарар ҡабул итеп, урап үтергә тырышыусы дошмандың үҙен урап үткән төркөм ебәрә. Һөҙөмтәлә дошмандың 40 һалдаты яу ялаһында ятып ҡала, ҡалғандары тырым-тырағай ҡаса. Был алышта Йәндүриндың подразделениеһы тарафынан 60 самаһы фашист, өс ут нөктәһе юҡ ителә. Йәндүрин үҙе генә автоматтан 10 һалдат һәм офицерҙы үлтерә".

Атайым үҙе һуғыш тураһында һөйләргә бик яратманы. Шулай ҙа ҡайһы саҡта асылып китә ине. Бер тапҡыр ҡустыма: "Минең тағы ике орденым булырға тейеш, ләкин ҡаты яраланып, алып өлгөрмәнем", - тип әйтеп ысҡындыра. Һәм был хаҡта башҡаса һүҙ ҙә ҡуҙғатмай. Әле барлыҡ архивтар асылғас һәм интернет селтәренә документтар сығарыла башлағас, Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын байрам итер алдынан Лағыр урта мәктәбе директоры Ринат Ситдиҡовтың РФ Оборона министрлығының архивында эҙләнеүҙәре һөҙөмтәһендә ошо ике ордендың да яҙмышы асыҡланды. 1945 йылдың февралендә атайым II дәрәжә "Ватан һуғышы" ордены менән наградлана. Был ваҡытҡа инде ул гвардия капитаны була. Опатув ҡалаһы эргәһендәге алышта рота менән оҫта командалыҡ иткәне, уңышлы манёвр һөҙөмтәһендә дошмандың оборона һыҙығына яҡын килеп, беренселәрҙән булып уларҙың траншеяһына бәреп инеп, бер нисә дошмандың башына еткәне һәм ҡул пулеметын ҡулына төшөргәне һәм алдына ҡуйылған бурысты уңышлы атҡарып сыҡҡаны өсөн ошо орденға лайыҡ була. Шул уҡ йылдың мартында I дәрәжә "Ватан һуғышы" ордены менән наградлана. Наградаға февраль айында Криптау һәм Штетель ауылдары өсөн алышта күрһәткән ҡаһарманлығы, рота менән оҫта идара итеүе, ышанислы манёврҙар яһауы һөҙөмтәһендә алдына ҡуйылған бурысты уңышлы үтәгәне өсөн тәҡдим ителә. Әммә Яссы-Кишинев операцияһында ҡаты яраланыуы һөҙөмтәһендә ошо ордендарын алып өлгөрмәй.

Һуғыштан ҡайтҡас, атайымды Лаҡлы ауылына балалар йортона директор итеп ебәрҙеләр. Аҙаҡтан Лағыр ете йыллыҡ мәктәбенең директоры, колхоз рәйесе, пенсияға сыҡҡансы уҡытыусы булып эшләне. 1984 йылда вафат булды. Беҙҙең ҙур ғаиләлә, апай-һеңлеләрҙән тыш, биш егет үҫтек. Барыбыҙ ҙа Ватан алдындағы бурысыбыҙҙы намыҫ менән үтәнек, һәр беребеҙ өсәр йыл әрме сафында булдыҡ. Мин үҙем - ракетчик, Кариб низағына эләгеп, өс йыл ярым хеҙмәт итеп ҡайттым.

Атайымдың үҙе күрә һәм бер ваҡытта ла түшенә таға алмаған ошо ике ордены тураһындағы мәғлүмәтте беҙ, унын балалары, һөйөклө кешебеҙҙең беҙгә йылдар аша еткергән сәләме, тыныслыҡтың ҡәҙерен белеүҙе иҫкәрткән аманаты кеүек ҡабул иттек.

**Дияс ЙӘНДҮРИН,**
**тарих фәндәре докторы,**
**профессор.**

*МИН БЕЛГӘН ЯУГИР*



# МЫСАЙ ИКМӘГЕ АШАП...

**2008 йылда, Мөхәмәтша Солтанғолов үҙенең 80 йәшен билдәләгәндә, үҙебеҙҙең район гәзите "Һаҡмар"ҙа уға өндәшеү рәүешендә яҙылған мәҡәләмде баҫтырғайным. Шул мәҡәләне "Киске Өфө" гәзите уҡыусылары иғтибарына ла тәҡдим итмәксе булдым. Мәҡәләлә һүҙ барған ағай ҡазаланып, оҙаҡ ҡына хәрәкәтһеҙ ятты. Ул икенсе ауылдан булһа ла, йыш ҡына хәлен белер булдым. Үҙ-ара ихлас инек. Бөгөн ағай донъялыҡта юҡ инде. Әлеге яҙмам унын яҡты иҫтәлегенә бағышлана. Һуғыш йылдарында илде ас итмәгән малайҙар быуынының бер вәкиле тураһында бөгөнгө яҙмам.**

Хәлеңде белергә, юбилейың менән ҡотларға барҙым өйөңә. "Миңә 80 йәш, Мусич! Һикһән!" - тинең тантана менән. Нисектер, юғары үрҙәр яулағандай, ундай йәшкә етмәҫмен ул, тигән ҡурҡыу-өркөүебеҙҙе бушҡа сығарғандай булды был ауаз. Эйе, Мөхәмәтша ағай, һиңә 80 йәш. Үҙ аранда - ыуаҡтарҙа (Ҡыуаттан Солтанғоловтар) иң ололарҙың береһе.

Таяҡ - ике башлы, ти халыҡ. Йәшәүҙең, ғүмерҙең дә шул таяҡҡа оҡшаш булыуы асыҡ. Таяҡтың йыуан башы - ғүмерҙең бөгөнгөһө: тормоштоң әсе-сөсөһөн татыу, унын һабағын алыу һәм оло кешегә хас булған аҡыл туплау. Алһыҙ-ялһыҙ эшләүең, донъя ҡороп ҡартайыуың ошо мәлгә тура килә лә инде. Мин таяҡтың нәҙек башына ҡарамаҡсымын. Ул ос алыҫ та, яҡын да

МИН БЕЛГӘН ЯУГИР



**Минең ҡарт олатайым Баһауетдинов Абдрахман Исмәғил улы 1908 йылдың 5 декабрендә Архангел районының Ҡыҙғы ауылында тыуған. Ошо уҡ райондың Тирәкле ауылынан Сәлихә Мөхәмәтәмин ҡыҙы менән ғаилә ҡорғандан һуң, күрше Аҙау ауылына күсенеп йәшәй башлайҙар. Улар икеһе лә бер быуатҡа яҡын ғүмер кисерә. Ҡарт олатайым да, ҡарт өләсәйем дә 93 йәшкә тиклем йәшәй. 71 йыл бергә татыу ғүмер юлы үтәләр. 16 бала тәрбиәләйҙәр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, шуларҙың һигеҙе бәләкәй сағында уҡ төрлө ауырыуҙарҙан үлеп ҡала. Ҡалған һигеҙе быуын нығытып, үҙ аллы тормошҡа аяҡ баҫа.**

# БҮЛӘЛӘРЕ ХӘТЕРЕНДӘ



Ҡыуанысын да, ауырлыҡтарын да бергә күтәреп донъя көтөп ятҡанда, ил башына ҡара ҡайғы килә. Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән ҡарт олатайым 1941 йылда фронтҡа алына. Архангел районынан бик күп ир-егетте, шулар иҫәбендә ҡарт олатайымды ла, Шишмә районының Әлкә ҡасабаһына хәрби әҙерлек үтергә ебәрәләр. Унан Дим ҡасабаһында тупланған 112-се Башҡорт атлы кавалерия дивизияһына ҡушалар. Артабан ҡаты һуғыштар барған Сталинград ҡалаһына оҙаталар.

Ҡарт олатайым Миңлеғәле Шайморатовты яҡындан күреп белгән һалдаттарҙың береһе була. Ләкин Абдрахман Исмәғил улына һуғыштың үҙәгендә 8 ай ғына ҡайнарға тура килә. Төнөн казарманан сығып, тәмәке көйрәтеп торғанда, немец снайперы бик алыҫтан тәмәке осҡонона төҙәп ата. Дошман пуляһы һалдаттың дүрт бармағын өҙөп үтә. Шулай яраланып, ҡарт олатайым госпиталгә эләгә. Дауаланып сыҡҡандан һуң, һуғыш тамамланғансы, Свердловскиҙа танк заводында эшләй. Һуғыштан һуң икенсе дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән бүләкләнә.

Хаҡлы ялға тиклем Аҙау урман хужалығында балта оҫтаһы булып хеҙмәт итә. Ауылдың абруйлы муллаһы була.

Ҡарт олатайым ҡәһәрле һуғыш йылдары хаҡында һөйләргә яратманы. Һуғыш иҫтәлектәрен унын теленән тартып алыуы ауыр булды. Фронт юлдары хаҡында һорашһаң, бер ике ауыҙ һүҙ әйтер ҙә, тәҙрә аша офоҡтарға бағып, шымып ҡалыр ине. Шуға ул һөйләгәндәрҙән ҡайһы бер хәтирәләр генә иҫемдә ҡалған.

Миңлеғәле Шайморатовтың биографияһын һөйләп ишеттерер ине. Легендар геройҙың Ҡытайҙа хәрби атташе булыуын да тәүге тапҡыр мин ҡарт олатайымдан ишетеп белдем.

Ҡарт олатайым йыш ҡына, беҙҙе һуғышта сабата ҡотҡарҙы, тип әйтә торғайны. Сабата аяҡты өшөтмәй йылы тотҡан. Сабата менән мәрәкә хәлдәр ҙә булған һуғышта. Беҙ, башҡорттар, ҡарлы урмандан сабата менән үтһәк, немецтар тәүҙәрәк сабата эҙен танк ҡарышлауығының эҙе тип уйлап, ҡайһылай күп танкылар үткән, тип ҡурҡыуға ҡалыр булған.

Һуғыш йылында ныҡ һыуыҡ булған. Хатта төкөрһәң, төкөрөк ергә төшөп етмәйенсә туңған. Турғайҙар ағаста ултырған килеш туңып, ергә ҡолап төшкән. 2 метр бейеклек ҡар яуған. "Ана шул һыуыҡ беҙҙе ҡотҡарҙы", - тип әйтә торғайны ҡарт олатайым. "Беҙ һыуыҡҡа өйрәнгәнбеҙ. Ә немецтар ундай һыуыҡҡа күнекмәгән, етмәһә, ҡыштың шулай ҡырыҫ буласағын көтмәгәндәр, әҙер ҙә булмағандар. Бер казармаға килеп юлыҡтыҡ. Эсенә инһәк, казарма тулы немец һалдаттары туңып үлеп яталар. Бармаҡтарында ҡиммәтле балдаҡтары, ҡулдарында затлы сәғәттәре бар ине, бер нәмәләрен дә алманыҡ".

Һуғыш башланырҙан бер йыл алда ҡарт олатайыма оҙон юлда туҡтап, бер мунсала йоҡларға тура килгән. Шунда уға ап-аҡ фәрештә пәйҙә булған. Ул былай тигән: "Бер йылдан һуғыш башлана. Фронтҡа китерһең. Яраланырһың, әммә тере әйләнеп ҡайтырһың". Ысынлап та, бер йылдан һуғыш башланған. "Фәрештәләрем мине һәр саҡ һаҡлап, оҙатып йөрөнө", - тиер ине ҡарт олатайым. Ул үҙен Ер йөҙөндәге иң бәхетле кешеләрҙең береһе рәтенә индерер ине. Ҡарт өләсәйемде ауыҙ һыуҙары ҡороғансы маҡтар булды.

Ҡайһы бер шаяртыуҙары һаман хәтеремдә. Бер ваҡыт минең башҡа кәнфит буяған. Сәсем йәбешеп бөткән. Әсәйем ҡарт олатайыма асыуланған. Тағы ла береһе хәтеремдә: бер ваҡыт ҡарт олатайымдарға ҡунаҡҡа килгәнбеҙ. Ҡайтырға йыйынып, бүрегемде кейәйем тиһәм, бүрек бауҙары менән карауат ҡырына бәйләнгән. Ысҡындырырлыҡ та түгел, шул ҡәҙәре ныҡ бәйләгән. Әсәйемә ҡайсы менән киҫеп алырға тура килде.

Ана, шулай итеп, ветеран ҡарт олатайым үҙе балалар кеүек була торғайны. Унын яҡты иҫтәлеге беҙҙең хәтеребеҙҙә мәңге һаҡланасаҡ.

**Ринат СӨЛӘЙМӘНОВ,**
**Өфөләге 68-се лицейҙың башҡорт теле уҡытыусыһы.**

---

һымаҡ. Мин, һинән йәшерәк кеше, бала сағынды белмәйем. Беҙҙе һеҙҙең үтә иртә башланған хеҙмәт юлығыҙ осраштырҙы. Һеҙ, 13-15 йәштәге өс малай, һуғышҡа киткән атай-ағайҙарға алмашҡа баҫып, ир ҡорона инеп, эшкә тотондоғоҙ.

Мин бәләкәй генә ауылда (Вәли ауылы - ул хәҙер юҡ) йәшәп, өлкән ағайҙарһыҙ үҫкәнгә, һеҙ миңә оло дуҫтар, оло ҡурсалаусылар булдығыҙ. Ауылда колхоздың (дүрт ауылды берләштергән "Ҡыҙыл Октябрь" колхозы) төп көсө - йылҡы малы көтөлдө. Һеҙ көтөүсе (халыҡ телендә "табунщик") булып ҡышҡы һыуыҡта ла, йәйге ямғырлы көндәрҙә лә эшләнегеҙ. Өҫтөгөҙҙә бер ҡат кейем. Ҡыш өсөгөҙгә алмашлап кейергә ҡатып бөткән, ямаулы тиртун. Ыжғыр буранд арҙа ла малды тибендә ҡараусыһыҙ ҡалдырманығыҙ. Сөнки хатта ауырыу мал үлһә лә, һеҙ яуапҡа тарттырылырға тейеш инегеҙ.

Бүреләр күп ине. Ғәйнулла ағай ҡайһы саҡта ҡапҡанға эләккән 3-4 бүрене тейәп ҡайтыр ине. Һунарсы нисек кенә тырышмаһын, бүреләр бөтмәне. Хәҙер был йыртҡыстар аҙ (Унын ҡарауы, мал урлаған ике аяҡлы "бүреләр" күбәйҙе). Ашау наҡыҫ, хатта юҡ кимәлендә булды. Сәғирә апай бешергән һоло ситырын һыуынып та өлгөрмәҫ элек (һыуынһа, ул ҡуйыра ине), сей ҡул менән тырнап алып, күберәк йотоп ҡалырға ынтыла инек. Һоло кәбәгенә ҡушып мысый икмәге әтмәләнә. Ашаһаң да аш булманы, буғай, ул. Шулай ҙа мысыйға дан йыры хасил булды. Матур көйөн дә, һүҙен дә онотто халыҡ бөгөн. Әммә заманы онотолмай.

Һуғыш бөттө. Һеҙҙең атайҙар ҡайтманы. Улар өсөн дә, йәшәү өсөн дә тағы ла нығыраҡ эшкә тотондоғоҙ. Үҙегеҙ ҙә нығындығыҙ, бынамын тигән егеттәр булып киттегеҙ. Халыҡ аҙмы-күпме күҙен асты, күңелдәр күтәрелеп китте. Ауыл йәштәре үҙ-ара ҡунаҡҡа йөрөшә башланы. Шул осор, ағай, һин ҡурайға тотондоң. Һинең ҡурайға ағай-апайҙар бейер, йырлар ине. Ул һөнәр миңә лә үрнәк булды. Тәбиғәт бушлай биргән бүләк - ҡурай үләне (хәҙер тауышы бар, моңо юҡ ҡурайҙар менән сағыштырырлыҡ түгел инде) кемде арбамаҫ! Мин дә 11-13 йәшлек сағымда аҙыраҡ өйрәнгәйнем. Ташланым. Оялышымдан. Ҡолаҡҡа хәбәр инде: ауыҙы ҙур булғандан оялып, Мөхәмәтша ҡурайҙы ташлаған! Эйе, ул осорҙа һәр кемебеҙҙең ауыҙы елле булғандыр. Ҡорһаҡ көптәй, үңәс ептәй булғас, ниңә ауыҙ йәтеш күренһен инде. Ҡарасы, һөнәребеҙҙән дә оялған заман булған.

"Миңә - 80!" тинең. Эйе, бәлки, теге өсәүҙең икәүһе, бергә үҫкән, бер үк тормош юлы башлаған Миңлеғәле, Мырҙағәле Солтанғоловтар арала күптән булмағанға үкенеү ҙә яңғырағандыр был һүҙҙәрҙә. Һин уларһыҙ оло йәшкә еттең. Юҡһынаһыңдыр уларҙы.

Нисек кенә булмаһын, йәшәү өсөн көрәштә һин - еңеүсе. Мысай биргән булмыш ғәйрәт рухи көсөңдө нығытҡан. Әле лә шаян, киң күңелле һин һәм һәр саҡ шундай булып ҡал...

Ауырлыҡ-аслыҡты күп кисергәндәр рухи яҡтан үтә лә ныҡ булалыр, бәлки. Мөхәмәтшалар һуғыштың, унын емеректәре, илде аяҡҡа баҫтырыуҙың ауыр йөгөн һис зарланмай үҙ өҫтөнә алды. Уларға тик 80 йәш тулғас ҡына иғтибар ителәме? Күптәр ул көндө лә күрә алманы, алмай. Эш үткәс кенә иҫләйбеҙ, бөтәһенә лә һуңлайбыҙ шул...

**Йәмних ҠАШҠАРОВ.**
**Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылы.**

---

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Йәдкәр БӘШИРОВ

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## V. Бөйөк Башҡорт иле халыҡтары тураһында

Башҡорт халҡы күп быуаттар һуҙымында уғыр, төрки һәм монгол ҡәбиләләре менән аралашып йәшәп, боронғо халыҡтың ҡатмарлы структураһын барлыҡҡа килтергән. Башҡорт халҡы төрлө ҡәбиләләрҙең һыҙаттарын туплаған, шуға күрә уны баһалауы ла ҡатмарлы ғәмәл. Башҡорттар хаҡында шулай яҙалар: "Тормошто һәм тыныс заманды шул тиклем яраталар, мәңгелектең барлығына ышаналар... ә хоҡуҡтарына килгәндә, тыныстар, тыңлаусандар, ғәҙелдәр, хөкүмәт бойорғанды ихлас үтәйҙәр, шул уҡ ваҡытта үпкәселдәр, даусылдар..."

Башҡорт дәүләте меңәр йылдар һуҙымында Днепрҙан алып Енисейға тиклем ҙур территорияны тәшкил иткән. Бахши Имандың "Йәғәфәр тарихы" (1680 йыл) ошо хаҡта. Башҡорттарҙың башҡа халыҡтар менән мөнәсәбәт үҫешен анализлағанда уларҙың урыҫтар менән аралашыуында күп нәмәне юғалтыуын, шул уҡ ваҡытта күп нәмәне табыуын күҙалларға була. Шулай ҙа дала балалары булған башҡорттар был халыҡ менән аралашҡанда ла үҙҙәренә хас сифаттарын һаҡлап ҡала алған. Шундай сифаттарҙың береһе - ҡунаҡсыллыҡ. Күп авторҙар, шул иҫәптән Лепехин шул хаҡта яҙа. Ҡымыҙ менән һыйлау бөгөн дә башҡорт халҡының бренды һанала. Игнатьев әйтеүенсә, ҡунаҡ башҡорт өсөн изге кеше, унын өсөн башҡорт һуңғы һарығын йә тайын һуйырға мөмкин. Уларҙың һәр бер ауылының тәү осраған өйөнә инһәгеҙ ҙә, һеҙҙе яҡшы ҡаршы аласаҡтар, беҙ бындайҙы хатта иң ҡунаҡсыл һаналған урыҫтарҙа ла осратмайбыҙ. Ҡунаҡ өсөн хужа ҡулынан килгәндең барыһын да эшләй, ҡунағын нимәһе бар, шунын менән һыйлай. Башҡорт, самауыры ҡайнап сыҡҡас, ҡаймаҡ һәм бауырһаҡ менән сәй эсерә башлай, ҡунаҡ алдына икмәк, айран ҡуя. Бай башҡорт, ҡунаҡ килгәнен файҙаланып, ҡунаҡ янына ауылдаштарын саҡырып, ҙур байрам ойоштороп ебәрә. Хатта мәртәбәле ҡунаҡты һыйлағанда ла башҡорт унын алдында ярамһаҡланмай, үҙенең абруйын һаҡлап ҡала, үҙен бойондороҡһоҙ тота. Башҡорттарҙы биҙәгән сифаттарға уларҙың киң күңеллелеген, алсаҡлығын, характер йомшаҡлығын (был сифатын башҡалар ерҙәрен ҡулға төшөрөү өсөн файҙаланған) килтерергә мөмкин булыр ине. Башҡорт үҙ ҡатынына йомшаҡ мөғәмәлә итә, уға ҡул күтәрмәй, ыҙалатмай тиерлек, киреһенсә, яйы сыҡҡанда уға нимәлер, хатта ваҡ-төйәк әйбер бүләк итергә тырыша. Шулай уҡ башҡорттар балаларын ныҡ ярата. Бигерәк тә малайҙарҙы аталары ныҡ иркәләй, әммә улар нимәне эшләргә ярамағанлығын яҡшы белә. Башҡорттар яҡын туғандары үлеп, балалары етем ҡалһа, бер ваҡытта ла уларҙы сит ғаиләләргә бирмәгән.

Башҡорттар араһында оло ғауғалар, уҫмаҡлашыуҙар, йөҙ йыртыуҙар һ.б. булмай. Әгәр ҙә бындай хәлдәр була ҡалһа, уларҙың низағын мулла хәл итә, мулланың һүҙен ике яҡ та тайпылышһыҙ үтәй. Башҡорт сит кешегә, бигерәк тә ярлыларға ярҙамға атлығырға әҙер генә тора. Был йола Ҡөрьәндә лә урын алған. Шуға күрә беҙ башҡорттар араһында хәйерселәрҙе, бигерәк тә профессиональ хәйерселекте һирәк осратабыҙ. Ҡайһы бер халыҡтарҙа тотош ауылы менән хәйер һораусылар бар. Флоринский әйтеүенсә, башҡорттар ниндәй генә ауыр хәлдәргә дусар булһа ла, хәйерселеккә төшмәй, енәйәт юлына баҫмай.

**(Дауамы бар).**

✓ *Власть вәкилдәренә башҡорт телен белеү мотлаҡ талап булһа, хәл үҙенән-үҙе үҙгәрер ине. Халыҡ, йәмәғәтселек кенә бында бер нәмә лә үҙгәртә алмай, власть кимәлендә телдең абруйын күтәрергә кәрәк.*



**Һөнәре буйынса - ул техник-механик. Хеҙмәт карьераһын ябай механиктан башлап, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай Рәйесенең ярҙамсы-кәңәшсеһе вазифаһына тиклем үрләй. Быны шулай булыуына һис аптырарға ярамай, сөнки аралаша башлаһаң, уның милләтебеҙҙең киң эрудициялы зыялыһы булыуын тояһың. Бары тик баҫалҡылығы арҡаһында ғына уны бик белеп тә бөтмәйҙәрҙер, бәлки. Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - заманында Башҡорт АССР-ының Министрҙар Советы рәйесе урынбаҫары булып эшләгән билдәле шәхес, яҙыусы Рамаҙан Өмөтбаевтың улы Рауил ӨМӨТБАЕВ.**

# ЯУГИР УЛЫ



**Һеҙ Өфөлә тыумаһағыҙ ҙа, атайығыҙҙың эшмәкәрлеге буйынса бала саҡта баш ҡалаға күсеп килгәнһегеҙ. Үҙегеҙҙе Өфө башҡорто тип һанайһығыҙмы?**

- Бала сағым, бөтөн аңлы ғүмерем Өфөлә үтһә лә, үҙемде бер ваҡытта ла Өфө гражданы итеп тойманым. Быны нимәгә бәйле икәнен дә аңлата алмайым, әммә миңә кендек ҡаным тамған Баймаҡ, атайымдың тыуған яғы - Әбйәлил районы яҡыныраҡ. Шуға мин үҙемде ҡала йәки ауыл башҡортона индермәйем, мин - башҡорт, һәм быны менән күп нәмә аңлатыла, тип кенә яуаплар инем.

**Ҡалала үҫһәгеҙ ҙә, башҡорт телендә матур һөйләшәһегеҙ, ә бит һеҙ уҡыған йылдарҙа бөтөнләй башҡорт мәктәптәре лә булмаған...**

- Быны өсөн мин атайыма ғүмер буйы рәхмәтлемен, сөнки өйҙә аралашыу тик башҡорт телендә генә барҙы, телем дә башҡортса асылды һәм ул ғүмергә минең туған телем булып ҡалды. Һуңынан рус телле балалар баҡсаһына йөрөргә тура килде, әммә ул минең өйрәнгән икенсе телем ине. Алты йәшемдән атайым "Башҡортостан пионеры" гәзитен алдырҙы, шул баҫманы уҡып үҫтем. Әсәйем - Мөхтәрәмә Таһир ҡыҙы - сығышы менән Минзәлә башҡорттарынан. Ләкин ул атайыма тормошҡа сыҡҡас, бер ваҡытта ла үҙ диалектында һөйләшмәне, саф башҡорт әҙәби телендә аралашты. Ошо туған телгә булған ихтирам, һөйөү миңә ата-әсәм ҡаны аша һеңгәндер. Һуңынан инде, үҙ аллы тормош көтә башлағас, үҙемде һынап ҡарау өсөн башҡорт телендә сыҡҡан барлыҡ гәзит-журналдарҙы алдырҙым, "Ағиҙел" журналын энәһенән-ебенә тиклем уҡып сыға торғайным. Хатта ундағы ҡайһы бер мәҡәләләр оҡшамаһа ла, күңелем ятмаһа ла, уҡып бөтөргә үҙемдә көс таба инем. Шунан нимә аңланым: мейелә һәр телдең үҙенең бүлеге бар икән. Сөнки мин башҡорт, рус, татар, ҡаҙаҡ һәм инглиз телдәрен яҡшы белдем, инглиз телендә лә иркен һөйләшә инем. Бер телдән икенсеһенә күскәндә мейелә ниндәйҙер күсергес (переключатель) бар, шул күсеүҙе көйләй. Ә инде даими күнегеү булмаһа, переключатель ҡата, йәиһә күнегеү булмаһа, тән мускулдары көсһеҙләнгән кеүек, көсһеҙләнә, йомшай һәм телдәр онотола, кешенең хәтере юғала башлай, склероз барлыҡҡа килә.

Бөгөн ҡала мәктәптәрендә генә түгел, ауылдарҙа ла башҡортса уҡытыу бөтөп бара. Ҡалаларҙа башҡа милләттәр башҡорт теле икенсе телдәрҙе уҡытыу ваҡытын ала, тигән төрлө сығыштар йыш ишетелә. Мейелә һәр тел өсөн айырым бүлек бар икән, кешенең телдәрҙе өйрәнеү мөмкинлеге лә сикһеҙ һәм һәр кеше үҙ телен яҡшы белһен өсөн ул даими рәүештә күберәк башҡортса китапмы, гәзит-журналмы уҡырға һәм башҡортса аралашырға тейеш.

**Үҙемде Өфө гражданы итеп тоймайым, тиһәгеҙ ҙә, баш ҡаланың ниндәй урыны күңелегеҙгә яҡын?**

- Иҫке Өфө тип аталған район заманса ҡалаға ҡарағанда яҡыныраҡ. Унда ысын тарих йәшәй, һәр йорт үҙендә тарих һаҡлай. Ләкин ҙур ҡатлы йорттар төҙөлөшө ошо тарихты яйлап юҡҡа сығара бара. Ә бит тарихи, архитектура, мәҙәни һәйкәлдәр һаҡланырға тейеш һәм уларҙы законһыҙ рәүештә бер кем дә юҡҡа сығара алмай. Юҡҡа сығара икән, был инде енәйәт. Шулай уҡ һәйкәлдәрҙе лә, ниндәйҙер ҡарар булмай тороп, урынынан күсереү, йөҙөн үҙгәртеү законға һыймаған эш. Ә беҙҙә тоттолар ҙа Цюрупа һәйкәлен 50 метрға шылдырып ҡуйҙылар, Шакирйән Мөхәмәтйәнов һәйкәле лә МВД мәктәбенә "сәфәр" йөрөп ҡайтты. Элек Салауат Юлаев исемендәге баҡсала батырҙың бюсы ултыра торғайны. Вандалдар уны алып ташлағандан һуң, етәкселек кире ултыртырға йөрьәт итмәне. Ярай әле уны һуңынан Янғантау шифаханаһына алып барып ҡуйҙылар. Шулай уҡ Ленин скверындағы Ленин һәйкәлен реставрацияға тип алдылар ҙа, бөтөнләй икенсе төҫлө һәйкәл ултырттылар. Хәҙер батырыбыҙ Салауат Юлаевтың һәйкәле лә йәшелләнгән, ә бит ул ҡара була торғайны...

Ошо тарихи һәйкәлдәр һәм ҡомартҡыларға һаҡсыл булырға кәрәк ине, сөнки баш ҡалалбыҙҙы яратайыҡ, тип һөйләйбеҙ икән, тарихыбыҙҙы ла емереп бөтөргә ярамай, уны ла һаҡларға кәрәк.

**Башҡортостандың баш ҡалаһы уның республикаға исем биргән халыҡтың төп төйәге икәнен күрһәтеп торһон өсөн, һеҙҙеңсә, нимә эшләргә кәрәк?**

- Бөгөн, үткәндәр менән сағыштырып ҡарап, әлбиттә, уңыштар бар, тип ҡыуанабыҙ. Шул уҡ ваҡытта күп эштәребеҙ пародия кеүек кенә килеп сыға. Мәҫәлән, терминология комиссияларының төп эше - атамаларҙың йәки алтаҡталарҙың дөрөҫ яҙылышын тикшереү. Ә бит башҡорт теле дәүләт теле тип беренсе тапҡыр иғлан ителгән замандарҙа ла, унан һуң да ундай комиссиялар булған. Атайым һөйләүенсә, улар хатта водород, кислород һүҙҙәренең дә башҡортса атамаларын тапҡан, уйлап сығарған. Хәҙер иһә, интернациональ һүҙ, тибеҙ ҙә, телебеҙҙе тағы ла нығыраҡ сүпләйбеҙ. Үҙебеҙ уларҙың башҡортса атамаһын таба алмайбыҙ икән, башҡа төрки телдәрҙән алып торорға ла мөмкин бит.

Икенсенән, башҡорт шәхестәренең исемен йөрөткән урамдар юҡ кимәлендә, тиер инем. Булғандарын һанарға ла ни бары ҡул бармаҡтары етер, моғайын. Ә һуңғы йылдарҙа ундай исемдәр Өфө эргәһендәге ауылдарҙағы берәй урамға ғына бирелә башланы. Өфө ҡала Советы депутаттары башҡорт шәхестәренең кем икәнен дә белмәй ултырғанлыҡтан шулай килеп сыға ул.

Һәм иң мөһиме - башҡорт телен дәүләт кимәлендә һанға һуҡмау. Башҡорт теле дәүләт теле статусын алғандан башлап баш ҡалала үткән берәй рәсми сараның, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың, Хөкүмәт сараларының йәки Башлыҡ ҡатнашҡан сараларҙа яңылыш булһа ла башҡортса алып барыламы йәки берәйһе башҡортса һорау бирәме? Хатта райондарҙа хакимиәт көндәрен үткәргәндә ауылдарға сыҡҡан вәкилдәр йә тик башҡа милләттән була, йә улар башҡортса һөйләшеү кимәлендә лә телде белмәй. Ә бит законда ғына түгел, рәсми органдарҙың регламентында ла ултырыштар һәм башҡа саралар ике дәүләт телдәрендә алып барыла, тиелгән. Бер телдә генә алып барыу - был үҙе үк ҡанун боҙоу, енәйәт булып тора. Ә ни өсөн телдең баһаһы юҡ, сөнки уға ихтыяж юҡ. Әгәр властың закон сығарыу һәм башҡарма органдарында ишектән килеп инеү менән башҡортса белгән хоҡуҡ һаҡсылары, етәкселәрҙең ҡабул итеү бүлмәһендә башҡортса белгән секретаршалар ултырыу, власть вәкилдәренә башҡорт телен белеү мотлаҡ талап булһа, хәл үҙенән-үҙе үҙгәрер ине. Халыҡ, йәмәғәтселек кенә бында бер нәмә лә үҙгәртә алмай, власть кимәлендә телдең абруйын күтәрергә кәрәк.

**Тормошоғоҙҙа билдәле кешенең балаһы булыу ярҙам иттеме, әллә ҡамасауланымы? Сөнки хәҙер билдәле кешеләрҙең балалары һөт өҫтөндәге ҡаймаҡ кеүек йәшәй...**

- Дөрөҫөн әйткәндә, ныҡ ҡамасауланы. Хатта институт тамамлағас, аспирантураға ҡалыу хыялым бар ине, ләкин фамилияма ҡарап, юлды яптылар. Әгәр ошо йәш, энергиялы ваҡытта юлымды быумаһалар, бөгөн яҙмышым, бәлки, икенсе төрлөрәк тә булыр ине, бәлки, ғалим да булып китер инем, сөнки Өфө нефть-техник институтын тамамлағандан һуң, йүнәлтмә буйынса кафедрала эшкә ҡалдым, производствола ҡулланылырға тейешле бик күп рационализаторлыҡ асыштар эшләнем, уларға патенттар алдым, әммә улар тормошҡа ашырылманы һәм аспирантураға ла юл ябылғас, производствоға китергә мәжбүр булдым. Икенсе яҡтан, атайымдың абруйын һаҡлап, һәр аҙымымды үлсәп баҫырға, һәр һүҙемде уйлап әйтергә тырыштым. Ҡайһы бер ваҡыттарҙа күңелгә ятмаған эште лә башҡарырға тура килде.

**Уның ҡарауы, техник фәндәр белгесе ҡапыл ғына журналистикаға килде һәм һеҙҙе күптәр "Башинформ"да эшләгәнегеҙҙән белә. Ҡәләм тирбәтеү һәр кемгә лә бирелмәй, моғайын, был һәләтегеҙ атайығыҙҙан күскәндер...**

- Бәлки, шулайҙыр ҙа, әммә атайым - ысын ижадсы ине, уның һүрәтләү саралары көслө. Ә миндә, техник булараҡ, логика, аналитика көслө, тип уйлайым Шулай ҙа яҙышыу миңә атайымдың ҡулъяҙмаларын рәтләп, уларҙы баҫтырып, нәшер итеү мөмкинлеген асты. Үҙе вафат булғандан һуң уның 5 китабын сығарҙым, әле З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә 17 хикәйәнән торған тупланма ята. Алла бойорһа, мөмкин булған тиклем атайымдың архивын халыҡҡа еткерермен, тип уйлайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөйөк Еңеү байрамы яҡынлашыуы уңайынан яугир улына, атайығыҙ һуғыш тураһындағы хәтирәләре менән уртаҡлаша инеме, тигән һорау бирҙем. Яуап иһә хатта киноларҙа ла тулыһынса сағылыш тапмаған ҡот осҡос мәхшәрҙе тиҙерәк онотоп, яңы тормош төҙөргә, киләсәкте хәстәрләргә тырышҡан быуынды күҙ алдына баҫтырҙы: "Дөрөҫөн әйткәндә, мин үҫкән ваҡытта бөтөн етәксе урында, хатта мәктәп директорҙары ла, уҡытыусылар ҙа күбеһенсә кисәге фронтовиктар ине. Улар бергә йыйылһа, бер ваҡытта ла һуғыш тураһында һөйләшмәне, киреһенсә, ниндәй проблемалар бар, уларҙы нисек хәл итеү юлдарын эҙләне. Ҡайһы берҙә йырлашып-бейешеп тә алалар ине. Әммә һуғыш тураһында һөйләшкәндәрен бер тапҡыр ҙа ишеткәнем булманы. Минеңсә, кем ысын һуғышты күргән, улар ул турала хатта хәтергә алырға ла теләмәгәндер". Бәлки, был уларҙың, нимә тураһында күберәк уйлайһың, һөйләйһең, шул алдыңа килә, тигән хәҡиҡәтте аңлауы булғандыр...**

**Шәрифә САЛАУАТОВА әңгәмәләште.**

*✓ Нишләптер, максималист холҡо насар һыҙат итеп ҡабул ителә. "Ул әле йәш, максималист, үҫә төшкәс, аҡылға ултырыр", тиҙәр. Киреһенсә, кеше ғүмер буйы максималист булып ҡалырға, янып йәшәргә тейеш.*



# ҺӨНӘРЕҢДЕ ДӨРӨҪ ҺАЙЛАУ КӘРӘК

**Мәскәү дәүләт халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институты магистранты Марат ТӨХВӘТУЛЛИН менән Рәсәйҙең юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеү, һөнәр һайлау һәм лидерлыҡ сифаттары тураһында әңгәмәләштек.**



**Бөгөнгө заманда һәр кем юғары белем алырға тырыша. Хатта күңелдәренә ятмаған һөнәрҙе үҙләштерһәләр ҙә, иң мөһиме - диплом, тип ҡарай йәштәр һәм уларҙың атай-әсәйҙәре. Ә һин буласаҡ һөнәреңде нисек һайланың?**

- Етенсе синыфтан алып баш ҡалала Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында белем алдым. Бер саҡ гимназияны тамамлаған йәштәр осрашыу үткәрҙе һәм Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаһындағы вуздар тураһында һөйләне. Юғары уҡыу йорттарына уҡырға инергә теләгәндәргә үҙ тәжрибәләренән сығып кәңәштәр бирҙе. И. М. Губкин исемендәге Рәсәй дәүләт нефть һәм газ университетында белем алыу хыялы шулай барлыҡҡа килде. Туғыҙынсы синыфтан алып был университеттың тау инженерҙары әҙерләгән факультетына инеү өсөн тырышып уҡыным, теүәл фәндәр һәм инглиз телен яҡшылап өйрәндем. Ул саҡта республиканан ситкә уҡырға киткән башҡорт йәштәре һирәк ине, хәҙер генә Санкт-Петербург һәм Мәскәү вуздарында белем алыусылар күбәйҙе. Үкенескә күрә, уҡырға инеп тә, беренсе-икенсе семестрҙа имтихандарын тапшырып бөтә алмай ҡыуылыусылар ҙа бар. Сөнки мәктәп менән вуз араһында айырма ҙур, Мәскәүҙә һинең өйгә эшеңде тикшереп тороусы атай-әсәйең дә, аңламаһаң, ҡабат-ҡабат бер үк теманы һөйләгән уҡытыусы ла юҡ. Ғөмүмән, абруйлы вузда белем алырға теләп, үҙе хушһынмаған һөнәрҙе үҙләштерергә тотонған кешеләр ҙә бар. Йәштәр буласаҡ һөнәрен һайлауға илкеһалҡы ҡарай шул, хатта мин дә, алдан әҙерләнеп йөрөһәм дә, етдирәк булмағанмын икән, тип уйлайым хәҙер. Мин ҡайһы ҡалала уҡырға, ниндәй өлкәлә эшләргә теләүемде белә инем, әммә аныҡ рәүештә кем булып эшләремде күҙ алдына ла килтермәгәнмен. Бер нисә йыл үткәс кенә аңланым быны, шуға хәҙер Мәскәү дәүләт халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институтында белем алыуымды дауам итәм. Ә бит күптәр эш хаҡы юғары булһын, ипотека түләргә етһен, тип йөрөп, бөтә ғүмерен үҙе теләмәгән эш менән шөғөлләнеп үткәрә. Күңеленә ятҡан эш менән шөғөлләнеп йәшәү өсөн һөнәрҙе дөрөҫ һайларға кәрәк.

Мәскәү дәүләт халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институтына уҡырға ингәндә, әлбиттә, сит телдәрҙе, ғәҙәттә, инглиз телен яҡшы белеү талап ителә. Башҡорттарға сит телдәрҙе өйрәнеүе күпкә еңел, сөнки беҙ бала саҡтан ике телде аңлап, башҡортса һәм русса һөйләшеп үҫәбеҙ. Ғөмүмән, башҡорт телен белгән кешегә сит телдәр өйрәнеү еңел бирелә. Чехтарҙың шундай мәҡәле бар: "Нисә тел өйрәнһәң, шунса ғүмер йәшәйһең". Нидерландынан килгән бер танышым һөйләүенсә, уларҙағы мәктәптәрҙә балалар туған теленән тыш, тағы ла ете сит телде өйрәнә икән. Һайлап алыу мөмкинлеге юҡ, бөтәһе лә инглиз, немец, француз, итальян, грек, испан, латин телдәрен мотлаҡ белергә тейеш. Ә беҙ бер сит телде көскә үҙләштерәбеҙ...

**Былтыр Норвегия университеттарының береһендә белемеңде камиллаштырып ҡайтҡанһың икән. Ошо турала тулыраҡ һөйләп үт әле...**

- Мәскәү дәүләт халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институты бик күп сит илдәр менән хеҙмәттәшлек итә һәм үҙ студенттарына төрлө сит ил юғары уҡыу йорттарында белем алыу мөмкинлеге аса. "Халыҡ-ара нефть һәм газ бизнесы һәм Арктика ресурстарын үҙләштереү" тип аталған факультетта уҡыйым, Норвегияла ла ошо йүнәлеш буйынса белемемде камиллаштырып ҡайттым. Унда Будё ҡалаһындағы Nord University (йәғни Төньяҡ университет) тип аталған юғары уҡыу йортонда ярты йыл уҡыным. Был илдә бигерәк тә диңгеҙ нефть һәм газ индустрияһы яҡшы үҫеш алған һәм ошо йүнәлештә лә бик күп тәжрибә тупланым. Сит ил университетында стажировка үтеү өсөн махсус рәүештә имтихандар тапшырырға һәм талап ителгән белем кимәлен күрһәтергә кәрәк.

Норвегия бик ҡыҙыҡлы ил, мәҙәниәтенән алып йәшәү кимәленә тиклем Рәсәйҙән бик ныҡ айырыла. Норвегия халҡының мәҙәниәтен, көнкүрешен, телен бик ҡыҙыҡһынып өйрәндем, кешеләр менән күп аралаштым. Ләкин ул илдә йәшәргә ҡалыу теләге барлыҡҡа килмәне, кеше өсөн тыуған илдән дә ҡәҙерлерәк ер булмауына тағы бер инандым. Сөнки Башҡортостандан ситтә йәшәгәндә лә үҙ халҡыңдың рухи ҡомартҡыларының һәм туған телеңдең ҡәҙерен белә башлайһың, тамырҙарыңды юғалтмау мөһим булыуын аңлайһың. Норвегияла ни бары биш миллион халыҡ йәшәй, әммә ундағы диалекттарҙың һаны Башҡортостандағы кеүек бик күп. Башҡорттар ғына үҙ-ара аралашҡанда, һин ҡайһы ырыуҙан, ҡайһы райондан, тип белешә башлаймы тиһәң, норвегия кешеләре лә шулай таныша икән. Норвегия бик ҡиммәтле ил, донъяла ул хаҡтар буйынса икенсе урында тора. Норвегияның Төньяҡ университетында уҡытыу системаһы беҙҙәгенән бик ныҡ айырыла. Унда дәрес сәғәттәре аҙ һәм уҡытыусылар темаларҙы дөйөмләштереп кенә аңлата, студенттар үҙаллы өйрәнә. Бөтә йәштәрҙең дә китапханаларҙа шөғөлләнеүе, хатта төнө буйы ҡалып уҡыуы бик ғәжәпләндерҙе мине. Ике илдең уҡытыу системаларын сағыштырып, ҡайһыһы яҡшыраҡ икән, тип әйтеүе ҡыйын. Ләкин ваҡытын дөрөҫ бүлә белгән кеше өсөн Норвегияла белем алыуы уңайлыраҡ булыр ине, моғайын, сөнки унда студентҡа уҡырға ла, эшләргә лә форсат бар.

**Уңыш ҡаҙаныу, маҡсаттарыңа өлгәшеү өсөн ҡайҙан көс табаһың?**

- Үҙ маҡсатыма өлгәшмәйенсә, артҡа сигенмәй торған кеше булһам да, ҡайһы саҡта ниндәйҙер эш башҡарыу өсөн этәргес көс йәки мотивация таба алмаған осраҡтар була. Был мәғлүмәт күплегенән килә, ҡиммәттәр араһында аҙашып китәһең ҡайһы саҡ. Шуға кәрәкмәгән, бик мөһим булмаған нәмәләрҙе икенсе планға күсереп торорға тырышам. Уңыш ҡаҙаныу өсөн һәр ваҡыт аныҡ маҡсат ҡуя белергә кәрәк, һәр кем үҙе өсөн нимә мөһим булыуын аңларға тейеш. Ғаилә, карьера, байлыҡ теләйһеңме - ынтылыш булһын башта. Ҡыҙғанысҡа күрә, күптәр үҙенең нимә теләгәнен аңлай алмай, бигерәк тә йәштәр тормош һынауҙарын ауыр кисерә һәм зарланып ҡына уҡый, эшләй. Был дөрөҫ түгел, тормошта яратҡан шөғөлөң булһын ул. Мин һәр ваҡыт кешеләр менән аралашырға тырышам, улар менән бергә донъяны киренән өйрәнәм төҫлө.

Нишләптер, максималист холҡо насар һыҙат итеп ҡабул ителә. "Ул әле йәш, максималист, үҫә төшкәс, аҡылға ултырыр", тиҙәр. Киреһенсә, кеше ғүмер буйы максималист булып ҡалырға, янып йәшәргә тейеш. Мәҫәлән, бала саҡта беҙ космонавт булырға, айға осорға, донъя гиҙергә хыялланабыҙ. Әммә йәмғиәттәге ҡалыптар күптәрҙең күңелендәге шул ялҡынды, максимализмын, хыялдарын һүндерә. Бик һирәктәр генә максималист булып ҡала. Нимәгә тотонһа ла эшен аҙағына еткереп, юғары кимәлдә башҡарған, маҡсатҡа өлгәшеүсән ундай шәхестәр менән танышмын. Бәләкәй саҡта атай-әсәйҙең, кем менән аралашаһың, дуҫтарың кем, тип ҡыҙыҡһыныуы сәйер күренә ине. Кем менән уйнаһаң да, кем менән дуҫлашһаң да - барыбер, тип уйлайһың. Әммә күп нәмә аралашҡан кешеләрҙән тора икәнен һуңыраҡ аңлайһың. Шуға хәҙер кемдер берәү менән тығыҙ аралаша башлаһас та, ул миңә ниндәй йоғонто яһауын анализлап ҡарайым. Юҡҡа ғына дуҫтарың кем икәнен әйт, һинең кем булыуыңды әйтеп бирәм, тимәгәндәр бит. Кеше - үҙенең иң яҡын биш дуҫының проекцияһы.

**И. М. Губкин исемендәге Рәсәй дәүләт нефть һәм газ университетында һин студенттар ойошмаһының етәксеһе булғанһың. Лидерлыҡ тәбиғәттән бирелгән сифатмы?**

- Камиллашырға теләмәгән кешеләр генә лидерлыҡ сифаты кешегә тыумыштан бирелә, тип иҫәпләй. Әлбиттә, башҡаларҙы үҙ артынан эйәртеү өсөн талант, харизма кәрәк, ләкин, иң мөһиме, кешенең эшһөйәр булыуы талап ителә. Үҙ эшенең оҫтаһы булған, тәжрибәле кеше лидер булып үҫешә ала. Һәр һалдат генерал булырға хыяллана, тиҙәр. Хыялланырға ғына түгел, теләргә һәм бар көсөңдө һалып, маҡсатыңа ынтылырға кәрәк. И. М. Губкин исемендәге Рәсәй дәүләт нефть һәм газ университетында икенсе курста уҡығанда нефтсе инженерҙарҙың студент ойошмаһына барҙым. Дүрт йыл дауамында Нефть һәм газ сәнәғәте инженерҙары халыҡ-ара йәмғиәтенең студенттар секцияһы эшендә әүҙем ҡатнаштым. Ойошмаға килгән мәлдә уның президенты булырмын тип күҙ алдыма ла килтермәнем. Һөҙөмтәлә уны ике йыл етәкләнем, барыһына ла эш барышында өйрәндем. Лидерлыҡ сифаттарын үҫтереү буйынса ғына түгел, йәмәғәт ойошмаһы эшендә кәрәк булған төрлө өлкәләрҙә белемемде камиллаштырыу ниәтендә курстар үттем, китаптар уҡыным һәм, иң мөһиме, үҙемдән алда эшләгән тәжрибәле кешеләрҙең кәңәштәрен тыңланым. Шуға, лидерлыҡ сифаты бала саҡтан уҡ һиҙелеп күренмәҫкә мөмкин, кеше тора-бара күңеленә ятҡан эште табып, үҙ юлын һайлаҕас, шул йүнәлештә үҙен лидер, фекерҙәштәрен артынан эйәртә алған шәхес булараҡ таныта алыуы бик мөмкин...

**Ситтә белем алған йәштәр кире республикаға эшкә ҡайтмай, кадрҙарға ҡытлыҡ кисерәбеҙ, тиҙәр. Һин был мәсьәләгә нисек ҡарайһың?**

- "Мәскәүгә уҡырға киткәс, шунда ҡалаһың инде, республикаға файҙа килтерәң килмәйме?" - тигәндәрен йыш ишетергә тура килә. Мин, тыуған төбәктән ситтә йәшәп тә файҙалы булырға мөмкин, тип иҫәпләйем. Сөнки хәҙерге заманда кеше бер урында ғына йәшәмәй, һәр ваҡыт үҫешкә ынтыла һәм эш урынын да алмаштыра, күсенеп китеүгә лә еңел ҡарай. Әлбиттә, киләсәктә Башҡортостанға ҡайтып та йәшәргә булыр, бында минең туғандарым, был минең кесе Ватаным. Шулай ҙа юғары уҡыу йортон тамамлағандан һуң хеҙмәт юлын Мәскәүҙә башларға уйлайым, үҙемде һынап ҡарарға теләгән өлкәләр күп. Ғөмүмән, йәшәргә теләгән ҡаланы һайлау, ғаилә ҡороу, һөнәри үҫеш мәсьәләләре кешенең йәшенә һәм шәхес булараҡ формалашыу этаптарына бәйле. Шуға алдан пландар төҙөмәйем, күҙ күрер, тип кенә әйтә алам. Тыуған ерҙән, үҙ мөхитеңдән айырылып ситтә йәшәүе еңел түгел. Халҡыңдың рухи ҡиммәттәрен, туған телеңде, тамырҙарыңды онотмаҫҡа һәм тыуған төйәгең менән бәйләнеште өҙмәҫкә тырышаһың. Быны аңлау һәр кемдең үҙенән тора, ә яҡташтар гел ярҙам итергә әҙер. Шуға ла Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларында уҡыған йәштәр берләшеп, уртаҡ саралар үткәреп, башҡорт телендә аралашып йәшәй. Миңә һәм Эльмира һеңлемә рухи тәрбиә биреүҙә ата-әсәйем Физиәтулла Рәхмәтулла улы һәм Әнисә Ахун ҡыҙының роле ҙур, улар бала саҡтан башҡорт халҡының мәҙәниәтенә ылыҡтырып, туған телгә һөйөү тәрбиәләп үҫтерҙе. Был уларға еңел бирелмәгәндер ҙә, сөнки һөнәрҙәренә бәйле булған сәбәптәр буйынса беҙ Башҡортостандан ситтә йәшәнек. Шуға ла мин халыҡтың рухи ҡиммәттәрен киләсәк быуынға тапшырып ҡалдырыуҙа йәштәр һәм ололар араһындағы бәйләнеш ҙур роль уйнай, тип һанайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Берәү ҙә был донъяға белеп тыумай, һәр кем үҙе теләгән юҫыҡтағы эшкә ғүмер буйы белемен камиллаштырып, уҡып өйрәнә. Был әңгәмә тиҙҙән мәктәпте тамамлап, артабан белемдәрен юғары уҡыу йорттарында камиллаштырырға ниәтләгән йәштәр өсөн фәһемле булыр, моғайын. Өлгәшергә теләгән бейеклектәр, ҡаҙанырға уйлаған уңыштар тырышлыҡ һәм үҙ эшеңде яратып башҡарыу аша яулана икәнен үҙләштереү өсөн.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

***✓ Хәтирә хәҙер инде әллә ҡат-ҡат уҡыуҙан, әллә кеҫәлә оҙаҡ йөрөтөүҙән таушалып бөткән һыулы битте тотоп, тәҙрә янына, яҡтыға күсте. Күсте лә, ҡулындағына күҙ йүгертеп сыҡҡас, урындыҡ ситенә сүгеп ҡалды.***




...Ваҡыт тигән нәмә кешенең бәхетлеме-бәхетһеҙме икәнен һорап тормай ҙа инде. Ул һин ни халәттә йәшәп ятһаң да ағымын туҡтатмай икән. Яҙҙы ҡыуып йәй килә лә, ни аралалыр уныһын көҙ алмаштыра. Шунын кеүек, Хәтирәнең кейәүҙә булыуына ла йыл булды. Былтыр ошо һалҡын буранлы ҡышта ул ат санаһына тейәлгән аллы-гөллө күпмәләр өҫтөндә ауылынан оҙатылып киткәйне. Бына тағы ҡыш килде. Көнө ла, төнө лә бергә уҡмашып, оҙайлы бер мәлгә әйләнгән. Был миҙгелдә эш тә аҙ. Кистәрен һалҡын клубта йәштәрҙе йыйып тотоу ҙа ауырлашты. Булғандарына кино-маҙар алдынан политсәғәт үткәреп ала ла, китапханаға килгәндәргә китаптар өләшә. Әле һуңғы көндәрҙә комсомолдарҙың Белорет ҡалаһында үтәсәк ҡышҡы ярышына әҙерлек менән мәшғүлдәр. Көн үҙәгендә егет һәм ҡыҙҙарын теҙеп алып, урман-тауҙар гиҙеп саңғыла йүгертеп әйләнә. Район етәксеһе ярыш-маҙарҙы үҙе яратҡан кеше, мотлаҡ беренсе урын беҙгә булырға тейеш, тип, алдан уҡ киҫәтеп тә ҡуйған. Былай әлегә тиклем һынатҡандары юҡ, моғайын, был юлы ла мах бирмәҫтәр. Тик бына Хәтирә үҙе генә һуңғы ваҡытта йүгергәндә талсығамы, хәле тиҙ бөткәндәй, тауға үрмәләгәндә лә теҙ быуындары ҡалтыраныр, йомшарып киткәндәй. Әле ҡата башындай ғынанан атаһы эшләп биргән ҡалтағай саңғыларҙы уға әйәреп һунарға сыға ине бит ул. Һис ҡалышмаҫтан эйәреп йөрөй, бихисап саҡрымдар үтә ине. Шунлыҡтан, көслө лә, таҫыллы ла булып үҫте, ауырып-маҙар ятҡаны ла булманы. Хәҙер килеп, "арыйым" тип команданан сыға алмай бит инде. Урынына ла ҡуя һалыр ҡатын-ҡыҙ юҡ.

Көтөлгән көнө лә килә һалып етте. Өс саҡрым унын кеүек бешеккән кеше өсөн бер ни түгел дә, аҙыраҡ хәлемде ҡыҫа төшөрмөн инде, тип йүгереп сығып киткәйне, йөрәкһеүе булды, күңеле болғанды. Бер нисә ерҙә туҡтап, уҡшып алды алыуын, әммә старттан үҙе менән сыҡҡандарҙы күҙ күреме алыҫлыҡта ҡалдырыуға өлгәште Хәтирә. Был трасса уға таныш, йылға яры буйлап оҙон ғына оланды үткәс, анау күренеп ятҡан тауҙы ҡыялатып буйлайһың да, арьяғы гел һарҡыуға китә. Тау түбәндәрәк һәҙәктә трамплиндары ла була торған. Иң мөһиме, тауҙы үрмәләү, шуға ғына хәле етһен.

Тик саҡ ҡына ғәмәлен самаламаны йәш ҡатын. Түбәгә етәрәк артыҡ көсәнеүҙән башы әйләнде, күҙ алдары ҡараңғыланды. Шулай ҙа, ял итеп алыу тураһында уйлап та тормаҫтан, ул бар хәленсә таяҡтарында этенеп, аҫҡа көйәлде. Хәҙер, хәҙер тәне хәл алыр, тип өмөтләнгәйне, киреһенсә, мускулдары бушау менән таралып китә яҙҙы. Юлды сама менән тойомлап ҡына өйә торғас, ян-яҡта ялпылдап ҡалған ағастар алдында өйөрөлә башлағандай тойолдо. Һәм саңғысы ел тиҙлеге менән трамплин осонан ысҡынып, һауаға атылды ла... упҡынға убылды.

Ете ят урында иҫенә килде. Теше-тешкә теймәй ҡалтыраныуҙан. Ҡайҙандыр килгән һыуыҡ елекка үтә. Тукта, ул һалҡын ошо... күкрәк аҫты тәңгәленән килә түгелме? Һынар ҡулын саҡ ҡыбырлатып, эс тәңгәленә һуҙғайны, уны берәү эләктереп алып туҡтатты:

- Ярамай! Ярамай, - тине унын битенә яҡын уҡ килеп кемдер.

Русса һөйләшә, был һүҙҙе аңлай ҡатын, ишеткәне бар. Ята торғас, өндәшеүсегә башын борҙо, аҡ косынка ябынған тумалаҡ алһыу битле олораҡ ҡатын. Күҙҙәре күм-күк... мәрйә...

- Өш-шө-ййөм... - бының аңларына өмөт булмаһа ла өшөү тәкәтте ала. Санитарка, ысынлап та, аңламай уны. Шул бер һүҙен ҡабатлап, күтәрергә иткән ҡулдарын кире тартып һала ла ҡуя. Сараһыҙҙан Хәтирәнең йәштәре урғылып сыҡты ла күҙ ситтәре буйлап сәс араһына аҡты. Туҡтатырға тырышып ҡараны - булманы, киреһенсә, ярһытып, ҡалтыратып уҡ алып китте. Яндағы ҡатын ҡурҡты, ахыры, сыға һалып, кемдер саҡырып килде. Оҙон буйлы йәшерәк ҡатын инде. Инде лә олораҡына иҙәп күрһәткәйне, тегенеһе сепрәккә төрөлгән боҙ киҫәген Хәтирәнең эсенән алды. Ах, шул нәмә өшөттөргән икән, эсен өткән әсетеү кәмеп ҡалды.

- Бедная. Что с ней будет? - тип йәлләп кенә әйтеп ҡуйҙы шул ваҡыт мәрйәләрҙең олоһо.

- Да ничего не будет, просто детей она больше иметь не сможет, - тине икенсеһе иҫе китмәй генә. Санитарка Хәтирәне сәнскеле тышһыҙ одеял менән ябып, сит-ситтәрен ҡымтыны ла, сығып киттеләр. Тәне йылынған һайын нығыраҡ ойотто һәм ҡатын бил тәңгәләндә нимәһенендер өҙөп-өҙөп һыҙлауын тынлайтынлай, йоҡоға китте.

Кемдендер маңлайына ҡағылыуына күҙҙәрен аса - ире ултыра. Ниһайәт, бер яҡын кешеһен күреү шатлығынан да, ошо хәлдә ятыуына оялыуҙан да таңы йәштәр быуҙы. Таныш булмаған, үҙен аңламаған һәм тел белмәгән ерҙә ярҙамһыҙ булып ятыу аҡылдан яҙҙыра ине уны.

- Бөттө... бөттө, - Ғимран ибәтәйһеҙ генә итеп ҡатынының сәстәрен һыйпаны.

- Ал-лып ҡайт мине-е, - Хәтирә иренә тәүге тапҡыр шулай ялбарып, ярҙам һорап өндәште.

- Ҡайтырбыҙ... Ҡайтырбыҙ, аҙыраҡ һауыҡ та...

- Нимә булған? - ҡатын йәшле күҙҙәрен иренә күсерә.

- Нимә тип... Ауырлы булғаныңды белмәгәйнеңме ни?

- Ау-уыр-лы?.. - Уф, кеше был хаҡта ир менән һөйләшәме ни?

- Баланы юғалттыҡ, һинә операция яһанылар. Сабырлығыңды йыйып, бер аҙ дауаланырға тура килер.

Ҡайтҡас, күпмелер ваҡыт үткәс, Хәтирә теге мәл дауаханала урыҫ ҡатындарының һөйләшеүен хәтерендә өйөрөлтә торғас, Даша апайҙан һорамай булдыра алманы. Инде бер ғүмер башҡорттар араһында көн итеп, үҙе лә шуларға оҡшап ҡалған апай, Хәтирәнең әйткәндәрен тыңлап, өндәшмәй ҡалды.

- Нимә, Даша апай? Һин дә аңламайһыңмы әллә?

- Аңлайым да... яңылыш ишетмәнеңме икән тейем.

- Нисек яңылыш ишетәйем мин, урыҫ һүҙен икенсе урыҫ һүҙе менән алмаштыра белмәйем дә инде, - йәш ҡатын ҡыл тайып китә яҙҙы. - Төшөнмәһәм дә, мин урыҫсаны хәтәр шәп ятлап алам, бер ишеткән дикломацияны ла һеңдерәм дә ҡуям. Аңламайым ғына шул мына...

- Һе-е, - Даша был үткен бисәнән ҡотола алмаҫын белә һәм һәр һүҙен үлсәп кенә сығара, - Балаң... булмаҫ микән... тиғәндәр.

Ике ҡатын да тынып ҡалды. Һәр береһе үҙ уйына сумды. Ярай әле олоһо йыуатырға һүҙ тапты:

- Тороп тор әле, тота килеп яҙа-йоҙа хәбәрҙән әллә нимәләр хәл итмә. Мин ошонда килен булып төшкәс, дүрт йыл тыу йөрөнөм. Нимә тип кенә сәйнәмәнеләр. Ауырға ҡалғаныңды белгәс, урманда бурала ятҡан иремә барып әйтәйем тип, Ағиҙелде йәҙәп сыҡтым. Унан ана, тоҡтоң ауыҙы сиселгәйне, һанап ҡына өлгөр - һигеҙ иттем дә ҡуйҙым.

Ире бошондо микән был хәлгә, әллә артыҡ иғтибарға алманымы? Хәтирәгә был аңлашылманы. Беләме ул табиптарҙың ни әйткәнен? Аңлаймы ҡағыҙҙарына ниҙәр яҙылғанын? Үҙен ғәйепле һанау тойғоһо көндән-көн нығыраҡ үҫте ҡатын күңелендә һәм бер аҙҙан ул был йөктө яңғыҙы ғына күтәрә алмай башланы.

- Ғимран, - тине ул бер кис урындыҡта салҡан ятып гәзит уҡыған ире янына йәйләп ултырҙы ла, - һин Билдәрит враштары менән һөйләштеңме?

- Нимә тураһында? - ҡапыл ғына һорауға һорау менән яуапланы ире һәм был яуаптан унын барын да белгәнлеген аңланы ҡатын.

- Балабыҙ булмаҫ микән?.. - Хәтирә моңһоуланған ҡараштарын тәҙрәгә күсерҙе.

Ғимран да тороп ултырҙы, гәзитен ситкә һалып, ҡатынының яурынын ҡосоп, үҙенә тартты:

- Ҡайғырма, көҙгә мин һине Мәскәү больницаһына алып барам. Уҡыған ерем, ҡаланы беләм, таныштарым да бар.

Өҫтөнән ауыр бер ташты һелкеп төшөргәндәй булды ҡатын. Бына бит, унын ире ниндәй аҡыллы, кешелекле. Ә ул сығып китеү уйына барып еткәйне. Хәтирә һулҡылдап иренә һыйынды...

Көҙгә Мәскәү яҙманы уларға. Уларҙың бына түгел, миллионлаған күңелдәрҙең уй-хыялдарын селпәрәмә килтереп, шул йәй һуғыш башланды. Аҙна һайын ауылдарҙан арба-арба ир-егеттәр килделәр ҙә, военкомат алдында йөк машиналарына тейәлеп, ҡалаға оҙатылдылар. Йә аҙағында уҡ ҡара ҡағыҙ алыусылар ҙа, ул ҡағыҙҙы көҙгәрәк устарына йомоусылар ҙа булды. Ир-егет ҡулынан яҙған көрәк-балталар ҡатындар, балалар беләгенә ятты, ат башында ла, тракторҙарҙа ла, урман эстәрендә лә яулыҡ-итәктәрҙе күреү береһен дә аптыратмай хәҙер. Сыбыртҡы тотоп йөрөгән бригадир ҙа Даша апай бит инде. Район етәкселегендә райком рәйесе лә, баш зоотехник булған Ғимран ҡалды ирҙәрҙән. Улар фронтҡа ебәреүҙәрен һорап, ҡат-ҡат ғариза яҙһалар ҙа, тота килделәр. Сөнки тылда ла үҙенә күрә фронт. Аҙналар буйына күрмәне ирен Хәтирә. Әле был ауыл фермаһында мал аҙығы етмәй, әле икенсеһендә һыйырҙар күтәрткән, өсөнсөһөндә һарайҙы йылытырға, ит, һөт нормаһын тапшыртырға. Тәүлектәр буйы юғалып тороп, арып-йонсоп ҡайтып инеп, мунса төшөп, өҫ-башын рәтләтә лә тағы сығып юғала. Былай ҙа ҡаҡса кәүҙә бөтөнләй кибеп-ҡатты. Анау брезент плащын кейеп алһа, тот та баҡсаға ҡараҫҡы итеп ҡуй үҙен. Йөлләй ҙә ирен, ғорурлана ла. Ул бит ил өсөн, еңеү өсөн шулай йән аямай йөрөй. Ысын коммунист шул ул. Белмәй ҡалдырмағандарҙыр әле, совхоз унһыҙ нишләр?..

Хәтирә лә тракторҙар курсына йөрөй башланы. Ул да иренән ҡалышырға теләмәй, файҙалы булғыһы килә. Яҙғы сәсеүгә төшкәндә ҡорос атҡа ултырмаҡсы әле. Шундай ҡанатлы уйҙар менән иренең сисеп киткән кейемдәрен ышҡый ине, салбар кеҫәһендә нимәлер бар һымаҡ тойолдо. Кәрәкле ҡағыҙын һыулаттым микән, тигән уйҙан ҡурҡып, керен шаптырлатып һыу эсенән һурып алып, өҫкә күтәрҙе. Кеҫәһенә ҡулын тыҡһа, ысынлап та, ҡағыҙ. Йә инде, эй, эшкинмәгән бисә! Шуны ҡарап һалһа, ней булмаған! Бәләкәйләткәнсе тәсләнгән ҡағыҙ киҫәген ипләп кенә асып тағатып, көлдөксәгә һалды ла, өрөп киптерерҙәй булып, яҙылғандарына күҙ һалды ҡатын. Аһ, урыҫса түгел дәһә, башҡортса, хатта... ҡатындар ҡулы менән яҙылған. Хәтирә хәҙер инде әллә ҡат-ҡат уҡыуҙан, әллә кеҫәлә оҙаҡ йөрөтөүҙән таушалып бөткән һыулы битте тотоп, тәҙрә янына, яҡтыға күсте. Күсте лә, ҡулындағына күҙ йүгертеп сыҡҡас, урындыҡ ситенә сүгеп ҡалды. "Ҡыҫыр бисәнде ҡалдыр ҙа миңә күс, дүрт айлыҡ ауырым бар. Баш тартыр булһаң, райкомға барам, коммунистан төшөртәм", тип яҙылған ине был "документта". Нисек инде, "ҡыҫыр бисә", нисек инде, "ауырлы"? Нимә, был хат унын иренә яҙылған буламы? Һуң атыу, үҙенә булмаһа, нишләп алып йөрөһөн? Кемдән һуң ул? Кем яҙған? Унын ире менән... икенсе ҡатын? Булмаҫ! Мөмкин түгел... Ул бит Хәтирәнән башҡа ҡатын-ҡыҙға күҙ ҙә һалмай! Нисек инде... ә был нимә...

Ире ялға ҡайтты, мунса төштө, ҡырынды, аш артында бындағы хәл-әхүәлде һорашты. Һәүетемсә генә һөйләштеләр. Ғимрандың арыған, талсыҡҡан төҫенә ҡарап, үҙен әрләне хәҙер Хәтирә. Бында кеше эт шикелле булып йөрөй, ә ул унан ғәйеп эҙләп ултыра. Донъя болғар өсөн яҙылған бер ғәйбәттән.

Ашап алғас, ҡултыҡлашып, клубҡа юлландылар. Яҙғы сәсеү эштәре буйынса йыйылыш ҡуйылған ине. Райком етәксеһе ҡаланан ҡайтып етә алмаған, унын урынына Ғимран сығыш яһаясаҡ. Әллә нисә ауылдан йыйылған делегат ҡатын-ҡыҙҙың һорары ла, һөйләре лә күп булып, йыйылыш төн ауғансы барҙы. Һәлһерәшеп ҡайтып ингәйнеләр генә, арттарынан уҡ ишек шаҡынылар. Ҡатын менән ир бер-береһенә ҡарашып алды: кем булырға мөмкин? Ғимран ире күлдәген һала башлағанлыҡтан, ҡатынына баш иҙәне - ҡара. Хәтирә өй ишеген асып соланға башын һуҙҙы:

- Кем ул?

- Мин инем. Асығыҙ әле, һүҙ бар.

Келәне ысҡындырыуға, ишекте ҡыйыу ғына һелкә тартып, Һабанлы ауылынан Рәйсә апай килеп инде. Был апайҙы, алдынғы доярка булараҡ, районда ла беләләр, Хәтирә лә таныр тора.

- Бә-әй, һаумыһығыҙ, Рәйсә апай түгелме? - йәш ҡатын аптырауын йәшереп йылмайҙы.

(Дауамы бар).

АФАРИН!

# "АРҒЫМАҠ"ТАР...

## юғары баһаланды



**Башҡорт дәүләт филармонияһының ҙур залында "Арғымаҡ" этно-рок төркөмөнөң ҙур концерты булып үтте. Ике сәғәттән ашыу барған тамаша ысын мәғәнәһендәге Аң, Рух, Ғәм, Ырыҫ, Моң, Аҡыл, Ҡот байрамына әүерелде.**

"Арғымаҡ" этно-рок төркөмөнөң, уның етәксеһе Ринат Рамазановтың ниндәй үҙенсәлекле һәләткә эйә икәненә, уларҙың ижади башҡарыу мөмкинлегенә, репертуар байлығына күптән инде шаһитбыҙ. Төркөмдөң исеме ишетелеү менән һоҙлау-өзләүгә ҡушылып боронғо башҡорт ҡобайыры яңғырай башлағандай, ҡанатлы ат сабып үткәндәй, тарих терелеп киткәндәй. "Арғымаҡ" күптән инде үҙ йөҙөн тапҡан, үҙ имиджын булдырған.

Был юлы концерт "Урал" йырын күмәкләп ҡурайҙа уйнау менән башланып китеп, "Зәйнулла" музыкаль әҫәрен, "Зәки Вәлиди көйө"н, "Шайморатов генерал" йырын башҡарыу менән тамамланды. Улар араһында төркөмдөң репертуарында күптән инде нығынған музыкаль әҫәрҙәр, башҡорт халыҡ фольклорының аҫыл гәүһәрҙәре этно-рок, этно-джаз стилендә яңғыраны. Егеттәргә Катя Ямщикова, Эльвина Ҡәйүпова, Линар Дәүләтбаев етәкселегендәге халыҡ музыка ҡоралдары оркестры ҡушылып йырланы һәм уйнаны.

Беҙҙе иң беренсе нәүбәттә, әлбиттә, "Арғымаҡ"тың сығышы, икенсенән, уныһы инде бигерәк тә ҡыуанырлыҡ, концертҡа килгән халыҡтың әүҙемлеге, һәр сығышты хуплау һүҙҙәре, артистарҙы дәртләндереү ауаздары менән оҙатыуы хайран ҡалдырҙы. Сәхнәләге хәрәкәт йыр, ҡурай, музыка ҡоралдары, видеоряттәр аша залдағы һәр бер тыңлаусыға барып етеп, һуңғы сиратта дөйөм хәрәкәтте барлыҡҡа килтерҙе. Ике сәғәттән ашыу күңелдәрҙә яңғыраш алған был хәрәкәт тамаша аҙағында кескәй балаларҙы ла дәртләндереп, улар ҙа түҙмәйенсә сәхнәгә сығып, артистар менән бергә бейей башланы. Музыканың, халыҡ ижадының тәрбиәүи әһәмиәте ошо рәүешле туранантура балаларҙың йөҙөндә сағылыш тапты. Күпме кескәй йөрәктәр тоҡанды был залда.

Бик үҙенсәлекле тамашасы йыйылғайны кисәгә. Үҙебеҙҙең халыҡтан тыш, урыҫтар, татарҙар, ҡаҙаҡтар, ҡырғыҙҙар, украиндар, сыуаштар, чечендар һ.б. Былары мин танып белгәндәре генә. Концерт күҙ менән ҡаш араһында Рәсәй, донъя кимәлендәге сараға әүерелде лә ҡуйҙы. Һеҙҙең игтибарға Ҡаҙағстандан махсус рәүештә "Арғымаҡ"тың концертына тип килгән Радина Батпеневаның һүҙҙәрен килтереп үтәм: "Мин Ҡаҙағстанда университетта рәссамдарҙы уҡытам. "Арғымаҡ" этно-рок төркөмөнөң концерты буласағы хаҡында ишетеп ҡалғас, унда барыр өсөн юлдар эҙләй башланым. Сөнки мине эшемдән Өфөгә былай ғына ебәрмәҫтәр ине. Тырыша торғас, һөҙөмтәлә шулай килеп сыҡты: бер уҡыусымды Ҡаҙан аша Алабуғалағы арт-спартакиадаға алып китеп, унан Өфөгә килеп еттек. Быны өсөн беҙгә биш көн кәрәк булды. Был осраҡта минең төп маҡсатым - "Арғымаҡ"тың концертына әлегеү ине. Маҡсатым ысулды аҡланы. Бына хәҙер мин бында. Бында, Өфөлә барлыҡ хыялдар тормошҡа аша..."

Йәки булмаһа концертты тамаша ҡылған Злата Соболеваның интернет селтәрендәге һүҙҙәре: "Ребята, вы бесподобны! Вы талантливы во всем - в творчестве, в сценической культуре, в общении со своим зрителем. Вас приятно слушать, приятно смотреть на вас, но а эмоции и позитив, которые мы получили за два часа концерта не передать словами! Вы - супер!.."

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Халыҡ тарәлышыр алдынан концертты тамаша ҡылыусы Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов минең янға килеп, ҡулымды ҡыҫып китте. Концертта яңғыраш алған "Зәйнулла" поэмаһы өсөн рәхмәт, тине ул. Мин иһә быны ҡала башлығының "Арғымаҡ" тың сығышы өсөн биргән баһаһы тип ҡабул иттем.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ҠЫҪҠА ИНТЕРВЬЮ

# БЫУЫНДАР БӘЙЛӘНЕШЕ ӨҘӨЛМӘҺӘ...

**Бөйөк Ватан һуғышы ваҡиғалары, шул осорҙоң ауырлыҡтары тураһында китаптар, кинолар аша ғына беләбеҙ. Кем китап уҡырға яратмай, ул артыҡ ҡыҙыҡһынмай ҙа был ваҡиғалар менән. Шул уҡ ваҡытта бәләкәйҙән олатай-өләсәһе тәрбиәһенән күңеленә һеңдереп үҫкәндәр һәм Бөйөк Ватан һуғышы ваҡиғаларына, ул осор кешеләренә ҡарата оло ихтирам менән ҡараған йәштәр ҙә бар арабыҙҙа. Шуларҙың береһе - Башҡортостан юлдаш телевидениеһы хәбәрсеһе Азат Ғәлиуллин менән әңгәмәбеҙ.**

**➔ Ғаиләгеҙҙә Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар бар инеме?**



- Бөйөк Ватан һуғышы йылдары әсәйемдең атай-әсәһенең йөшлек, бала саҡ осорона тура килгән. Өләсәйем Мәүә Сөнәғәтова тыл ветераны булһа, олатайым Әҡсән Сөнәғәтов Бөйөк Ватан һуғышында Алыҫ Көнсығышта, япон агрессорҙарына ҡаршылыҡ күрһәтеүҙә ҡатнаша. Ул хеҙмәткә 1940 йылда алына һәм донъялар тынысланғас, ил һағында тороп, ете йыл үткәс кенә ҡайта. Олатайым тураһында әсәйемдәр һөйләүенән генә беләм, ҡайтҡас, ул колхозда эшләгән, һәр эш көнөнә байрамға барған кеүек аҡ күлдәк кенә кейеп йөрөй торғайны, тиҙәр. Бик ипле, бөхтә кеше булған. Олатайымдың һуғышта күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн бирелгән наградалары ла күп, ләкин ул осорҙа Алыҫ Көнсығышта хеҙмәт итеүселәргә ҡарата хөрмәт, игтибар күрһәтеп бармағандар. Ә өләсәйем ҡәһәрле һуғыш йылдарында көҙҙән алып яҙ сыҡҡансы Белорет районында күрин ҡырҡып, ҡышҡы һыуыҡта ялан ҡул сайыр айырып йөрөгән. Яҙын колхозда баҫыу эштәренә йөрөгәндәр. Ошо ауыр йылдар тураһында ул беҙгә - ейәндәренә - күп һөйләмәне, мин үҙем дә уның яраларын яңыртып, ауыр хәтирәләре тураһында төпсөнөп һорашҡаным булманы. Үҙе күргәндәрҙе балаларына бирмәһен, тип уйлағандыр инде.

**➔ Етеш тормошта йәшәгәс, бөгөн беҙ ул быуын кешеләре кисергәндәрҙе аңлай ҙа, күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ кеүек...**

- Эйе, хәҙерге быуын кешеһе аслыҡ-ялан ғаслыҡ, ҡырҙа үҫкән үлән ашап, бер телем икмәк өсөн тилмереп ултырыуҙың ни икәнен белмәй. Мәләүездә командировкала булырға тура килгәйне, базарҙа иген һатыусыларҙың бойҙайҙы түгеп-сәсеп, тапап торғанына шаһит булдыҡ. Улар эргәһенән үтеп барған бер инәй рәнйеп тороп: "Беҙ бер үс иген өсөн төрмәлә ултырып сыҡҡан кешеләр, ә һеҙ түгеп бөтҡәнһегеҙ", - тип шелтә яһаны. "Әшегеҙ булмаһын", - тип кенә яуапланы уға һатыусылар. Бына ниндәй мөнәсәбәт хәҙер икмәккә.

**➔ Бөйөк Ватан һуғышы ваҡиғалары, геройҙарына ҡарата ла йәмғиәттең мөнәсәбәте төрлө. Кемдер хөрмәт менән ҡарай, рәхмәт әйтә, кемдер тиргәй. Һин ни уйлайһың был турала?**

- Әлеге заманда донъяла барған үҙгәрештәр, илдәрҙәге ыҙғыштарҙы телевизорҙан ҡарауы ҡыйын хатта. Шундай уҡ мәхшәр беҙҙең олатай-өләсәйҙәрҙең башына төшкән бит. Шуға, Бөйөк Ватан һуғышында совет һалдаттары Еңеү яуламаһа, бөтә донъяла фашизмды еңеү өсөн көрәшмәһә, бөгөн беҙҙең тормош ниндәй булырын күҙ алдына килтереүе лә ауыр. Уларҙы нисек хөрмәт итмәҫкә, рәхмәтле булмаҫҡа мөмкин! Йәш быуындың Бөйөк Ватан һуғышы геройҙарына илтифат күрһәтмәү сәбәбен мин ғаилә тәрбиәһендә күрәм. Бөйөк Еңеү көнө ниндәй хаҡ биреп яуланыуын киләсәк быуындар онотмаһын өсөн һәр кемде үҙ ғаиләһенең тарихы менән ҡыҙыҡһындырырға кәрәк. Был йәһәттән былтыр бөтә Рәсәй буйлап үткән "Үлемһеҙ полк" акцияһы бик унышлы булғайны. Шундай патриотик рух тәрбиәләүгә булышлыҡ иткән саралар йылына бер тапҡыр ғына түгел, даими рәүештә үтеп торһон ине.

**Камила ҒӘЛИЕВА әңгәмәләште.**

ҠАЙТАУАЗ

# ОҘАҠ ҺАҠЛАНЫР ХӘТИРӘ



**Бер быуат элек булған тарихи ваҡиғаларға бөгөнгө көндән ҡарап, ниндәйҙер баһа биреү, тегеләр хаҡ булған, былар яңылышҡан, тип уйлауы еңел ул. Шуға ла мин тарихи фильмдарҙы бик яратмайым. Дөрөҫөрәге, кино төшөрөүселәрҙең үлсәүҙең бер яғында ятҡан әйберҙе икенсе яғына күсереп һалырға ынтылыштары күңелемә ятып бөтмәй ине. Режиссер Булат Йосоповтоң "Бабич" фильмы был йәһәттән ҡараштарымды үҙгәртте.**

Тарихи фильмдарҙың тағы ла бер сәйер үҙенсәлеге бар: улар тарихты дөрөҫкә, ялғанға телгеләргә ярата. Шартлы рәүештә әйтһәң, мәсәләнән, аҡтарҙы "ағарта", йәки ҡыҙылдарҙы бит ҡыҙартырға мәжбүр итә, йәшелдәрҙе йәшел төҫкә ингәнсе оялтырға маташа һәм бөтөн ерҙә лә көрәндәрҙе эҙләй. Тарих уҡытыусым Миңлеғәле Бисенғәли улы һәр ваҡыт "Тарих - ул бер дөрөҫлөк һыҙығынан ғына бара алмай. Ундағы ваҡиғаларға бер кеше күҙлегенән генә ҡарарға ярамай", тип әйтә торғайны. Ысынлап та, Петр Беренсене Европаға "тәҙрә" уйыуы өсөн ихтирам итмәү мөмкин түгел, әммә Петербург урамдарында аҫылған йөҙәрләгән кеше өсөн ихтирам итеп булмай. Ленинды фәҡирлекте бөтөрөргә ынтылыуы өсөн ихтирам итергә була, әммә фәҡирлек юҡҡа сыҡмай, хәлле крәҫтиәндәр, бай сауҙагәрҙәр класы юғалыу сәбәпле, кемдең нығыраҡ ярлы икәне лә күренмәй, улар барыһы ла бер тигеҙ була. Илде тергеҙеү осоронда күпме кеше һәләк була - былар өсөн беҙ Ленинды маҡтай алмайбыҙ. Уның да, беҙҙең дә Гитлерға ҡарата альтернативалы фекеребеҙ булманы. Хәйер, Гитлерҙан һуң тарихта уның кеүек, хатта унан да ҡанһыҙыраҡ "гитлерҙар" булды, Рәсәй уларҙы күрмәне лә кеүек.

"Бабич" фильмы ла миндә ҡапма-ҡаршы тойғолар уятыр, тип шикләнгәйнем. Булат Йосопов коллегалары менән беҙгә йә шағир Бабичты, йә революционер Бабичты, йә журналист Бабичты ғына күрһәтер, тип уйлағайным. Кинола шул осор тарихының кемдер өсөн уңайлы һәм файҙалы булған өлөшө генә күрһәтелер, тигән шиктәр ҙә булды. Бушҡа хәүефләнгәнмен. Ул осорҙо фильмды төшөрөүселәр боҙмай. Фильмда кинәйәләр ҙә, ярым кинәйәләр ҙә, тураһын бәреп әйтеү ҙә бар, әммә ваҡиғаларҙы яңылыш һүрәтләү юҡ.

Фильмдың бик аҙ ғына сығымдарға төшөрөлөүе лә мөғжизә. Кино оҙаҡ ҡына бара, был дөрөҫ тә, ваҡытты кәметеү өсөн ниндәйҙер шәхес йәки ваҡиғаны "ҡорбанға" килтерергә кәрәк булыр ине. Әхмәтзәки Вәлидиҙе Башҡорт автономияһынан нисек ситтә ҡалдыраһың! Тамашасы был осраҡта ул осорҙо тулы килеш тоя алмаҫ ине. Ваҡиғаларҙың тиҙлегенә өйрәнеүе ауыр, барыһы ла Бабичтың ғүмере кеүек, ҙур тиҙлектә бара.

Бабич вәхшиҙәрсә үлтерелә. Экранда быны күрһәтеү мөмкин булмаҫын ижади коллектив аңлаған, күрәһең. Шуға ла беҙ Шәйехзада менән Әбделхайҙың Йылайырҙа үлтерелеү сәхнәһен күрмәнек. Шулай итеп, Бабич 24 йәшендә һәләк була. Был фильмды барыһы ла ҡарарға тейеш, тип уйлайым.

**Руслан ЙОСОПОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ХӘРӘКӘТТӘ - БӘРӘКӘТ

■ Сальмонелла кеүек хәүефле бактериялар печенье менән крекерҙарҙа ярты йылға тиклем йәшәй, тип белдерә Америка ғалимдары. Тикшереүҙәрҙә бактерияның ағыуланыуға килтергән 5 төрө ҡатнашҡан. Белгестәр крекерҙар өсөн тәғәйенләнгән сырға һәм ер сәтләүеге майына, шулай уҡ печеньеның шоколадтан һәм ванилиндан торған өҫтәмәләренә бактерия ҡушҡан һәм уларҙан сэндвичтар яһаған. Сэндвичтар Цельсий буйынса 25 градус температурала һаҡланған. Ғалимдар ваҡыты-ваҡыты менән уларҙағы бактерияларҙың торошон тикшергән. Әммә ярты йылдан һуң да уларҙың үҙҙәренең йәшәү һәләтен юғалтмауы ғалимдарҙы ла аптыратҡан. Хәҙер улар ҡоро аҙыҡтарҙың бар төрҙәрен дә тикшереп ҡарарға йыйына.

■ Аҙ хәрәкәтләнеү, эмоциональ көсөргәнеш кеше организмының әүҙемлеген түбәнәйтә һәм йөрәк һәм ҡан тамырҙары, яман шеш, ревматизм, матдәләр алышыныуы менән бәйле сирҙәр барлыҡҡа килә. Былар барыһы ла организмдың иртә ҡартайыуына килтерә. Күп ғалимдар кешенең сәләмәтлегенә физик күнекмәләрҙең файҙалы булыуын билдәләй. Физик әүҙемлек метаболизм процестарын көйләп кенә ҡалмай, йөрәк ауырыуҙарын да иҫкәртә. Бынан тыш, әүҙем тормош алып барған кешенең кәйефе лә күтәренке була, ул стрестарға ла бирешмәй.

■ Британия ғалимдары билдәләүенсә, кибеттәрҙә һатылған һыуҙа микроорганизмдар санитар норманан 100 тапҡырға күберәк. Хатта крандан аҡҡан һыуҙа бактериялар әҙерәк икән. Әлбиттә, был бактериялар кеше сәләмәтлеге өсөн артыҡ зыян килтермәй, шулай ҙа иммунитетты түбәнәйтеп, төрлө ауырыуҙар башланыу ихтималлығы бар. Сит илдә крандағы һыу юғары сифатлы, уны ҡайнатмайынса ла эсергә мөмкин. Беҙҙә иһә күптәр хәҙер эсәр һыуҙы һатып ала, тик пластик һауыттар ҙа һыуҙы токсиндар менән "байыта", тип белдерә белгестәр.

■ Америка ғалимдары ҙур һорау менән файҙаланылған ирен буяғыс төрҙәрен тикшереп, ирен буяғыс ҡулланыу һәм ашҡаҙан яман шеше үҫеше араһында туранан-тура бәйләнеш барлығын асыҡлаған. Тикшереүҙә ҡатнашҡан һәр өлгөнөң составында ҡурғаш, хром, кадмий, алюмин кеүек ауыр металдар булған. Әгәр ҙә былдай ирен буяғыс менән гел ҡулланһаң, онкологик сир барлыҡҡа килеү ихтималлығы ла арта. Ирендәрҙең нескә тиреһе хром һәм башҡа зарарлы матдәләрҙе һеңдерә, шул рәүешле организм ағыулана. Ғалимдар хәҙер косметик сараларҙың составын контролдә тотоу өсөн нормаларҙы яңынан ҡарарға кәрәк, тип билдәләй. Евросоюзда бындай нормалар ҡатыраҡ, әммә Рәсәй баҙарына төрлө, шул иҫәптән хәүефле продукттар ҙа инә. Белгестәр раҫлауынса, ирен буяғыс ҡына түгел, шампунь, дезодорант кеүек саралар ҙа сәләмәтлеккә зыян килтерә.

МИН БЕЛГӘН ЯУГИР

# "ПАРОВОЗ" КИЛЕН



-Ҡәйнәм, нишләп һине "паровоз килен" тип әйткәндәр ул? - тип һорайым инде һикһәндең етеһен тултырып килгән ҡәйнәмдән. Был хаҡта әллә нисә тапҡыр ишеткәнем булыуына ҡарамаҫтан, уның ифрат та матур итеп һөйләгән хәтирәләрен тыңларға яратам.

- Ә-й-й, кейәү, баравузын да күрҙем инде, хатта үҙем дә "баравуз" булып киттем заманында. Ундай машинаны ғүмеремдә тәүге мәртәбә күргәндә мең дә туғыҙ йөҙ ҡырҡ дүртенсе йыл, миңә ни бары ун дүрт йәш ине, - тип башлап алып китә ҡәйнәм тормошошоноң күпмелер өлөшөн сағылдырған тарихын. Уның һөйләгәндәрен мөмкин тиклем ныҒыраҡ хәтерләргә тырышып, иғтибар менән тыңлайым, кинофильм ҡараған шикелле, хатта ана шул ваҡиғаларҙа үҙем ҡатнашҡан һымаҡ итеп күҙ алдына килтерергә тырышам.

... - Ҡыҙҙар, подъем! Вагон бушатырға команда булды... Әйҙәгеҙ, йәһәтерәк, мои милые, әйҙәгеҙ, тороғоҙ инде, мои дорогие, доченьки... - алтмыштан уҙған старшина Тихонов нарҙарға түшәлгән, йоҡарып, тетелеп бөткән һалам матрастарҙа кейемле көйөнсә йоҡлап ятҡан ҡыҙҙарҙың әле береһен, әле икенсеһен һаҡ ҡына уятырға тотондо. - Таңға тиклем вагон буш булырға тейеш...

- Әйҙәгеҙ инде, ҡыҙҙар, - тине бригадир Һәҙиә һәм үҙе иң тәүҙә тороп, әхирәттәрен уятыша башланы, - дед Павелды ыҙалатмайыҡ...

- У-у-уф, ҡыҙҙар, - тип кирелде өҫтөнә иҫке оҙон пальто, көпө салбар кейгән Зөлҡәғизә, - шул ике арала тағы йыйыла һалғандар...

- Туңып өлгөргән булһалар ярар ине, - тине ҡыҙҙар араһынан тағы берәү.

- Бынау утыҙ градуслы һыуыҡта фриц түгел, әллә кемең туңыр, - тине Һәҙиә һәм инде уянып ҡалҡына башлаған йәш ҡыҙҙарҙы оҙон бараҡтың иҙән уртаһына "төнгө построение"ға теҙә башланы.

- Раҡия, - тине Һәҙиә үткән өс ай эсендә үҙенең ҡыҙы һымаҡ күреп яратып өлгөргән, арала иң йәше булған Раҡияға әсәләрсә йомшаҡ итеп, - әйҙә, ҡыҙым, тор инде. Кәрәк, аңлайһыңмы, кәрәк...

Буйға ла үҫеп етмәгән Раҡия, хеҙмәт әрмеһенә алынғанда, ысынлап та, сабыйлыҡтан да сығып етмәгән тиерлек ине. "Бала ғына кешене ер аяғы-ер башы ерҙән нишләп кенә алып килгәндәр икән был тайга төпкөлөнә..." тип йәлләне утыҙ йәштәрҙәге Һәҙиә уны тәү күреүҙән үк. Башҡортостандың һәр төрлө райондарынан ошо Молотов (хәҙерге Перьм) өлкәһендәге хеҙмәт әрмеһенә килгән ҡыҙҙар араһында тап ана шул йәтеш кенә кәүҙәле, ҡара ҡашлы, муйыл күҙле Раҡия иң йәше ине... Эшкә ифрат та тырыш, сос, ныҡыш, ҡапылда һис бер нәмәгә зарланып бармаған был башҡорт ҡыҙы башҡалар араһында тиҙ арала ихтирам яулап өлгөрҙө. 1944 йылдың октябрь айында, аяҡтарына сабата, өҫтәренә кем ни етте, шуны кейгән төрлө йәштәге 40 ҡатын-ҡыҙҙы Баймаҡ районынан Магнитогорск ҡала вокзалына тиклем йәйәүләтеп алып килгәйнеләр. Улар араһында Татлыбай ауылынан Һәҙиә, Икенсе Этҡол ауылынан Зөлҡәғизә лә бар ине.

Ә бөгөнгө төндә бушатыласаҡ вагонда ниндәйҙер "затлы әйберҙәр" түгел, ә көн дә тиерлек йыйыла торған... әсир немецтарҙың мәйеттәре ине. Баштараҡ үтә лә шомло булып тойолған был эш һуңға табанымраҡ ҡыҙҙар өсөн ифрат та ғәҙәти кәсепкә әйләнде... Тик уларҙы ни өсөндөр көндөҙ ерләтмәйҙәр. Бөгөнгө һымаҡ, ҡыҙҙарға йоҡларға бирмәй, төнө менән ерләтәләр...

Ғинуар һыуығында немец мәйеттәре, ысынлап та, ҡоро утын һымаҡ, туңып ҡатҡандар, һәм шуға ла уларҙы икешәр кеше тотоп ергә, унан бульдозер ҡаҙыған соҡорға ташлауы бер аҙ еңелгә тура килде... Ағас табанлы "американский" ботинкаларға сылғау урап кейгән аяҡтар "шаҡылдап" тиерлек туңа башлағанда, эштәрен тамамлап, "буржуйка" мейесе менән йылытылған бараҡтарына ҡайтып инделәр. Ярайһы ғына асығып өлгөргән булыуҙарына ҡарамаҫтан, яңынан нарҙарына сумған ҡыҙҙар бер нәмә белмәй йоҡлап китте. Расписание буйынса була торған подъемға тиклем тағы ике сәғәт бар ине әле...

Хеҙмәт әрмеһенең төп эше, әлбиттә, мәйет ташыу түгел, ә таңғы етенән киске етеләргә тиклем, бәғзе ир-аттарҙың да көскә ҡулынан килә торған ифрат ауыр эш - бейек, ҡолас етмәҫлек йыуан ҡарағайҙарҙы бысып йығыу, ботау, вагондарға тейәү ине. Ә бөгөн төндәге эш - көндөҙ бүрәнәләр тейәләсәк вагонды бушатып, әҙерләп ҡуйыу маҡсатында ҡуйылған сираттағы мәсьәләне үтәү генә булды... Ошоноң һымаҡ "вагон бушатыу"ҙар йыш ҡына булып торҙо, сөнки көндөҙгө төп эшкә тотҡарлыҡ булмаһын тиепмелер, төндәрен ташкүмер ҙә бушаттыралар ине. Ана шул осор, ап-аҡ төтөнмө, пармы сығарған, әсе итеп ҡысҡырған ғәйәт ҙур "паровоз" тип аталған машинаны тәү мәртәбә күреүе ине кескәй Раҡияның. Күреү генә лә түгел, ул һөйрәткән әллә тиҫтәләгән вагондарға һәр төрлө йөк тейәп, йә иһә уларҙы бушатып йөрөргә лә яҙғайны.

Көнбайыштан эшсе көсө килә торҙо. Әсир немецтәрҙән тыш, фашист пленынан ҡотолоп сығып та, НКВД тарафынан хыянатсылыҡта ғәйепләнеп, ҡабаттан әсиргә әйләндерелгән үҙебеҙҙең һалдаттар ҙа күпләп килә ине. Уларҙың да



тыл ветераны Раҡия Ғинәт ҡыҙы Арыҫланова.

хәле немецтарҙыҡынан еңелерәк түгел... Улар ҙа конвой аҫтына эшләйҙәр. Урман ҡырҡылып, таҙартылып бөткән урында, ҡом түшәп, уның өҫтөнә немец әсирҙәре "булыжниктар"ҙан ифрат та тигеҙ итеп юл төҙөйҙәр ине...

Еңеү көнөн хеҙмәт әрмеһендә ҡаршыланылар. Июнь айы еткәс, әҙәм көсө етмәҫлек ауыр эштән йонсоған ҡыҙҙарҙы Магнитогорск вокзалына поезд менән алып килеп оҙатты дед Павел. Фашистарҙы еңеү шатлығынан, арыуҙарын да бер аҙ онотҡандай, Ирәндек урманында әле генә бешә башлаған ҡайын еләктәрен ашай-ашай, тау аша төшөп, ҡалған араны тағы ла йәйәүләп ҡайттылар...

- Бына шул инде, кейәү, минең баравуз менән бәйле хикәйәтем. Һеҙ генә, йәғни, ир-аттар ғына әрмелә булаһығыҙ, тип уйламағыҙ. Трудауай - ул түже әрмейә. Эшкә барғанда ла, ҡайтышлай ҙа ыструйға теҙелеп, һайт-дваға баҫып йөрөгән, әрмейский бутҡаны ашап ҡайтҡан кеше ул һинең ҡәйнәң! - ти әбей етди төҫ алып, хатта бер аҙ турая биребирәк.

- Паровоз күреү генә түгел, уның менән берлектә ауыр эштәрҙе лә атҡарғаның хаҡында һөйләнең, ҡәйнәм, рәхмәт. Тик иң башта биргән һорауыма яуап бирмәнең дә баһа... Үҙең нисек "паровоз" булып киттең һуң, ҡәйнәм?

- Әй, кейәү, уныһы ней, үҙе бер мәҙәк инде ул, хәҙер һөйләргә генә ҡалды, - тип дауам итә ҡәйнәм. Уның был хаҡтағы "истурия"һын да яҡшы белеүемә ҡарамаҫтан, ҙур ҡыҙыҡһыныу менән артабан тыңлайым, һуғыштан һуңғы ауыл тормошо күҙ алдына килә.

"Трудауай әрмейәне" үтеп, "буйтым ир етеп", бәлиғ булған йәш, һылыу, зифа буйлы, оҙон толомло Раҡияға күрше Ҡуяндар ауылынан өсөнсө дәрәжә Дан ордены кавалеры, һуғыштан ҡаты яраланып ҡайтҡан егерме бер йәшлек Усман исемле егеттең күҙе төшә. Немец танкыһы снаряды ярсығынан ауыр контузиялы, иңенән әле һалдат гимнастеркаһын да һалмаған, һәр саҡ нәҙек билен һары ҡайыш менән һыҡтырып быуып йөрөгән егет ҡыҙға бергә тормош ҡорорға тәҡдим яһай. 1947 йылдың апрель башында - "ни арба, ни сана, тигәндәй, самай ала ҡар мәлендә" була был бәхетле осор. Ныҡ тотлоғоп, көскә һөйләшеүенә ҡарамаҫтан, үҙенең уй-хистәрен ҡыҙға әйтеп биреүгә өлгәшә Усман. Тотлоҡһа ла, ҡәйнәм үҙе әйтмешләй, "галауный - аяҡ ҡулы бар, ә иң мөһиме - һыу һөлөгөндәй матур һынлы, һылыу" был егеткә тормошҡа сығырға шунда уҡ ризалығын белдерә. Мәҡәләнең исеме булырҙай ваҡиға тап ана шул ваҡыт менән бәйле лә инде. Никах уҡытҡандан һуң, санаға ат егеп, Ҡуяндар ауылына ҡайтып китәләр. Ҡайтып барышлай, буласаҡ сос хужабикә Түбә баҙарынан яндырылмаған эзбиз һатып алып, сана төбөнә һалып ала. Тик ауыл янындағы Саҡмағош тип аталған кескәй йылғаны кисеп сыҡҡанда сана төбөндәге әлеге эзбиз таштарына һыу тейеп, борҡоп ҡайнап китмәһенме! Ауыл халҡын ғәжәпләндереп, нәҡ тә паровоз һымаҡ ап-аҡ пар борҡотоп, йәштәр ауылға килеп инә. Килеп төшкән көндән алып "паровоз килен", тигән ҡушамат һеңә лә ҡала инде ҡәйнәмә.

Ауыл хужалығында арыу-талыу белмәй, ең һыҙғанып эшләйҙәр. Туғыҙ бала үҫтерәләр. Егерме бер ейән-ейәнсәр һәм утыҙ алты бүлә-бүләсәрҙәре бар. Хәләл ефете Усман Дәлхә улы хәҙерге ваҡытта гүр әйәһе. Баймаҡ районының Байым ауылындағы иң һуңғы был һуғыш ветеранының вафатына ла өс йыл тулып үтте. Алтмыш алты йыл бергә ғүмер иткән, һуңғы йылдарҙа ҡаты сирләгән хәләл ефетен йәш балалай ҡәҙерләп, яҡшы итеп ҡараны ҡәйнәм. Тап бына шундай киң күңелле, изгелекле ошо ҡатын-ҡыҙ иң оло хөрмәткә һәм маҡтауға лайыҡ, тип һанайым.

"...Иң беренсе нәүбәттә кейәүҙе яҡшы ҡара, ихтирам ит..." тигән генә өгөт-нәсихәттәр әйтә ул ҡыҙҙарына. Бер ҡасан да үҙенең кейәүҙәренә, килендәренә һүҙ тейҙермәгән, уларға үҙ балалары һымаҡ ҡараған бындай ҡәйнәне "ҡәйнәләр өлгөһө" тип атағы килә. Хатта һәр ғаиләлә лә булғылай торған аңлашылмаусанлыҡ мәлдәрендә лә, һис бер ваҡытта үҙ балаһын яҡлап, кеше балаһына ҡаршы тора торған ғәҙәте юҡ уның. Киреһенсә, кейәүҙәрен ҡурсалап, яҡлашырға әҙер генә торған ҡәйнә ул. Иң ҡәҙерле кешем - әсәйемдең донъя ҡуйғанына инде туғыҙ йыл булып килә. Ул үлгәне бирле миңә бер кемдең дә "балам", тип өндәшкәне юҡ ине. Һуңғы осорҙа, әллә йәлләп, әллә яҡын күреп, ҡәйнәмдең миңә "балам", тип өндәшкеләй башлауы күңелгә шундай рәхәт, үҙем дә алтмышҡа етеп барған кеше булыуыма ҡарамаҫтан...

Ауыр йылдар үтеп, бер ваҡытта ла тормошҡа, кешеләргә ҡарата мөхәббәтен юғалтмаған, һикһәндең етеһен ҡыуып барған, Байым ауылындағы иң оло кеше, һуңғы тыл ветераны хөрмәтле Арыҫланова Раҡия Ғиниәт ҡыҙына Аллаһы Тәғәлә һаулыҡ, бәхетле ғүмер насип итһен ине.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП*

# ҮҘ-ҮҘЕҢДЕ...

## күңел төрмәһенә бикләмә

**Ниһайәт, "Кинәйәне киңәйтеп" рубрикаһына тәүге хат килде! Уның авторы - яратҡан Фәүзиә апайыбыҙ Яхина. Һеҙ уның нескә тойғоло, фәлсәфәүи фекерҙәрен йыш уҡыйһығыҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, рубрикаға башлап апайыбыҙ яуап биререн тоҫмаллап, күптән яуап көтә инек.**



"Ғалим һәм дөйә ҡыуыусы" кинәйәһен уҡығас, күптәр бик кескәй генә саҡтарын иҫенә төшөргәндер, тип уйлайым, - тип башлаған ул хатын. - Яҡты донъя менән танышып, уның һәр һулышын тойоп, һәр яңылыҡҡа һоҡланған саҡтағы уй-хистәр онотола буламы ни инде! Кескәй саҡта беҙ шул хәтлем сафбыҙ. Донъяны ла беҙ ана шул сафлыҡ күҙлегенән ҡабул итәбеҙ. Үҫә килә, донъяға ҡараш үҙгәрә. Ололар үҙгәртә фекеребеҙҙе. Ә инде мәктәптә, башҡа уҡыу йорттарында белем туплағас, беҙ бөтәндәр кеүек фекер йөртә башлайбыҙ, ҡатып ҡалған ҡағиҙәләргә буйһонабыҙ. Әммә сабый саҡтағы уйҙар татлы хәтирәләр булып ҡалып сығып, хисләндерә тора.

7-се класта физика, химия фәндәрен өйрәнә башлаған мәл хәтерҙә. Уҡытыусы һөйләгәндәрҙән төрлө металдарҙың, һыуҙың, матдәләрҙең ваҡ ҡына күҙгә күренмәгән өлөшсәләрҙән тороуын ишетеп, бик аптырап ҡалдым. Был турала бит мәктәпкә уҡырға төшмәҫ элек, алты йәшлек сағымда уҡ уйлана инем. Һыу бик ваҡ өлөшсәләрҙән торалыр, тик күҙгә күренмәйҙер, тигән уй ҡулымды йыуып торғанда килгәйне. Әле лә иҫемдә: шул саҡ һыуҙы бик оҙаҡ бармаҡ остарым менән һәрмәнем. Күреп булмаһа ла, тойоп булалыр, тип уйланым. Тоя алманым, әммә ваҡ ҡына күҙгә күренмәгән өлөштәр барҙыр, тигән уй хәтеремә уйылды. Бәхтиһән, һыу Н2О өлөшсәләренән тора, тип, ғалимдар иҫбат иткән икән дә!

Хатта тәү тапҡыр үҙемдең сағылышымды көҙгөлә күреүем дә иҫемдә. Ауыл өйҙәрендә элек ҙур көҙгөләр булманы, булғандарын да бейеккә элә инеләр. Бәләкәй буйлы ҡыҙыҡайҙың ҡайҙан ғына буйы етһен инде! Ҙур көҙгөнө тәү тапҡыр ҡалаға килгәс, мәктәптәге йыр бүлмәһендә күрҙем. Уның бейеклеге түбәнән иҙәнгә тиклем ине. Эй, көҙгөләге ҡыҙыҡай менән ҡыуышып уйнаным! Хәйлә ҡороп, ул "ҡыҙыҡай"ҙы тоттом тигәндә генә уның үҙем икәнен аңланым. "Бына мин ниндәй икәнмен!" тип иғтибар менән үҙемде күҙәтеүем шул саҡ ғүмергә иҫемдә тороп ҡалды. Шул кескәй сағым: "Тот мине!" - тип йүгереп килеп сығыр ҙа, йүгереп ҡасыр кеүек. Тик тота алмайбыҙ шул бала сағыбыҙҙы...

Йәшәй-йәшәй күпте беләбеҙ. Ул белем йөгө яурындарҙы баҫа.

Бер мәл яҙыусы һөнәрен һайлағандар тураһында уҡығайным. Бик күп уҡыған яҙыусылар тик үҙенсә генә балҡытып яҙыу һәләтен юғалта икән. Бына шундай ҡыҙыҡлы фекергә килгәндәр был мәсьәләне өйрәнеүселәр. "Ғалим һәм дөйә ҡыуыусы" кинәйәһен уҡып сыҡҡас, бала сағымды ябай таштарға оҡшаттым. Ҡояштың нурҙары иң тәүҙә балаларға төшәләр... Бушҡамы ни, бала саҡта күп һоҡланабыҙ, йылмаябыҙ..."

**Шулай итеп, яңы риүәйәт...**

Бер көн батша үҙенең ярандарын һынап ҡарарға булған. "Кем дә кем мин күрһәткән йоҙаҡты аса ала, шул кеше батшалыҡта юғары вазифа биләйәсәк", - тигән ул. Батшаның ярандары үҙ хакимын уратып алған. Күпте күргән, аҡыллы, тәжрибәле вәзирҙәр ишектәге бик ҙур йоҙаҡты күреп, шаҡ ҡатҡан. Бындай ҙур йоҙаҡты улар тәү тапҡыр күргән. "Йә, кемдең батырсылығы етә?" - тип һораған батша. Берәүҙәре: "Мин үҙ вазифам менән былай ҙа ҡәнәғәт", - тип уйлап, шундуҡ баш тартҡан. Икенселәре, ҡыҙыҡһынып, йоҙаҡты төрлө яҡлап тикшерергә тотонған. Оҙаҡ ҡына уйлағандан һуң улар "Юҡ, был йоҙаҡты асып булмай", тигән ҡарарға килгән. "Шундай аҡыллы вәзирҙәр ҙә баш тартҡас, беҙҙең бөтөнләй хәлдән килмәй", - тип, өсөнсөләре лә ҡыйыуһыҙ ғына ситкә киткән. Тик бер вәзир генә ҡыйыу рәүештә йоҙаҡ янына килгән. Ул тәүҙә йоҙаҡты иғтибар менән тикшереп сыҡҡан, шунан ҡапыл ғына бар көсөнә йоҙаҡты аҫҡа тартҡан. О, мөғжизә, йоҙаҡ асылған! Ул бикләнмәгән булған! Бары тик уның ҙурлығынан ҡурҡмайынса, ҡыйыу ҡарарға килеп, йоҙаҡты асырға тырышлыҡ һалырға ғына кәрәк булған.

Батша йоҙаҡты асырға батырсылыҡ иткән вәзиргә былай тигән: "Мин һинә вазифалы урын бирәм, сөнки һин күргәнеңә һәм ишеткәнеңә генә ышанмайһың, үҙ көсөңә лә таянаһың һәм ҡыйыу аҙым яһай беләһең".

Йоҙаҡ тигәндән, Мирзакәрим Норбековтың Өфөгә килгән бер уҡыусыһы һөйләгән кинәйә хәтергә уйылып ҡалған. Бер кешене (Аллам һаҡлаһын!) 25 йылға төрмәгә ултыртҡандар. Ул тотҡондағы һәр бер көнөн һанап, үҙе ултырған бер кешелек камераның стенаһына сыйҙыслап, тамға һалып барған. Көнөнә өс тапҡыр аҙыҡ алып килеүсе төрмә һаҡсыһынан башҡа бер кемде лә күрмәгән ул. Шулай көн артынан көн үткән. Бер йыл, ике йыл, ун йыл, ун биш, егерме йыл... Егерме биш йылын тултырып, һуңғы көнө еткәс, тотҡон стенаға һуңғы тамғаһын һалған һәм азатлыҡҡа сығарыуҙарын көтә башлаған. Төш еткән. Көн кискә ауыша башлағас, ҡарһаланып, ишекте туҡмай башлаған был. Оҙон коридорҙа йәйләп ҡына атлап килгән төрмә һаҡсыһының аяҡ тауыштары ишетелгән. Ул ишекте асҡан һәм былай тигән: "Сыҡ, нимә ҡарап ултыраһың? Егерме биш йыл буйы ишек асыҡ булды, ә һин уны асырға маташып та ҡараманың".

Ике кинәйәлә лә һүҙ йоҙаҡ тураһында бара: беренсе осраҡта вазифа буйынса күтәрелеү өсөн ҡурҡыныс йоҙаҡты асырға кәрәк булһа, икенсеһендә - асыҡ ишектән азатлыҡҡа сығыу өсөн кәрәк ул ышаныслы аҙым. Ә нимә ул азатлыҡ? Вазифа буйынса үрләү азатлыҡмы, әллә ниндәй генә вазифала булһаң да, үҙ азатлығыңды һаҡлай белеүме? Ғөмүмән, азатлыҡты бикләп буламы? Булһа, кемдәр бикләгән уны? Уйлап ҡарайыҡ. Асылда, бала донъяға азат булып тыуа. Әлбиттә, сағыштырмаса азат булып. Беренсенән, күңеле азат уның. Үҫә килә, донъяға ҡарашы үҙгәрә килә, аңы яңы мәғлүмәттәр, яңы идеялар менән тулылана. Ярай ҙа һуң изгелек менән генә тулышһа ул бала күңеле! Үҙенән алда йәшәгәндәрҙең тормош тәжрибәһенә таянып төҙөлгән бөтмәҫ-төкәнмәҫ ҡағиҙәләр, төрлө йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр, догмалар кеше аңын йәйләп сикләй, уны ҡалыпҡа бикләй. Был да бит үҙенә күрә төрмә. Азатлыҡҡа ынтылыусы күңелде бикгә тотҡан төрмә. Аң берәй идеяны йөҙ проценты менән дөрөҫ тип ҡабул итһә, ул аңдың әйәһе фанатҡа, зомбиға әүерелә. Улай булғас, йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе инҡар итергәме, тиер берәү. Ә уларҙы ниңә инҡар итергә? Бары йолаларҙың изгелек яҡлыһы менән яуызлыҡ яҡлыһын айыра белеү кәрәктер. Изгелек тик әкиәттәрҙә генә еңә, тормошта бөтөнләй улай түгел, тип әйтер, бәлки, берәү. Һорауҙар, һорауҙар... Мәңгелек һорауҙарға яуап тапмайынса, күңел төрмәһенән азатлыҡҡа сығып булмай. Иң үкенеслеһе шул: был төрмәгә кеше үҙенүҙе бикләй. Ишек асыҡ, сығырға ғына кәрәк - әле ирекле уй-фекерҙәребеҙгә бер кем дә хужа түгел. Дөрөҫөрәге, беҙ әйтелмәгән фекергә генә хужа, әйтелгәне - ҡол...

**Исмәғәзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

### Йыһан ҡанундары

Үҙҙәренең риүәйәттәрендә рухи уҡытыусылар орлоҡто нисек ергә һалырға һәм нисек һыу ҡойорға кәрәклеге тураһында һөйләй. Әлбиттә, улар миҙгелдәр алмашыныуы, орлоҡ сәсмәһәң - уңыш, тир түкмәһәң, балыҡ та тота алмауың тураһында һөйләй, сөнки ул ваҡыттарҙа кешеләр менән ауыл хужалығы һәм балыҡ тотоу буйынса улар аңлаған терминдар ҡулланып һөйләшеү еңел була. Әммә был тарихтарҙың төбөндә тәрән мәғәнә ята. Улар барыһы ла тәбиғәт ҡанундары тураһында бәйән итә. Донъяла бары тик улар ғына бар һәм көтөүсе өсөн дә, программист өсөн дә ғәҙел.

### Сәсеүсе ҡануны

"Уңыш алыу өсөн, тәүҙә эшләргә кәрәк" - башта ерҙе йомшартаһың, ултыртылған орлоҡҡа һыу һибәһең (физакәр хеҙмәт), һуңынан бер ни тиклем көтәһең (түҙемлек), һуңынан ғына уңыш йыйырға мөмкин. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, физакәр хеҙмәт+түҙемлек=һөҙөмтә.

Кешеләр бик йыш ошо ҡанунды аңламай. "Бөгөн орлоҡ сәсһәм, иртәгә нимә булыр?" - тип һорай улар. Бында яуап бирәү генә: "Еүеш орлоҡ". Сәсеүсе ҡануны беҙгә шуны аңлата: "Орлоҡто бөгөн ултыртһаң, уңышты һуңынан, оҙаҡ ваҡыт үткәс алырһың!" Кешегә ризыҡты үҙ ҡулдары менән сәсеп үҫтерергә кәрәк булған заманда, моғайын, был концепция яҡшыраҡ аңлашылғандыр. Бөгөн тиҙ туҡланыу дәүере.

Кредит карточкалары һәм почта каталогтары беҙҙе бөгөн һатып алып, күпмелер ваҡыт процент түләмәҫкә һәм һуңынан төп башына ултырып ҡалырға өйрәтә. Былар барыһы ла - тәбиғәт ҡанундарын алдарға, уны үҙенсә борорға тырышыу. "Бөгөн эшлә - иртәгә һатып ал" принцибы "бөгөн һатып ал - иртәгә түлә" принцибына ҡарағанда күпкә дөрөҫөрәк.

Нимәгәләр шәхси баҡсаңда өйрәнергә мөмкин. 10 орлоҡ сәсеп, һирәк осраҡта ғына 10 үҫенте алырға мөмкин. Уларҙың бер нисәһе шытмай, бер нисәһен ел осора, ҡайһы берҙәрен бөжәк, ҡош-ҡорт ашай.

Бер нисә тоғро дуҫ табыр өсөн тәүҙә бик күп танышлыҡ булдырырға кәрәк. Идеаль хеҙмәткәр табыу өсөн йөҙләгән кандидат менән һөйләшеү зарур. Әгәр магазинға йөҙҙәрсә кеше йөрөмәһә, даими һатып алыусылар ҙа булмай һ.б. Бик күп идеяларҙы, хеҙмәткәрҙәрҙе, хатта дуҫтарҙы ҡоштар "суҡыясаҡ". Бының менән көрәшеүҙең мәғәнәһе юҡ, быға әҙер булырға ғына кәрәк.

### Сәбәптәр һәм эҙемтәләр

Әгәр тормошта торғонлоҡ башланһа, уға нимә һалғаныңды ҡарарға кәрәк. "Беренсе әтәстәр ҡысҡырыу менән торам, даими рәүештә спорт менән шөғөлләнәм, ныҡышмал уҡыйым, тирә-яҡтағылар менән изге мөнәсәбәттәмен, эшемдә бар көсөмдө һалып эшләйем... һәм тормошомда бер яҡшы нәмә юҡ", - тигәндә йыш ишетергә тура килә. Тормошобоҙ - ҡатмарлы энергетик система. Әгәр унда бер ниндәй яҡшы нәмә булмай икән, тимәк, үҙебеҙ ғәйепле. Ә инде тормошҡа индергән өлөшөң ундағы хәл-ваҡиғаларҙы билдәләй икәнен аңлау менән ҡорбан булыуҙан туҡтайһың.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**

**(Дауамы бар).**



## 8 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Нормандия - Неман". Худ. фильм (12+).
08.20 "Небесный тихоход". Худ. фильм.
10.15 "Моя линия фронта" (16+).
11.15, 12.15 "Битва за Севастополь". Худ. фильм (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 "А зори здесь тихие..." Худ. фильм (12+).
17.15 "По законам военного времени". 9-10-я серии. Военно-исторический сериал (12+).
19.15 Чемпионат мира по хоккею-2017. Сборная России - сборная Германии. Прямой эфир из Германии.
21.25 "Время".
21.45 "По законам военного времени". 11-12-я серии (12+).
23.50 "Баллада о солдате". Драма.
01.35 "В двух шагах от "рая". Худ. фильм (12+).
03.10 "Мерседес" уходит от погони". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

04.25 "Операция "Тайфун". Задания особой важности". Сериал (12+).
07.40 "Полоса отчуждения". 8 серий. Мелодраматический сериал (12+).
11.00 "Вести".
11.20 "Полоса отчуждения". Продолжение сериала (12+).
15.25 "Карина красная". 8 серий. Мелодраматический сериал (16+).
20.00 "Вести".
21.00 "Карина красная". Продолжение сериала (12+).
23.55 "День Победы". Фильм Саиды Медведевой (12+).
00.55 "Горячий снег". Военная драма (6+).
02.55 "Ордена Великой Победы". Док. фильм.

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 Телефильм "Мальчишки".**
**08.30 Док. фильм "Женское лицо Победы" (12+).**
**09.30 "Гетеры майора Соколова". Сериал (16+).**
**10.30 Док. фильм "Солдаты наши меньшие" (12+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 Т.Гиниатуллин. "Между небом и землей".**
**13.30 "Большая Победа в маленьких сердцах". Концерт.**
**15.00 "Три письма" (12+).**
**15.30 "Истории в табличках" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15, 03.30 "Командир счастливой "Щуки". Худ. фильм (6+).**
**18.15 Телефильм "Медаль" (6+).**
**19.00 "Бай бакса" (12+).**
**19.30 Концерт Азата Бикчурина с Национальным симфоническим оркестром РБ (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Щит и меч". Худ. фильм.**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 А.Мирзагитов. "Матери ждут сыновей" (12+).**

## 9 МАЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00, 11.00, 11.50 Новости.
05.10, 11.10 "День Победы". Праздничный канал.
09.25 "Офицеры". Худ. фильм.
12.00 Москва. Красная площадь. Парад, посвященный Дню Победы.
13.00, 16.30 Новости (с субтитрами).
13.30 Концерт, посвященный юбилею фильма "Офицеры" в Кремлевском дворце.
15.00 "В бой идут одни "старики". Военная драма.
17.00 "Бессмертный полк". Прямой эфир.
19.35, 21.30 "Будем жить!" Торжественный концерт ко Дню Победы.
21.00 "Время".
22.25 "28 панфиловцев". Военная драма (12+).
00.05 "Живые и мертвые". Военная драма.
03.10 "Женя, Женечка и "Катюша". Худ. фильм.

### РОССИЯ 1

03.45 "Последний рубеж". Худ. фильм (12+).
05.40 "Сталинград". Худ. фильм (16+).
07.50 "День Победы". Праздничный канал.
12.00 Москва. Красная площадь. Военный парад, посвященный 72-й годовщине победы в Великой Отечественной войне 1941-1945 гг.
13.00 "День Победы". Праздничный канал. Продолжение.
14.00 Праздничный концерт, посвященный Дню Победы.
16.00 "Вести".
17.00 "Бессмертный полк". Шествие в честь 72-й годовщины Великой Победы.
20.00 "Вести".
20.40 "Вести-Башкортостан".
20.55 "Истребители. Последний бой". 12 серий. Военно-драматический сериал (16+).
24.00 Праздничный салют, посвященный Дню Победы.
00.15 "Истребители. Последний бой". Продолжение сериала (16+).
04.05 "Иду на таран" (12+).

### БСТ

**07.00 "С Днем Победы!" (12+).**
**07.45, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 Телефильм "Радость нашего дома".**
**08.30 Док. фильм "Женское лицо Победы" (12+).**
**09.30 "Гетеры майора Соколова". Сериал (16+).**
**10.30 "С Днем Победы!" Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященный Великой Победе.**
**11.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**12.00, 22.00 "Бессмертный полк".**
**13.00 Н.Асанбаев. "Семь девушек"**
**14.45 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Истории в табличках" (6+).**
**16.15 "Яблоневый цвет. Мечта Хасана Ахтямова".**
**17.00 Док. фильм "Земля и небо" (12+).**
**18.00, 19.00 Ретро-концерт (12+).**
**18.55 Светлой Памяти павших в борьбе против фашизма. Минута молчания.**
**23.00 "Щит и меч". Худ. фильм. (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 З.Зайнуллин. "Женщины 41-го" (12+).**

## 10 МАЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.45 "Модный приговор".
12.00, 03.00 Новости.
12.15, 02.45, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
13.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.10 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Давай поженимся!" (16+).
20.00 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Власик. Тень Сталина". 1-я и 2-я серии. Биографический сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Мумия возвращается". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Склифосовский". Драматический сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Парик". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Между любовью и ненавистью". Часть 1. Мелодраматический сериал (12+).
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
02.00 "Шерлок Холмс". "Бейкер Стрит 211 Б". Детективный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Гетеры майора Соколова". Сериал (12+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "У дачи" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.15 "Дорожный патруль" (12+).**
**17.45 "Весна 45-го года…" (12+).**
**19.15 "Үткән ғүмер" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Битва за Москву: "Агрессия". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бәхетнамә" (12+).**

## 11 МАЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.25 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Давай поженимся!" (16+).
18.00 "Первая студия". Прямой информационный канал (16+).
20.00 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Власик. Тень Сталина". 3-я и 4-я серии. Биографический сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.15 "Мумия: гробница императора драконов". Фэнтези (16+).
02.25, 03.05 "Большой год". Комедия (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Склифосовский". Драматический сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Добрый человек". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Между любовью и ненавистью". Часть 2-я. Мелодраматический сериал (12+).
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
02.00 "Шерлок Холмс". "Камень, ножницы, бумага". Детективный сериал (12+).
04.00 "Дар". Драматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Гетеры майора Соколова". Сериал (16+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан"**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Современник" (6+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Малый бизнес" (12+).**
**15.15 "ДОСААФ: испытано на себе"**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Сыйырсык".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Клио" (12+).**
**19.15 "Башҡорттар" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Битва за Москву: "Тайфун". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бәхетнамә" (12+).**

## 12 МАЯ
## ПЗТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.10, 05.15 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 Мужское/Женское" (16+).
17.10 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановвым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Власик. Тень Сталина". 5-я и 6-я серии. Биографический сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.20 "Фарго". "Городские пижоны" (18+).
01.25 "Поймай толстуху, если сможешь". Худ. фильм (16+).
03.30 "Руководство для женатых". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Склифосовский". Драматический сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Бодяга". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести ПФО".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Между любовью и ненавистью". Часть 3-я. Мелодраматический сериал (12+).
23.30 "Красавец и чудовище". Мелодрама (12+).
01.45 "Шерлок Холмс". Сериал (12+).
03.45 "Дар". Драматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Док. фильм "Москва - Берлин" (12+).**
**11.00 "Краски войны" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 Софокл. "Царь Эдип" (12+).**
**13.15 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.00 "Хазина" (6+).**
**14.30, 18.30, 23.00 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Бала-сага" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**15.45 "Перекличка" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**17.15, 20.45 "Полезные новости" (12+).**
**17.45 "Учим башкирский язык".**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Алтын тирмә".**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**21.00 "Аль-фатиха" (6+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Песня года" (12+).**
**23.30 "Майор "Вихрь". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 13 МАЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Один шанс из тысячи". Худ. фильм (12+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Федор Бондарчук. Счастлив. Здесь и сейчас" (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.15 "На 10 лет моложе" (16+).
14.10 Концерт Кристины Орбакайте.
15.45 "Вокруг смеха".
17.20 "Угадай мелодию" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым".
19.15 Чемпиона мира по хоккею-2017. Сборная России - сборная Словакии. Прямой эфир из Германии.
21.25 "Время".
21.45 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.20 "Руби Спаркс". Худ. фильм (16+).
01.20 "Чужой". Худ. фильм (16+).
03.30 "Офисное пространство". Худ. фильм (16+).
05.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.15 "В бегах". Сериал (12+).
07.10 "Живые истории".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Фото на недобрую память". Мелодрама (12+).
16.20 "Золото нации".
18.00 "Субботний вечер".
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Цвет спелой вишни". Мелодрама (12+).
00.50 "Звезды светят всем". Драма (12+).
03.00 "Марш Турецкого-2". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!"**
**07.45, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Невероятный Блинки Билл".**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "У дачи" (6+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "Клио" (6+).**
**12.00 " Мистический Башкортостан"**
**13.00 "Бай" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2017" (12+).**
**17.00 Юбилейный вечер Гюлли Мубаряковой (12+).**
**19.00 "Пером и оружием". Ибрагим Абдуллин.**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Колесо времени" (12+).**
**21.00 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**21.15 "Стройки Уфы. Народный контроль" (12+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30, 02.15 Новости надели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2017" (12+).**
**23.45 "Особо важное задание". Худ. фильм (12+).**
**02.45 И.Юзеев. "Соловьи прилетели" (12+).**

## 14 МАЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Судьба человека". Худ. фильм.
08.10 "Смешарики. ПИН-код".
08.25 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки" с Дм.Крыловым (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Идеальный ремонт".
13.20 "Теория заговора" (16+).
14.25 "Страна советов. Забытые вожди" (16+).
16.30 "Шансон года". Часть 1-я.
18.20 "Аффтар жжот" (16+).
19.30 "Лучше всех!" Шоу талантов.
21.00 "Воскресное "Время".
22.20 "Клуб веселых и находчивых" (16+).
00.45 "Царь Скорпионов". Боевик (12+).
02.20 "Королевский блеск". Худ. фильм (16+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00 "В бегах". Сериал (12+).
07.00 Мультутро "Маша и Медведь".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
13.10 "Семейный альбом" (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Шепот". Мелодрама (16+).
16.15 "Смягчающие обстоятельства". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
20.00 Вести недели.
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
24.00 "Дежурный по стране" Михаил Жванецкий".
00.55 "Забытый подвиг, известный всем" (12+).
01.50 "Ларец Марии Медичи". Детектив (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!"**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Колобанга" (6+).**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай бакса" (12+).**
**10.00 "Физра".**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл".**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.15 "Фанташ" (6+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (12+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Конь мой верный, конь мой вороной" (6+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 "Весна 45-го года…" (12+).**
**17.45 "Бизнес-обзор" (12+).**
**18.00 "Дознание" (16+).**
**18.30 "Байыҡ-2017" (12+).**
**19.30 Футбол. РФПЛ ФК "Уфа" (Уфа - ФК "Анжи" (Махачкала).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Во власти тигра". Худ. фильм (16+).**
**02.45 "Полезные новости" (12+).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# СОВЕТТАР СОЮЗЫ ГЕРОЙҘАРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**17-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Тырма. Ямантау. Термос. Ирәмәл. Терпе. Уңай. Рәсимә. Ҡойо. Өшөрә. Ошо. Ҡарт. Рухи. Ли. Зәрҡүм. Шишмә. Лиана. Кама. Аҡыҡ. Инйәр. Негр. Дөйә.

**Вертикаль буйынса:** Төҙөлөш. Терегөмөш. Елмәрҙәк. Яуым. Ашхана. Олуғ. Ышаныс. Илаһи. Ҡор. Нард. Тойғо. Атай. Алама. Әсәй. Импровизатор. Ҡарға. Мери. Ләмәҙтамаҡ.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Май (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 8 (12) дүшәмбе | 3:55 | 5:25 | 13:30 | 19:31 | 21:01 | 22:31 |
| 9 (13) шишәмбе | 3:53 | 5:23 | 13:30 | 19:33 | 21:03 | 22:33 |
| 10 (14) шаршамбы | 3:51 | 5:21 | 13:30 | 19:35 | 21:05 | 22:35 |
| 11 (15) кесе йома | 3:49 | 5:19 | 13:30 | 19:37 | 21:07 | 22:37 |
| 12 (16) йома | 3:47 | 5:17 | 13:30 | 19:38 | 21:08 | 22:38 |
| 13 (17) шәмбе | 3:45 | 5:15 | 13:30 | 19:40 | 21:10 | 22:40 |
| 14 (18) йәкшәмбе | 3:43 | 5:13 | 13:30 | 19:42 | 21:12 | 22:42 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

# ҠОТЛАЙБЫҘ!



Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге 1-се һанлы республика башҡорт балалар йорто директоры **Фәнисә Малик ҡыҙы Бәҙретдинованы** күркәм юбилейы менән ҡотлайбыҙ!

Тормош һынауҙарына бирешмәҫкә, ауырлыҡтар алдында баш эймәҫкә, йәшәүҙән йәм табып, изгелектәрҙең игелеген күреп йәшәргә өйрәтеүсе остазыбыҙ Һеҙ беҙҙең, хөрмәтле Фәнисә Малик ҡыҙы. Һеҙҙең - гүзәл башҡорт ҡыҙының булмышы, йәшәү рәүеше - беҙҙең өсөн матур өлгө. Һәр беребеҙҙе үҙ яҡынығыҙҙай, балағыҙҙай күреп яратып, хөрмәтләп, рух ныҡлығы менән йәшәргә, ижад итергә, эшләргә өйрәттегеҙ һәм өйрәтәһегеҙ. Һеҙҙең менән хеҙмәтебеҙ емешле, көнөбөҙ уңышлы, йөҙөбөҙ нурлы.

**Иң ихлас теләктәр менән,**
**Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге 1-се һанлы республика башҡорт балалар йорто коллективы.**

ИҒТИБАР!

# МАТУР ХӘБӘРЕБЕҘ БАР!



**Йәмәғәт! Ораны -"Аҡтайлаҡ!", тамғаһы - һәнәк, ағасы - аҡ өйәнке, ҡошо иһә әтәлге булған ниндәй ырыуҙы беләһегеҙ? Ошо билдәләргә тағы "Батыры - Ҡараһаҡал, ғалимы - Әхмәтзәки Вәлиди" тигәнде лә өҫтәһәк? Әлбиттә, атыбыҙ ҙа, затыбыҙ ҙа, ырыуыбыҙ ҙа - Юрматы беҙҙең!**

Ишеткәнһегеҙҙер, 20 майҙа Ишембай районында юрматылар йыйын ойоштора, Торатау буйына аҡ тирмәләр ҡороп, ырыуҙаштарҙы ла, башҡа ырыу вәкилдәрен дә, сит-ят тарафтарҙан килгән ҡунаҡтарҙы ла бер ҡорға йыя.

Ишембай, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ, Федоровка, Мәләүез, Ауырғазы, Ғафури, Баҡалы райондарында, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Салауат, Мәләүез ҡалаларында, Ырымбур өлкәһендә, Татарстанда, Венгрияла йәшәүсе ырыуҙаштар йыйынының тәүге өлөшө Ишембай ҡалаһының Мәҙәниәт йортонда (Ленин урамы, 23) иртәнге сәғәт 9-ҙа башлана. Унда ошо көндәрҙә райондарҙа булып үткән йыйындарҙа һайланған делегаттар ҡатнашасаҡ.

Ә 14:00 сәғәттә ырыуҙаштарҙы һәм ҡунаҡтарҙы изге Торатау буйында көтәбеҙ. Торатау буйындағы байрам программаһына 1812 йылғы Ватан һуғышы геройы Ҡаһым Мырҙашев исеменә - милли көрәш, Юрматы ере батыры, 1735-1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы етәксеһе, Ҡырым ханлығында һәм Осман империяһында башҡорт илселеге ағзаһы булған Килмәк абыҙ Нөрөшев кубогына традицион уҡтан атыу турниры индерелгән (бәйгелә ҡатнашыу өсөн заявкалар ҡабул итеү бара).

Байрамыбыҙҙы юғарыла барланған райондарҙың тирмәләре, шәжәрәләр, халыҡ һөнәрмәндәре эштәре һәм милли ризыҡтар күргәҙмәләре биҙәйәсәк. Һәм, әлбиттә, танылған сәнғәт әһелдәре һәм райондарҙың үҙешмәкәр коллективтары тарафынан ойошторолған ҙур концерт программаһы ла әҙерләнә.

Байрамыбыҙға башҡа ырыу башҡорттары ла рәхим итһен, ә юрматыларға иһә үҙ байрамына килмәй ҡалыу оят булыр! Яҡты уйҙар, матур теләктәр, асыҡ һәм ихлас күңел менән килегеҙ изге тауыбыҙ эргәһендәге йыйынға, тип, бар тарафҡа саҡырыу ебәрәбеҙ! Йыйыныбыҙҙың ҡото йоҡһон!

**ОЙОШТОРОУ КОМИТЕТЫ.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**6 май "Ике төш"** (М. Багаев), драма 12+

**7 май "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+

**10 май "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия 12+

**11 май "Ай тотолған төндә"** (М. Кәрим) 12+

**12 май "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?"** (Ф. Бүләков), трагикомедия. Башлана 15.00, 17.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**12 апрель "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**11 май "Люксембургка барып ҡайтҡансы"** (М. Ҡунафин), фантасмагория 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**6 май "Девочка и пришелец"** (Б. Хан). Башлана 12.00, 14.00 0+

**7 май "Малыш и Карлсон"** (А. Линдгрен). Башлана 12.00, 14.00 0+

**8 май "Кот в сапогах"** (Н. Шувалов). Башлана 12.00, 14.00 0+

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# "ТАМЫР" - УЛ...

## талант, аҡыл, милләт, ырыҫ, рух

**"Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы эшмәкәрлеген нindәй һүҙҙәр менән баһалаһаң да аҙ булыр төҫлө. Ҡапыл шундай фекер башҡа килә: "Тамыр" һүҙен төҙөгән хәрефтәр үҙе үк улар эшмәкәрлегенә бер ҡылыҡһырлама була ала, имеш: талант, аҡыл, милләт, ырыҫ, рух. Ысынлап та, 25 йыл дауамында "Тамыр" талантлы, аҡыллы, милләттең киләсәген тәшкил иткән ырыҫлы, рухлы балалар тәрбиәләүсе ойошмаға әйләнде. "Башҡортостан" дәүләт концерт залында үткән "Бейеклектәр яулайбыҙ" исемле байрам концерты тамашасыны ошо хәҡиҡәткә тағы бер тапҡыр инандырҙы.**



Сирек быуат эсендә "Тамыр" телеканалы яулаған бейеклектәр, уңыштар, наградалар һанап бөткөһөҙ. Был коллектив республикалағы тәүге "Алтын Орфей" хужаһы, "Тефи-регион" конкурсында әллә күпме еңеүҙәр яулаған, "Включайся" Халыҡ-ара балалар телевидениеһы фестиваленең төрлө номинациялар призеры. Бөгөн беҙ Башҡортостан юлдаш телеканалын балалар өсөн башҡортса тапшырыуҙар, әкиәттәр, конкурстар, фильмдарһыҙ күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ. "Тамыр"ҙа күрһәтелгән йәнһүрәттәр, тапшырыуҙар геройҙары башҡорт теленда һөйләшеп кенә ҡалмай, ә кескәй тамашасыларында милли рух, зауыҡ, башҡорт халҡының йолаларына, тарихына ҡарата ихтирам да тәрбиәләй. Был тәрбиә емештәрен беҙ йыйл да үткәрелгән концерт тамашаһында ла күҙәтәбеҙ, сөнки унда сәхнәлә сығыш яһаусы балалар ҙа, уларҙы тамаша ҡылған кескәйҙәр ҙә башҡортса һөйләшә, башҡорт көйҙәренә бейей, шиғырҙар һөйләй. Тимәк, "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы беҙҙең сабыйҙарға бәләкәйҙән үҙ моңон һөйөргә, үҙ көйөн көйләп, туған халҡы һәм теленә битараф булмаҫҡа өйрәтә.

Эйе, балаларын халҡыбыҙҙың күркәм йолалары, рухиәте нигеҙендә тәрбиәләүҙе төп бурысы итеп күргән ата-әсәләр "Тамыр" телеканалының даими дуҫтарына әйләнгән. Ундай аңлы, алдынғы фекерле ата-әсәләребеҙ байтаҡ - ике көн үткәрелгән концертта "Башҡортостан" дәүләт концерт залы шығырым тулы булды. Кескәй тамашасыларҙың шатлыҡтан балҡыған йөҙҙәрен ситтән генә күҙәтеп тороп та, уларҙың ниндәй оло тәьҫораттар алып ҡайтасағын күҙ алдына килтерергә була ине. Баш ҡала сабыйҙарына ғына түгел, бөтә республика балаларына бәхетле хәтирәләр бүләк иткән, уларҙың рухын үҫтергән "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалына киләсәктә ижади уңыштар, рәхмәтле тамашасылар, яңы еңеүҙәр юлдаш булһын!

# ШАЯРТА БЕЛӘЛӘР БИТ!

**Дүртенсе йыл рәттән республиканың мәктәп уҡыусылары Башҡорт Юниор КВН лигаһының миҙгел уйынында ҡатнашып, тамашасыларын иң шәп көләмәстәре менән ҡыуандыра. Уйындың сираттағы финалы ошо көндәрҙә баш ҡаланың Конгресс-холл бинаһында үтте.**



Быйыл лиганың дүртенсе миҙгеле финал уйынында биш команда еңеүсе исеме өсөн көрәште. Учалы районынан "Тик ҡыҙҙар", Сибай ҡалаһынан "Кендек", Дыуан районынан "Төньяҡ амурҙары", Өфө ҡалаһынан "Башҡорттар.RU" һәм "XX Централ" командалары тәүге уйында ҡатнашҡан иллегә яҡын төрлө команданы тапҡырлыҡта уҙҙырып, баш ҡала тамашаһына иң шәп көлкәлә кисә бүләк итте. Ғәҙәттәгесә, һәр команда үҙенсәлекле, бығa тиклем бер ҡайҙа ла яңғырамаған көләмәстәр һөйләне, мәҙәк хәл-ваҡиғаларҙы һынландырҙы. Финал уйынының темаһы "Беҙ эштәр менән мәшғүл, ҡыҙҙар менән түгел!" тип аталғас, ҡыҙҙар-егеттәр араһындағы мөнәсәбәттәр, мөхәббәт темаһына арналған шаяртыуҙар күп булды. Балаларҙың тормоштағы хәл-ваҡиғаларға, күренештәргә иғтибарлы булыуын, һәр нәмәгә юмор күҙлеге аша үҙ ҡарашы булыуына тағы бер ҡат инандыҡ был уйында. Капитандар ярышы "Кендек" КВН-командаһы лидеры Руслан Ғәлиевтың сығышынан башланды. Тамашасылар Русландың "Апайым еҙнәгә "Донъям миндең" тип яратып көйәүгә сыҡты һәм донъяның артына тибеп йәшәп китте", тиеүенән ихлас көлдө. "Тик ҡыҙҙар" командаһы капитаны Илзирә Ильясованың иһә үҙенең бишенсе синыфтан алып депутат булырға хыялланыуы, шуға "Өйгә эште иртәгә ысынлап эшләп киләм", тип, уҡытыусыларын һәр ваҡыт ышандыра килеүе тураһында бөйөн итеүе лә рәхәтләнеп көләргә сәбәп булды.

Башҡорт Юниор КВН лигаһының финал уйынында быйыл "Кендек" командаһы беренсе урын алды. "Башҡорттар.RU" - икенсе, "Төньяҡ амурҙары" - өсөнсө урынға лайыҡ булды. "XX Централ" һәм "Тик ҡыҙҙар" командаларына әүҙемлектәре өсөн маҡтау грамоталары һәм иҫтәлекле бүләктәр тапшырылды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Кендек" КВН-командаһы капитаны Руслан Ғәлиевтан квнсы кешенең асылы тураһында ҡыҙыҡһынғас: "Йыл әйләнәһенә күргән, ишеткән көлкөлө хәл-ваҡиғаларҙы, уйына килгән мәрәкәләрҙе ҡуйын дәфтәренә теркәп барған, бер туҡтауһыҙ ижад иткән кеше", - тип яуаплағайны. Башҡорт асыҡ КВН лигаһына талантлы башҡорт балаларына ижад итергә, үҫергә, шәхесен тәрбиәләргә мөмкинлек биреп, ошо йүнәлештә алып барған эштәре өсөн рәхмәт әйтергә генә ҡала.**

**Ғәлиә ШӘМСЕТДИНОВА.**

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# УЛАНДАР ОНОТҠАНДЫ...

## ейәндәр иҫкә төшөрһөн

Ҡатын уңғаны иргә яраған, ир уңғаны илгә яраған.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Донъяға ул тиклем айыҡ күҙҙәр менән ҡарама, юҡһа, аҡылдан яҙырһың.

**(Веслав Брудзиньский).**

Уландар онотҡанды ейәндәр иҫкә төшөрһөн. Шуға ла улдарыңды тәрбиәләгәндә ебәргән хаталарыңды ейәндәреңде тәрбиәләгәндә төҙәтеү кәрәк.

**(Эйлис Росси).**

Психик сирле ике икең биш була, ти, ә нервыһы сирле ике икең дүрт була икәнен белә һәм шуның өсөн көйөнә.

**(Гордон Гаммак).**

Теләктәр күплеге - яртылаш ғүмер, ә вайымһыҙлыҡ - ярты үлем.

**(Хәлил Джебран).**

Нәфрәтте йәшереү еңел, мөхәббәтте йәшереү ауыр, ә иң ауыры - вайымһыҙлыҡты йәшереү.

**(Людвиг Берне).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Кеүәтле бер батша бик күп илдәрҙе яулап ала, уның исемен ишетеү менән генә лә күп батшалыҡтар дер ҡалтырай. Ә үҙ халҡы уны бик тә хөрмәт итә, сөнки ул яулап алынған байлыҡтарынан халыҡҡа ла өлөш сығара, шуға ла уның илендәгеләр байлыҡта һәм муллыҡта йәшәй. Ирҙәрҙең барыһы ла үҙ батшаһына оҡшарға ынтыла, уның һымаҡ үк көслө һәм мөһабәт булыу хыялы менән яна. Ә ҡатын-ҡыҙҙар уны атай урынына күрә.**

**Батша ҡартая, ул ниндәйҙер сәйер сир эләктерә: ҡулдары һәм аяҡтары ҡатып ҡала, арҡаһына көмөрөһө килеп сыға. Ҡултыҡ таяҡтары менән саҡ ҡына хәрәкәтләнә ала. Был хәлдән һуң батшалыҡта ҡара көндәр башлана. Барыһы ла ҡулдаҡ аҫтына көмөрө эшләп ҡуя, барыһы ла эшкә ҡултыҡ таяҡтарына таянып йөрөй башлай. Батша образына яраҡлашырға теләмәгәндәр ҡаты хөкөмгә тарттырыла. Бары тик батшаның улы ғына был хәл менән килешергә, атаһының образын үҙендә йөрөтөргә теләмәй. "Ниңә һин башҡаларға эйәрергә теләмәйһең?" - тип һорай унан батша. "Мин бит йәш һәм сәләмәт, мин ҡултыҡ таяҡтарһыҙ ҙа йөрөй алам", - тип яуаплай уға улы. "Ярай, улайһа, күрһәтәйем әле мин һиңә күрмәгәнеңде", - тип ярһый батша һәм ҡулындағы таяғы менән улына һелтәнәйем тиһә, ҡулы күтәрелмәй, бар көҙәһе хәрәкәтһеҙ ҡатып ҡала. Бер нисә көндән батша вафат була...**

**Шулай инде, ноябрь май айының нисек тын алғанын белмәй, ә майҙың ноябрҙә эше юҡ..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 5 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары — **50665, 50673**

Тиражы - 5007
Заказ - 924/05